ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2018

№52 (834)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атлы башҡорт...**

**бөгөн ниңә йәйәүле?**



3

**Беҙҙең балалар...**

**һәм арифметика мөғжизәһе**



6

**Үҙ өлгөндә тәрбиәлә**



7

**Ир-егеттәребеҙ...**

**шундай көскә эйә!**



13

**ТВ-программа** 14

***Бер саҡ танылған француз модельеры Пьер Карденды: "Һеҙҙең костюмығыҙ шул тиклем ҡупшы, әллә ҡайҙан уҡ күҙгә ташлана", - тип маҡтағандар. "Әгәр ҙә күҙгә ташлана икән, тимәк, мин бөгөн ул тиклем ҡупшы кейенмәгәнмен", - тип яуап бирә модельер.***

ҠОТЛАЙБЫҘ!

# ҒӘМӘЛДӘР БУЛҺЫН БӨЙӨК!

*Эт йылы ла үтеп бара,*
*Ҡалды бары сәғәттәр,*
*Иҫке йылда тороп ҡалһын*
*Бөтә насар ғәҙәттәр.*

*Киләһе йылға инәйек*
*Изгелек эшләр өсөн,*
*Иңдәребеҙҙә тояйыҡ*
*Дуҫлыҡ, татыулыҡ көсөн.*

*Ҡанатлы булһын хыялдар,*
*Маҡсаттар булһын бейек,*
*Өмөттәр булһындар яҡты,*
*Ғәмәлдәр булһын бөйөк!*

*Алып кил һин, ҡабан йылы,*
*Татыулыҡ, муллыҡ, байлыҡ.*
*Юлдаш булһын йыл буйына*
*Шатлыҡ! Мөхәббәт! Һаулыҡ!*

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**




ӘЙҘӘГЕҘ...

# ХӘҠИҠӘТКӘ ӨЛГӘШӘЙЕК!

**Гәзитебеҙҙе уҡыған, уға тоғро ҡалған барса дуҫтарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Беҙҙән һеҙгә шундай теләк: ғүмер буйы эҙләгән Хәҡиҡәтегеҙҙе табырға яҙһын. Беләбеҙ: һеҙҙең өсөн дә, беҙҙең өсөн дә ул Хәҡиҡәт - Уңыш, Бәхет, Һаулыҡ, Мөхәббәт, Именлек һынында. 2019 йылда Уңыш, Бәхет, Һаулыҡ, Мөхәббәт, Именлек һәр берегеҙҙең ишектәрен шаҡыһын, әйҙә.**

Башта риүәйәт. Аллаһы Тәғәлә кешене, уның йәнәшендә көн итәсәк бар тереклекте, тәбиғәт мөғжизәләрен барлыҡҡа килтергәс, нимәлер етмәгәнен аңлап, уйға ҡалған. "Бөтөн ағзалары теүәл был әҙәм затының Ерҙәге тормошо нисегерәк ҡоролорға тейеш һуң? Уның йәшәү мәғәнәһе ниндәйерәк булыр, маҡсаты ни?" Уйлана торғас, үҙ һорауына яуабын да тапҡан: "Әҙәм балаһының ерҙәге йәшәү маҡсаты - Хәҡиҡәт эҙләү, Хәҡиҡәткә өлгәшеү!" - тип йомғаҡламаҡсы иткән дә... тағы уйға ҡалған. "Һуң әҙәм балаһы бит ул Хәҡиҡәтте ғүмере буйы эҙләргә тейеш. Эҙләнгән нәмә юлда тәгәрәп ятмай, уны ныҡлап йәшерергә кәрәк! Ҡайҙа йәшерергә?" Хоҙайҙың был йомағын фәрештәләре лә ишеткән һәм күмәкләп уға яуап эҙләргә тотонған. Тик бер фәрештәнең генә яуабын ҡабул иткән Аллаһ: "Хәҡиҡәтте тау башына йәшерһәң дә, диңгеҙ төбөнә төшөрөп ҡуйһаң да, кеше уны табасаҡ. Хәҡиҡәтте беҙ уның йөрәгенә йәшерәйек. Хәҡиҡәтте тапҡанға тиклем ул донъяны, кешеләрҙе йөрәге менән ҡабул итергә, бар ғәмәлдәрен йөрәге ҡушҡанса тормошҡа ашырырға өйрәнергә тейеш..."

Эйе, йылдар алышынған һәр мәл һайын ғүмеребеҙ буйы эҙләгән, эҙләмәйенсә табып булмаған Хәҡиҡәтте инде килеп осратырбыҙ тип өмөтләнәбеҙ. Эҙләнеү юлында ниҙәр генә кисермәйбеҙ, ниндәй генә мәсьәләләрҙе хәл итмәйбеҙ, хәл итә алмағандары тураһында иһә... йә өндәшмәйбеҙ, йә оран һалабыҙ. Әле бына Башҡортостаныбыҙ хакимлығындағы үҙгәрештәр артынса күп мәсьәләләр тураһында оран һалыу мөмкинлектәре асылып тора. Интернет селтәрҙәрендә Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров адресына ла йүнәлтеп була әйтә торғандарҙы. Беҙ ҙә уҡыусыларыбыҙҙың һүҙен властағыларға ишеттерергә өмөтләнеп, гәзитебеҙҙә **"Әйтер һүҙем бар!"** тигән рубрика асып ебәрҙек. Ул рубрикала быйылғы йылдың был һуңғы һанында ла бер нисә уҡыусыбыҙҙың Хәҡиҡәт эҙләүенә юлығырһығыҙ. Юлай Ғәлиуллин атлы егетебеҙ, мәҫәлән, тотош милләт яҙмышы өсөн борсола һәм: "Башҡорттар атлы халыҡ, Хоҙай Тәғәлә беҙҙе атлы итеп яралтҡан. Совет заманында аттан төшкәйнек, халыҡ юғала башланы. Беҙгә аттар үрсетеп, атҡа атланырға кәрәк..." - тигән Хәҡиҡәткә өлгәшергә саҡыра. Тимерғәзим Усманов атлы уҙаман: "Ғаиләһен тәьмин итеү өсөн ир-егеттәребеҙҙең ирекһеҙҙән ситкә аҡса табырға сығып китеүе елеккә үткән. Ауыл хужалығы бөгөн ауыр хәлдә, хәҙер киренән колхоздарҙы тергеҙеп булмаһа ла, кооперативтар төҙөүгә иғтибар йүнәлтеп эшләй башлаһаҡ, моғайын, уңышҡа өлгәшербеҙ", - тигән тәкдимен Хәҡиҡәт итеп күтәрә. "Сит илдәр менән тыныс хеҙмәттәшлек һәм партнерлыҡ нигеҙендә ил иҡтисадын аяҡҡа баҫтырыу, ябай граждандарҙың тормош хәлен яҡшыртыу, сығымдарға ҡарағанда килемдәрҙең өҫтөнлөк итеүе - бына нәмә кәрәк беҙгә бәхетле булыу өсөн", - ти Фәүзиә Иҙелбаева. Күрәһегеҙ, беҙҙең уҡыусыларыбыҙ үҙ тамағын, үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыуҙан алыҫ, улар тотош ил, республика, милләт мәнфәғәтен алға һөрә, шул мәсьәләләрҙең хәл ителеүендә күрә Хәҡиҡәтте.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ЮЛДАР БУЛҺА,

## автобус йөрөһә...

**Өфө һәм башҡа ҙур ҡалаларҙың мәсьәләләре етәкселәрҙең күҙ алдында. Баш ҡаланан ситкә киткән һайын проблемалар әҙәймәй, әммә күҙ осона ла әллә ни эленмәй. Ауылда йәшәүселәр ҙә, күпселек осраҡта, баҫалҡы һәм үҙҙәрен борсоған мәсьәлә тураһында ҡысҡырып әйтеп бармай. Күпселек ололар компьютер менән дуҫ түгел. Шуға күрә, гәзиттәге әлеге рубрика бик тә яҡшы булды әле.**

Бөрйән районында тыуып үҫтем, бөгөнгө көндә Баймаҡ ҡалаһында ғүмер итәм. Ләкин тыуған яҡтарыма йыш барырға тырышам. Барған һайын күңелем бошоноп ҡайтам. Республика етәкселеген дә Башҡортостандың йөҙөк ҡашы - Бөрйән яҡтарына сәйәхәт ҡылырға саҡырам. Бигерәк тә уларҙың маршруты Стәрлетамаҡ - Мораҡ юлынан Ырғыҙлы ауылы аша үтеп, "Шүлгәнташ" мәмерйәһенә һуғылып, Иҫке Собханғолға барыр, тип өмөтләнәм. Ләкин енел автомобиль урынына вездеход менән килергә кәңәш итер инем. Юлдар бәләһе - дөйөм Рәсәйгә хас икәнен яҡшы беләм, ләкин ошо маршруттағы юлдан йөрөргә ҡурҡып торола. Район үҙәгенә йәки Мораҡҡа тиклемге әҙ генә араны үтеү өсөн дә ике сәғәттәй ваҡыт кәрәк. Ә "Шүлгән" мәмерйәһенә килгән туристарҙың иҫе-аҡылы китеп ҡайта шул юлдарға. Туризмды үҫтереү тураһында күп һөйләнелә, ләкин ысынында бөтә нәмә туристар килмәһен өсөн эшләнә кеүек. Билдәле, райондың үҙенең генә хәленән килмәй был юлға асфальт түшәү һәм һәр ваҡыт уны йүнәтеп тороу. Бөтә донъянан туристарҙы үҙенә йәлеп итеп торған Бөрйән юлдарын тәҙәкләндереүҙә республика бюджеты ла ҡатнашырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Шулай уҡ автобус мәсьәләһе лә хәл итеүҙе көтә. Ни өсөн әллә нисә ауыл автобусһыҙ интегергә тейеш? Дауахана, собес һәм башҡа төрлө һорауҙар менән күп йөрөргә тура килә, тик автобустың юҡлығы бәкәлгә һуға. Ошо тарафтарҙа йәшәүселәр һәр ваҡыт бараһы еренә һунлай, сөнки иртә таңдан юлға сығып торһа ла, шул йүнәлештәге еңел машиналарҙа урын булмай. Былай ҙа эшһеҙ һәм аҡсаһыҙ интеккән халыҡ бер мәсьәләне хәл итеү өсөн икешәр-өсәр тапҡыр район үҙәге юлын тапарға мәжбүр. Ә юл хаҡынын бер яҡҡа ғына 100 һум булыуын иҫәпкә алғанда, былдай "сәйәхәттәрҙең" кеҫәгә ни тиклем һуғыуы аңлашыла торғандыр. Аҙнаһына исмаһам өс тапҡыр ошо йүнәлештә иртәле-кисле автобус йөрөһә, күпме кеше юл ғазабынан ҡотолор ине.

Күрше Әбйәлил районында булдырылған автобус хәрәкәтенең ни тиклем яҡшы булыуын күреп, бер Бөрйән кешеһенең иҫтән яҙыуын лаҡап итеп һөйләйҙәр хәҙер. Ысынлап та, күршеләргә был йәһәттән "Афарин!" тиергә генә ҡала. Сәғәт һайын автобустар йөрөп кенә тора, һис тә ҡалалағы маршрут автобустарҙан айырылмай. Юлдар яҡшы булғас, шәхси эшҡыуарҙар ҙа был эште асырға ҡурҡмаған. Ошо мәсьәләләр - юлдар һәм автобустар - минең тыуған яғымда ла ыңғай хәл ителер, тип ышанам.

Баймаҡ районына килгәндә, районда күпләп ат тотоусылар байтаҡ. Шәхси хужалыҡтарҙа ла, фермерҙар ҙа йылҡы малын үрсетеүгә күп көс һалалар. Ләкин уларҙың ҡарауһыҙ юл буйҙарында йөрөүе бер ҙә килешкән эш түгел. Өйөрө менән ҡапыл юлға килеп сыҡһынмы, төндәрен күперҙәрҙә тороуҙарымы - юл фажиғәләрен арттырыуға булышлыҡ итеүсе факторҙарҙың береһе. Ни өсөн өйөр хужалары үҙҙәренең малдарына ла, кеше ғүмеренә лә шул тиклем битараф ҡарай икән? Ат көтәһегеҙ икән, яуаплылыҡ тураһында ла оноторға ярамай.

**Кәрим ЛОТФУЛЛИН.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

**Башҡаға ышаныс ҡаҡшаған хәлдә лә, Яңы йылға матур өмөттәр бағлау ҡанына һеңгән әҙәм балаһының. Уның менән бергә тормошобоҙға ниндәйҙер көтөлмәгән мөғжизә килеп инер төҫлө. Бала саҡтан алып көтәбеҙ ул мөғжизәне. Ә бит, уйлап ҡараһаң, Яңы йыл - ул ғүмеребеҙҙе хисаплаусы һандарҙың алышыныуы ғына... Ваҡыт елеүенең күрһәткесе.**

# БӘХЕТ ӨСӨН КҮП КӘРӘКМЕ?

Ә бына беҙҙең анды, тотош йәшәйешебеҙҙе ҡоршап алған система барыбер үҙгәрешһеҙ ҡала. Шунан сығыптыр ҙа, күрәһең, яңы йыл алдынан ғына ВЦИОМ - Бөтөн Рәсәй йәмғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән тикшеренеүҙәр ҡапма-ҡаршылыҡлы һөҙөмтәләре менән аптырашта ҡалдырҙы. Һорау бирелгән респондентарҙың 84 проценты... үҙҙәрен бәхетле иҫәпләй. Ләкин дәүләт эсендәге "дәүләт" - ғаиләлә бәхетлебеҙ, ти улар. Бынан тыш, бәхет - сәләмәтлек, тип күрһәтеүселәр ҙә байтаҡ. Ә бына яуап биргән кешеләрҙең бөтәһе лә ил өсөн ҡурҡыуын, хафаланыуын белдерә. Күптәр эшһеҙ тороп ҡалыуҙан, иҡтисад һәм сәйәсәт өлкәһендәге тоторокһоҙлоҡтан ҡурҡа. Популяр сериал геройы әйтмешләй, бына шундай "картина с маслом". Бер яҡтан, ҡурҡып йәшәү, икенсе яҡтан, шәхси бәхет тойғоһо дәүләт ҡурсыуын көтөп арыған кешене үҙ ҡабырсағына нығыраҡ йомолорға, үҙ йүнен күберәк үҙенә күрергә мәжбүр итә. Шәхси тормоштан ҡәнәғәт булыу һәм сәләмәтлек - ул ысынлап та бәхет булһа ла, ил иңен тойоу, яҡлаулы булыу ҙа кәрәк халыҡҡа. Шунһыҙ ул - тәрәүһеҙ, ә ундай бәхет тотороҡһоҙ, ныҡымһыҙ була. Әйткәндәй, һорау алыуҙарҙың әлеге һөҙөмтәләре буйынса ВЦИОМ-дың генераль директоры Валерий Федоров үҙе лә хатта шик белдерергә мәжбүр: "Күрәһең, яуап биргәндә ҡайһы берәүҙәр ысынбарлыҡҡа ҡарағанда, хыялдағыһын әйтеп биргәндер..."

Ил тойғоһонан башҡа бәхет юҡ, шуға ла халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында был хаҡта томдарға биргеһеҙ тапҡыр әйтем-мәҡәлдәр күп: "Иле ныҡтың - биле ныҡ", "Иле барҙың - көнө бар", "Илдә булһа - иренгә тейә" һ.б. Яңы йылға әйтер һүҙ шул: Рәсәй ҡеүәтенә иш булып, Башҡортостаныбыҙ һәр йәһәттән алдынғы төбәктәрҙең береһенә әүерелһен өсөн көсөбөҙҙө йәлләмәйек. Бынаң өсөн юлдар ҙа асылып тора әле, иншалла. Ил башына белемле, эшмәкәр, тәүәккәл, кеше йәнле етәксе килде - уның башланғыстарын күтәреп алырға, мәсьәләләрҙе бергәләшеп хәл итергә, ендәрҙе һыҙғанып эшкә тотонорға форсат тыуҙы. Сит өлкәләрҙә, алыҫ һәм һалҡын Себерҙә аҡса эшләүселәр үҙ илебеҙгә ҡайтып, үҙ эштәрен асып ебәрһендәр ине. Әрәмә, ағас үҫентеләре баҫып алып барған баҫыу ерҙәре һеҙгә көтә, аҫыл ир-егеттәр. "Ере барҙың - иле бай", тип юҡҡа әйтмәгән бит халҡыбыҙ. Ошо сүрәттә лә, бәхет өсөн был ғына етмәйҙер әле. Илйортобоҙға именлек тә бик кәрәк. Быныһы инде ил үә хөкүмәт етәкселеге яуаплылығына төшә. Дипломатияның төп шарты - көс һәм агрессияны йүгәнләй алыу сәнғәте, тимәк, аҡыл көсө өҫтөнлөгө һис ҡасан булмағанса кәрәк бөгөн. Асыуҙы асыу менән ауыҙлыҡлап булмай. Сит илдәр менән тыныс хеҙмәттәшлек һәм партнерлыҡ нигеҙендә ил иҡтисадин аяҡҡа баҫтырыу, ябай граждандарҙың тормош хәлен яҡшыртыу, сығымдарға ҡарағанда килемдәрҙең өҫтөнлөк итеүе - бына нәмә кәрәк беҙгә бәхетле булыу өсөн.

Әйткәндәй, тыуыр йылыбыҙ билдәһе Ҡабан тыныс холҡо, гәҙел, әйткән һүҙенән кире ҡайтмауы, маҡсатҡа ынтылышлылыҡ кеүек сифаттары менән айырылып тора, имеш. Йыш ҡына ул бәхәсле мәсьәләләрҙә тыныслыҡ илсеһе булараҡ та файҙаланыла, тип әйтәлә көнсығыш йондоҙлоо фаразлауҙарында. Шулай булһын, әйҙә, юрауҙары ысынға сыҡһын. Яңы йылдың иң ҙур мөғжизәһе ана шул булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ХӘҠИҠӘТКӘ ӨЛГӘШӘЙЕК!

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

Хәйер, һүҙ башы башҡа ине, уҡыусыларыбыҙға ҡотлау яуҙырып, көтөп алған байрамығыҙ мөбәрәк булһын, тип өндәшеү ине. Шулай уҡ барығыҙға ла Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбировтың, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мансур улы Мостафиндың ҡотлауҙарын, матур теләктәрен дә еткерергә килгәйне. Ил-йорт хужаларының әйткәнен, фарманын һанлаусан кешеләр булараҡ, уларҙың теләктәренә, ихлас ҡотлауҙарына йөрәктәребеҙҙе асайыҡ, уларҙың изге ниәттәренә, эштәренә фатихабыҙҙы бирәйек, тимәксе инек. Республика халҡы, ысынлап та, Хәҡиҡәт көсөй, етәкселәрҙең һүҙе эштән айырылмауын теләй. Улар Радий Фәрит улының: "Беҙҙең Рәсәй, Башҡортостан йәмғиәтендә гәҙеллеккә бик етди ихтыяж бар. Шуға ла чиновниктың тәкәбберлеген, тупаҫлығын, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә эрелеген тамырынан ҡоротоуҙы талап итәсәкмен. Кешеләр менән кешеләрсә мөғәмәлә итергә кәрәк... Беҙҙең республикала байҙарса мөнәсәбәт булмаясаҡ. Чиновниктарҙың халыҡ менән танау күтәреп аралашыуы булмаясаҡ. Кешеләрҙе ишетегеҙ, уларға иғтибарлы булығыҙ һәм мәсьәләләрен хәл итегеҙ. Бәлки, һеҙ берәүҙән дә рәхмәт һүҙе лә ишетмәҫһегеҙ. Кирәһенсә, һеҙгә халыҡтан тәнҡит һүҙҙәре күберәк тә яуыр. Донъя шулай ҡоролған. Ҡасан да булһа ишетерһегеҙ һеҙ ул рәхмәт һүҙен, ләкин уға тиклем һеҙгә бик оҙаҡ һәм егелеп эшләргә тура киләсәк әле..."- тигән һүҙҙәрен Хәҡиҡәт итеп, үтә яҡын ҡабул итте, ышанды. Ошо ышаныс аҡланһын ине инде.

Әйткәндәй, баяғы риүәйәттә әйтелгәнсә, Хәҡиҡәткә өлгәшеүҙең бер сере бар: үҙ йөрәгеңә күҙ һалырға, маҡсатыңа өлгәшеү сараларын аңың менән ҡабул итергә, Кешеләр хаҡына эшләгән ғәмәлдәреңде яратырға кәрәк. Уйланырға кәрәк. Башҡаларҙы тыңларға, һығымталар яһарға өйрәнергә кәрәк. Радий Фәрит улы ла "Буш вәғәҙәләр биреп, халыҡты алдамағыҙ", тип, шуға ишаралай түгелме һуң?..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров хеҙмәт алдынғыларын дәүләт наградалары менән бүләкләне. "Королтайға Мөрәжәғәтнамәмдә тап һеҙҙең кеүек кешеләр - үҙ эшенең ысын оҫталары хаҡында һөйләнем. Улар кешеләргә ҡарата хәстәрлеге һәм иғтибары менән яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшә, эшкә бөтә көсөн һалып, ҡалаларыбыҙҙа һәм ауылдарыбыҙҙа тормошто һиҙелерлек яҡшырта. Республика именлегенә хеҙмәт иткәнегеҙ өсөн ихлас рәхмәтемде белдерәм!" - тине Радий Фәрит улы.

✓Башҡортостандың медицина ойошмалары республика бюджеты иҫәбенә тағы 35 ашығыс ярҙам машинаһына эйә булды. Был хаҡта республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Бынан алда республиканың башҡа ҡала һәм район дауаханаларына 23 ашығыс медицина ярҙамы автомобиле оҙатылғайны. Республика Хөкүмәтенән бөтәһе 172 ашығыс ярҙам автомобилен һатып алыу өсөн аҡса бүленгән.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Соликамскиҙа шахталағы янғында ғүмерҙәре өҙөлгән Башҡортостан эшселәренең туғандарының һәм яҡындарының ҡайғыһын уртаҡлашты. Ул Өфө һәм Белорет районы хакимиәттәренә мәрхүмдәрҙең ерләүҙе ойоштороуҙы үҙ өҫтөнә алырға һәм уларҙың балаларына даими ярҙам күрһәтергә ҡушты.

✓Башҡортостанда көҙгө саҡырылышта һалдатҡа алыныусыларҙың һуңғы партияһы хеҙмәт итеү урындарына оҙатылды. Республика ҡала һәм райондарынан 250 егет Ҡораллы Көстәрҙә тулыландырҙы. Көҙгө кампанияла Үҙәк хәрби округынан 55 мендән ашыу егет саҡырылған, уларҙың 4000-дән күберәге - Башҡортостандан.

✓Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев 2019 йылда торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙы ике этапта индексациялау тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостанда республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың бойороғо менән 2019-2023 йылдарҙа коммуналь хеҙмәттәр өсөн сикке түләү индекстары раҫланды. Киләһе йылдың 1 ғинуарынан барлыҡ районҡалаларҙа хаҡ арта. 1 июлдән хаҡтар иң күбе 4 процентҡа артасаҡ.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# АТЛЫ БАШҠОРТ...

## бөгөн ниңә йәйәүле?



**Мин ноябрь аҙағында Бешкәк ҡалаһында үткән III Халыҡ-ара төрки телле халыҡтарҙың традицион спорт уйындары симпозиумында ҡатнаштым. Унда донъяның төрлө төбәктәренән 135 делегат булды. Рәсәйҙә Алтай, Тыва, Хакас, Башҡортостан республикалары күрһәтте.**

Был бик етди сара ине. Унда нигеҙҙә ошо йүнәлеште өйрәнеүгә бар ғүмерен арнаған олпат-олпат ғалимдар, профессорҙар ҡатнашты. Йәйгеһен Ҡырғыҙстанда үткән Бөтөн донъя күсмәндәр уйындары уның практик өлөшө булһа, был симпозиум теоретик өлөшөн тәшкил итте. Йәғни, был ғалимдар халыҡ ижадын, халыҡ мираҫын, халыҡ уйындарын өйрәнә, улар араһынан ҡайһыларын ошо күсмәндәр уйындарына индереү мәсьәләләрен тикшерә. Мин "Башҡортостанда спорт уйындарын тергеҙеү һәм үҫтереү" тигән темаға сығыш яһаным. Әйтергә кәрәк, миңә ҙур ихтирам күрһәттеләр, практиканан теорияға килеүем дә йоғонто яһағандыр. Симпозиумды йомғаҡлау өлөшөндә президиумға саҡырып ултырттылар. Дөрөҫөн әйткәндә, Башҡортостанды быға тиклем белмәнеләр ҙә, күрмәнеләр ҙә, вәкилдәр ҙә йөрөмәне. Хәйер, унда барырлыҡ ғалимдар ҙа юҡ. Ишмөхәмәт Ғәләүетдиновтың "Башҡорт халыҡ балалар уйындары" тигән хеҙмәтенән тыш, китаптар ҙа юҡ. Ҡыҙыҡһынған кеше лә юҡ. Төрксойҙан сыҡҡас, төрки донъяһы менән бәйләнештәр ҙә өҙөлә бара. Бөгөн вуз студенттары ни өсөн милли уйындар, хәрби ҡоралдар һ.б. темалар буйынса диплом эштәре яҙмай? Ҡайҙа беҙҙең Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов кеүек шәхестәребеҙҙең эшен дауам итеүселәр?

Бөгөн балаларға милли уйындар түгел, ә компьютер уйындары ҡыҙығыраҡ. Улар милли уйындарҙы белмәй үҫә һәм беҙ ошо мираҫыбыҙҙы юғалтыуыбыҙ ихтимал. Бала уйындар аша тәрбиәләнә. Уйындар аша бала башҡалар, тәбиғәт менән үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡорорға өйрәнә. Хәҙерге балалар "Йәшенмәк" тә уйнай белмәй, балалар фольклоры ла онотолоп бөткән. Беҙгә хәҙер ошо байлығыбыҙҙы тергеҙеү буйынса әүҙем эшләргә кәрәк.

Башҡа проблемалар ҙа етерлек. Мәҫәлән, һыбай уҡтан атыуҙы тергеҙә башлағас, аттар таба алмайбыҙ. Мәҙәниәт министрлығы, аттар Ауыл хужалығы министрлығында, ти, унда барһаң, беҙ аттарҙы үрсетәбеҙ генә, тип, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына ебәрәләр. Был министрлыҡ, беҙҙең реестрҙа конкур, футбол, хоккей бар, әммә "Ылаҡ", һыбай уҡтан атыу, ҡыҙ ҡыуыу, бәйге юҡ, ти. Ҡабат Мәҙәниәт министрлығына ебәрәләр. Йәки бөркөтсөлөктө алайыҡ. Башҡорттар борон бөркөтсө булған. Бөгөн республикала берҙән-бер тиерлек бөркөтсө бар. Уны телевизорҙан күрһәткәйнеләр, Роспотребнадзор штраф һалып та киткән. Законлы рәүештә рөхсәт һорағайны, ярамай, бөркөт "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән, тигән яуап алды...

Минең тәҡдимем бар: ошо барлыҡ министрлыҡтар менән эшләй торған комитетмы, үҙәкме, департаментмы йәки этноспорт буйынса айырым министрлыҡмы ойоштororға ине. Был республикала милли спортты үҫтереү өсөн кәрәк. Юғиһә, беҙ бөтөнләй артта ҡаласаҡбыҙ. 2020 йылда Бөтөн донъя фольклориадаһы буласаҡ. Йыр-бейеүҙән башҡа күрһәтер нәмәбеҙ ҙә юҡ бит. Милли уйындарығыҙ ниндәй, тиһәләр, яуабыбыҙ нисек булыр? Әлбиттә, был йәһәттән һуңғы йылдарҙа үҙгәрештәр бар. Йыйындарҙа "Ауҙарыш", "Таш ороу", "Ашыҡ" уйындары уйнала башланы. Энтузиастар тырышлығы менән республикала "Ылаҡ" уйыны командалары барлыҡҡа килде. Әммә үҫеш тураһында һүҙ һөйләү иртәрәк.

Башҡорттар атлы халыҡ, Хоҙай Тәғәлә беҙҙе атлы итеп яралтҡан. Совет замаңында аттан төшкәйнек, халыҡ юғала башланы. Беҙгә аттар үрсетеп, кире атҡа атланырға кәрәк. Шул саҡта ғына беҙ халыҡ булараҡ күтәрелеп китәсәкбеҙ. Борон һәр малай бала саҡтан ат менән идара итергә өйрәнгән. Өс йәшендә уны һыбай ултыртҡандар. Ат бит ул хайуан, уларҙың уҫалдары, тешләшкәндәре бар. Өс йәшенән бала уның менән уртаҡ тел табып, уны тыңлатырға, ашатырға, һыу эсерергә, йүгәнләргә тейеш булған. Шул рәүешле ирҙәр тәрбиәләнгән! Хәҙер үҙ һүҙендә торған, ныҡышмал, көслө, үҙенә яуаплылыҡ ала алған ир-егеттәр ҙә һирәк. Бына ошо халыҡ тәрбиәһе юғалғанға ул. Беренсенән, баланың холҡон тәрбиәләй торған милли уйындар онотолған, икенсенән, аттарыбыҙ юҡ. Тамырҙарыбыҙға төшөп тергеҙмәһәк, беҙҙең халҡыбыҙ бөләсәк. Әгәр ҙә һәр ауылда 500 йылҡы малы булһа, ирҙәр Себергә китмәҫ ине. 500 йылҡың булһа, һиңә кредит та кәрәкмәй - матди байлыҡ бит ул. Райондың 20 ауылында 10 мең ат буласаҡ ул саҡта. Башҡорт аты талымһыҙ, үҙенә үҙе ризыҡ таба. Борон ихтилалдарҙан һуң карателдәр аттарҙы йыйып алып китә торған, 20 йылдан һуң йәш быуын ир-егеттәре яңынан үрсегән аттарҙа тағы ла яуға күтәрелә торған. Йылҡысылыҡ башлыса ҡымыҙ һәм ит етештереү йүнәлешендә үҫешә. Әлеге мәлдә ярыштар өсөн бер районда 10 ат табыуы ауыр. Бер шулай Подымалово эргәһендә өйөр күреп, күнекмәләр өсөн урын булыр, тигән ниәттән һөйләшергә барғайным. Көтөүсе йылҡы көтөүен машина менән көтөп йөрөй, өйрәтелгән аттар юҡ хәҙер. Өйрәтә белмәйҙәр, эйәрҙәре, йүгәндәре, сыбыртҡылары юҡ. Кейеҙ ағас тирмәләрҙе металдан ҡоролған брезент тирмәләр алыштырҙы. Бар этноспорт һабантуйҙа ғына. Уларында ла йышыраҡ волейбол, футбол уйнайҙар, ярай әле көрәш һаҡланып килә. Ҡороҡсо тигән һөнәр бейеүҙә генә тороп ҡалды беҙҙә! Ҡаҙаҡтарҙа бер уйын бар. Кәртәләнгән ергә 13-15 тайҙы индерәләр ҙә, 2-3 егет эйәрһеҙ, йүгәнһеҙ ошо тайға атланып, мөмкин тиклем оҙағыраҡ һыбай атта ҡалырға тейеш. Егетлеккә һынау был. Беҙҙә лә булған элек ҡороҡсолар. Ҡаҙаҡтар менән һөйләшәм, 47 һыбай милли спорт төрө бар, тиҙәр. Эстән генә һанайым, беҙҙә нимәләр бар икән: бәйге, ҡыҙ ҡыуыу, ылаҡ, һыбай уҡтан атыу, ярыш. Тағы 42-һе ҡайҙа? Ә беҙ бит боронғо халыҡ, беҙҙә улар тағы ла күберәк булыуы ихтимал.

Былар тураһында күп һөйләргә була. Бөгөн, Яңы йылға аяҡ баҫырға торғанда, мин халҡыбыҙҙы ошо хаҡта ла уйланырға саҡырам. Башҡа төрки телле халыҡтар араһында оят булмаһын өсөн генә түгел, ә башҡорттоң боронғо уйындары аша балаларыбыҙҙы, тимәк, милләтебеҙҙең тотҡаһы - ир-егеттәребеҙҙе тәрбиәләү өсөн дә кәрәк был.

**Юлай ҒӘЛИУЛЛИН,**
**"Мәргән уҡсы" клубы етәксеһе.**

**Үткән аҙнала Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Мөрәжәғәтнамәһен тыңлаған халыҡ яңы йылға ҙур өмөттәр бағлап тора. Уның ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтә өлкәләге мәсьәләләрҙе өйрәнеүе, халыҡтың аһ-зарын ишетеүе, тапҡан етешһеҙлекте аҙаҡҡа ҡалдырмай, шундуҡ бөтөрөргә ынтылыуы, үҙ бурыстарын еткереп эшләмәгәндәр урынына эшләрлектәрҙе билдәләүе, Башҡортостандың 100 йыллығына арналған маҡсаттарҙы дөрөҫ ҡуйыуы һоҡландырҙы.**

# БЕРҘӘМЛЕК БУЛҺЫН...

## власть һәм халыҡ араһында

Мин дә, ҡырҡ һигеҙ йыл хеҙмәт стажы булған һәм шуның егерме һигеҙен хужалыҡ етәксеһе вазифаһында эшләгән кеше булараҡ, Радий Фәрит улының телмәрен тыңлап, яңынан тормошобоҙҙо гөрләтеп ебәрер мәл етте, тип ултырҙым. Әгәр ҙә ул билдәләгән социаль-иҡтисади проблемаларҙы хәл итеү буйынса системалы эш башланһа, хәлебеҙ яҡшырыуына шик юҡ. Бигерәк тә уның ауыл хужалығын күтәреү, эш урындары һәм тейешле эш хаҡы менән тәьмин итеү, республиканың хеҙмәт йәшендәге халҡын - ситтә эшләп йөрөүсе ирҙәрҙе, йәштәрҙе кире ҡайтарыу тураһындағы һүҙҙәре күңелгә ятты. Был проблемаларҙың хәл ителеүен халыҡ бик күптән көтә ине бит, ғаиләһен тәьмин итеү өсөн ир-егеттәребеҙҙең ирекһеҙҙән ситкә аҡса табырға сығып китеүе елеккә үткән. Ауыл хужалығы бөгөн ауыр хәлдә, хәҙер киренән колхоздарҙы тергеҙеп булмаһа ла, кооперативтар төҙөүгә иғтибар йүнәлтеп эшләй башлаһаҡ, моғайын, уңышҡа өлгәшербеҙ. Быны хөкүмәт ярҙамынан тыш килтереп сығарырлыҡ түгел, халыҡҡа ярҙам итеп ебәрерҙәр, тигән ышаныстамын. Кооперативтар ойоштороу буйынса Рәсәйҙең тәжрибәһе бар, тик тағы ла тотҡан ерҙән һындырып ҡуймайыҡ, тим. Ауыл хужалығында илдең үткәнен өйрәнмәйенсә, ниҙер атҡарып булмай ул, өйрәнһәк, күптән инде фермер ғына беҙҙе туйындыра алмаҫын аңлаған булыр инек...

Халыҡ Радий Фәрит улын тыңлап, моғайын, минең кеүек дәртләнеп киткәндер, бергәләп эшләргә лә әҙерләнгәндер. Ошо дәрт-дарманды һүрелтмәһәк, әйтелгән һүҙҙәрҙең береһе лә елгә осмаҫ. "Айырылғанды - айыу ашар, бүленгәнде - бүре быуыр", тигән бик тапҡыр мәҡәлебеҙ бар. Бөгөн был һүҙҙәр бигерәк тә актуаль, халыҡ һәм власть араһында берҙәмлек булырға тейеш. Шунһыҙ, республиканы аяҡҡа баҫтырыу мөмкин дә түгел. Әйтер һүҙем шул: Мөрәжәғәтнамәлә яңғыраған бурыстарҙан да ҙурын билдәләй алмам, тик шулар системалы рәүештә, юғары яуаплылыҡ менән тормошҡа ашырылһын ине, тип теләйем.

**Тимерғәзим УСМАНОВ,**
**эшҡыуар.**
**Ҡырмыҫҡалы районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда "Башавтотранс" автобустарының яңы дизайны һайланды. Республика хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә төбәктең Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты башлығы Тимур Мөхәмәтйәнов һөйләүенсә, тауыш биреү йомғаҡтары буйынса автобустарҙы Башҡортостан флагы төҫөндә биҙәргә тәҡдим ителә.

✓Марат Әхмәҙуллин Башҡортостан Республикаһының Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул "Башгражданстрой" тресы яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры, Өфө ҡала Советы депутаты булды.

✓2019 йылда бензинға, тәмәкегә, шарапҡа һәм автомобилдәргә хаҡ арта, тиелә Үҙәк банктың докладында. Шулай уҡ киләһе йылда көнкүреш техникаһы, электроника, аяҡ кейеме, кейем-һалым һәм транспорт хеҙмәттәре ҡиммәтләнә. Хәүеф төркөмөндә икмәк-ҡалас изделиелары, емеш-еләк һәм йәшелсә-емеш тә бар - уларҙың үҙҡиммәтендә лә ташыуға һәм һаҡлауға сығымдарҙың өлөшө ҙур.

✓Башҡортостандың ҡала һәм район дауаханалары 23 ашығыс медицина ярҙамы автомобилдәрен алды. Техника аҫҡыстарын тапшырыу тантанаһы Өфөләге "Торатау" конгресс-холы янындағы майҙанда уҙҙы. Хәбәр ителеүенсә, республика хөкүмәтенән тағы 172 ашығыс ярҙам автомобилен һатып алыу өсөн аҡса бүленгән, был төбәктең район-ҡалалары автопарктарын һиҙелерлек тулыландырырға һәм яңыртырға тейеш.

✓Тәбиғәтте һаҡлау прокурорының башланғысын хуплап, төбәк Хөкүмәте "Яҙ көнө ыуылдырыҡ сәсеү осоронда Башҡортостан Республикаһының һыу объекттарында биологик ресурстарҙы һәм уларҙың йәшәгән мөхитен йыл һайын контролдә тотоу, күҙәтеү һәм һаҡлауҙы көсәйтеү саралары тураһында" ҡарар ҡабул итте. Хәҙер Башҡортостан биләмәһендә йыл һайын, 15 апрелдән 15 июнгә тиклем, "Ыуылдырыҡ" операцияһы ойошторола. Был балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән осорҙа браконьерлыҡҡа ҡаршы комплекслы көрәш алып барыу өсөн кәрәк.

✓"Ҡурай байрамы-2017" "Халыҡ театры" премияһына дәғүә итеү конкурсы еңеүсеһе булды, жюриҙың юғары баһаһын алды һәм Рәсәйҙең иң яҡшы милли байрамдары йыйынтығына индерелде. Ғата Сөләймәнов исемендәге республика Ҡурай байрамы "Иң яҡшы милли байрам" категорияһында еңеүсе тип танылды.

**“Башинформ”дан.**

ҠЫҪҠАСА

# ҘУР САРА КӨТӨЛӘ

✓ **Умартасылыҡ буйынса "Апимондия" халыҡ-ара конгресының инспекция төркөмө Өфөлә 47-се конгресты юғары кимәлдә үткәреү ихтималлығы буйынса барышында файҙаланыу ҡаралған инфраструктура объекттары, ҡунаҡхана комплекстары менән танышты.** Тикшереүселәр составына Италияның Бөтөн донъя умартасылар ассоциацияһы тарафынан 2021 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында умартасылыҡ буйынса "Апимондия" халыҡ-ара конгресын үткәреү операторы итеп билдәләнгән AIM Group International компанияһы вәкилдәре ингәйне. Улар Өфөнөң конгресс мөмкинлектәрен юғары баһаланы, ҡунаҡханаларҙың уңайлы урынлашыуын билдәләне. Билдәле булыуынса, 2021 йылда Башҡортостан умартасылыҡ буйынса XLVII "Апимондия" халыҡ-ара конгресын ҡабул итә. Республикаға 80 илдән 10 меңгә яҡын ҡатнашыусы килер тип көтөлә. Быға тиклем умартасылыҡ буйынса Халыҡ-ара конгресты Рәсәй бер тапҡыр ғына ҡабул итте - 1971 йылда форум Мәскәүҙә уҙҙы.

✓ **Рәсәйҙәргә ауыр тормош хәлендә ҡалған осраҡта ваҡытлыса ипотека түләмәҫкә рөхсәт итеүҙәре ихтимал.** Рәсәй банкы шундай тәҡдим менән сығыш яһаны. "Ипотека стандартына ипотека кредиты буйынса түләүҙән ваҡытлыса баш тартыу опционын индерергә тәҡдим итәбеҙ", - ти Үҙәк банк рәйесенең беренсе урынбаҫары Сергей Швецов. Швецов әйтеүенсә, статистика 30-35 йәшкә тиклемге кешеләрҙең эш урынын йышыраҡ алыштыра башлауы хаҡында һөйләй. Ундайҙарға ипотека ваҡыты оҙайтыла, ә Үҙәк банк кредиты ваҡытында түләнмәгән тип иҫәпләмәй, сөнки опцион файҙаланыла. Үҙәк банкта опционды бер тапҡыр ҡулланырға рөхсәт итергә уйлайҙар.

✓ **Башҡортостанда депутаттар "Опекундарға (попечителдәргә) балаһы ҡарауға аҡса түләү тәртибе һәм күләме тураһында" республика законына үҙгәрештәр индерергә ниәтләй. Әгәр уны ҡабул итһәләр, опекундар, балаларына мәктәп тамамлағанда 18 йәш тулһа ла, пособие алыуҙары мөмкин.** "Патронат тәрбиәгә алынған балаларҙың күбеһе 10-сы класта уҡығанда балиғ була. Шуға күрә, 11-се класта уларға пособие түләнмәй. Социаль ғәҙеллек урынлаштырыу өсөн закон проекты менән норма индерергә тәҡдим ителә, уға ярашлы, ҡарауҙағы етемдәргә аҡса уҡыу йылы аҙағына тиклем түгел, ә улар мәктәп тамамлағансы түләнә", - тип асыҡлыҡ индерҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. Башҡортостанда етемдәрҙе тәрбиәләгән өсөн аҡса "Опекундарға (попечителдәргә) балаһы ҡарауға аҡса түләү тәртибе һәм күләме тураһында"ғы законға ярашлы түләнә. Сумма даими индексацияланa. 2018 йылдың 1 ғинуарынан ул өс йәшкәсә сабыйға - 6,3 мең, өс йәштән өлкәнерәк балаға 6,1 һум күләмендә билдәләнгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ШУНДАЙ ҺӨҘӨМТӘ!



**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 2018 йыл йомғаҡтары буйынса губернаторҙарҙың милли рейтингында 11-се урынды алды. Мәскәү мэры Сергей Собянин анкета һөҙөмтәләре буйынса беренсе урынды яуланы. Волга буйы федераль округы төбәктәре етәкселәре араһында Радий Хәбиров, эксперттар фекеренсә, Татарстан президенты Рөстәм Миңнехановтан ҡала икенсе урынды биләй.**

"Радий Хәбиров төбәккә оҙаҡҡа килгән харизмалы һәм абруйлы сәйәсмән булып күренә. Ысынлап та, Хәбировтың идара итеү компетенциялары кимәле шик тыуҙырмай. Муниципаль, төбәк, федераль кимәлдәрҙә эшләү тәжрибәһе, шулай уҡ академик нигеҙе булыуы, һис шикһеҙ, уны көсәйтә", - тип билдәләне сәйәсмән Дмитрий Михайличенко. Эксперт һүҙҙәренсә, яңы Башлыҡтың тәүге айҙарҙа административ элитаны күләмле (тоталь тип әйтерлек) алмаштырыуы Хәбировтың Хәмитов дәүерендәге идара итеү системаһының төп элементтарына ышанмауы хаҡында һөйләй. "Ябай граждандар күҙлегенән яңы административ элитаның һөҙөмтәләрәк булырмы, юкмы икәнен ҡарарбыҙ. Был Рәсәй Федерацияһының ҡатмарлы күп милләтле төбәге етәксеһе булараҡ Радий Хәбировтың һөҙөмтәлелек күҙлегенән дә төп мәсьәлә булып тора. Әлегә уның нимә эшләргә кәрәклеген белеүе күренә", - тине Дмитрий Михайличенко.

Милли рейтингта һуңғы урындарҙы Волгоград һәм Мурманск өлкәләре губернаторҙары Андрей Бочаров һәм Марина Ковтун, Хакасия башлығы Валентин Коновалов биләй.

# ДАУАХАНАЛАР ЭШЕ

**"Маҡсатыбыҙ - Рәсәй Федерацияһында иң яҡшы һаулыҡ һаҡлау системаһы", - Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сираттағы "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"н ошондай һүҙҙәр менән башланы.**

Сираттағы ике сәғәтлек кәңәшмәнең көн тәртибенә социаль селтәрҙәге мөрәжәғәттәрҙе күҙәтеүҙән алып, диспансеризация үтеүгә әҙерлеккә тиклем төрлө мәсьәләләр индерелде. Видеоэлемтә аша "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә хакимиәт башлыҡтары һәм дауаханаларҙың баш табиптары, Өфөнөң 49 дәүләт дауалау учреждениеһы етәкселәре ҡатнашты. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте ҡарамағындағы халыҡ мөрәжәғәттәре буйынса эшсе төркөм етәксеһе Елена Прочаковская социаль селтәрҙә һаулыҡ һаҡлау темаһы буйынса хәбәрҙәрҙең кәмеүен һәм яҙма мөрәжәғәттәрҙең артыуын билдәләне. Һуңғы 10 көндә төбәктә йәшәүселәрҙән 168 мөрәжәғәт килгән, шуларҙың 109-ы - яҙма. Иң киҫкен мәсьәләләр: дарыуҙар менән тәьмин итеү, табип хаталары, эшкә һалҡын ҡарау, табиптарҙың һәм медицина учреждениеларының етешмәүе. Мәҫәлән, Ағиҙел ҡалаһында бала табыу йорто юҡ, йөклө ҡатын-ҡыҙҙар табиптың ҡабул иткәнен бер нисә сәғәт көтөргә мәжбүр; Йоматау станцияһы ауылы балаларына педиатр аҙнаһына бер тапҡыр ғына килә; Октябрьский ҡалаһында педиатрҙар менән тәьмин ителеш 48 процент тәшкил итә; Салауат ҡалаһының балалар поликлиникаларында тар йүнәлешле белгестәр етешмәй; Сибайҙағы бала табыу йортонда ел өрөп тора, ҡарауаттар иҫке; Учалы ауыл дауаханаһында - йыртылып бөткән иҫке диван, тип яҙҙылар. Күптәр дауаханаларҙың, медпункттарҙың аяныслы хәлдә булыуына зарланды. "Петровск ауылындағы кеүек дауаханаға әләкһән, унда дауаланыу түгел, быуылып үлге килә, - тип билдәләне төбәк етәксеһе, үҙенең Ишембай районына сәфәрен иҫенә төшөрөп. - Хакимиәттәрҙең социаль блоктарына ҡыйыҡтарҙа һәм иҙәндәрҙә ярыҡтарҙы бөтөрөүгә өс ай ваҡыт бирәм. Ҙур аҡса түгел, ярлыланып китмәҫһегеҙ. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы март аҙағында һайланма тикшереү үткәрергә тейеш", - тине Радий Хәбиров.

# БҮЛӘК БИРМӘ



**Радий Хәбиров ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтарын, министрҙарҙы һәм башҡа етәкселәрҙе Яңы йыл байрамдары алдынан бүләктәр һәм открыткалар менән алмашыуҙы бөтөрөүҙе һораны.**

"Ҡайһы бер ҡабул итеү бүлмәләрендә ярты метрлыҡ ҡатырға өйөмөн, түшәмгә тиклем ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскәләрҙе һәм ҡиммәтле бүләктәр һалынған тау-тау пакеттарҙы күреү оҡшамай ине. Әйҙәгеҙ, яңғыҙҙарға, өлкәндәргә, мохтаждарға ярҙам итәйек. Минә йәки башҡа етәкселәргә бирергә йыйынған әйберегеҙҙе уларға бүләк итегеҙ. Намыҫығыҙ ҙа таҙа һәм, әйткәндәй, закон буйынса ла дөрөҫ булыр. Ә ҡотлауҙарҙы мессенджерҙар аша ебәрегеҙ, уларҙы юҡҡа үҙләштерҙекмә ни... " - тип яҙҙы Башҡортостан етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Бынан алда Башҡортостандың Финанс министрлығы ла яҡынлашып килгән яңы йыл байрамдарына бәйле бүләк биреүҙең һәм алыуҙың тыйылған булыуын иҫкә төшөргәйне."Рәсәй Федерацияһының дәүләт граждандыҡ хеҙмәте тураһында"ғы Федераль закондың 17-се статьяһына ярашлы, дәүләт хеҙмәткәренә вазифалы бурыстарын үтәүгә бәйле граждандарҙан һәм фирмаларҙан бүләк, шул иҫәптән аҡса, ссуда, хеҙмәттәр, күңел асыу, ял, транспорт сығымдары өсөн хаҡ һәм башҡа бүләктәр алыу тыйылған", - тип белдерҙе финанс ведомствоһының матбуғат хеҙмәтендә. Башҡортостандың Юғары суды ла республикала йәшәүселәргә дәүләт хеҙмәткәрҙәренә бүләк биреүҙең, ә чиновниктарға хеҙмәт бурыстарын үтәүгә бәйле бүләктәр алыуҙың закон нигеҙендә тыйылған булыуы тураһында иҫкә төшөрҙө.

# ХАҠТАР КӘМЕТЕЛДЕ



**2019 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда йәшәүселәрҙең яңы коммуналь хеҙмәт - сүп-сар сығарған өсөн түләү хаҡы күп фатирлы йортта бер кешегә 57-нән 81 һумға, ә шәхси йортта йәшәгән бер кешегә 58-ҙән 81 һумға тиклем тәшкил итә.**

Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Михаил Киреев белдереүенсә, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар йыйыу системаһы булмаған ауылдарҙа уны ҡапсыҡтарҙа сығарыу күҙаллана. Яңы йылдың икенсе кварталынан республиканың һәр тораҡ пунктында яҡында ғына ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар йыйыу өсөн контейнерҙар ҡуйылырға тейеш. Ауылдарҙа сүп-сарҙы даими түгеүҙе ойошторғанға тиклем түләүҙәр халыҡ һәм төбәк операторҙары араһындағы махсус килешеүҙәр менән көйләнә. Ауылда йәшәүселәргә 2019 йылдың беренсе кварталында түләү 35 һумдан артмай. Артабан ул квартал һайын төбәк операторы эшмәкәрлеге зонаһында билдәләнгән дәүмәлгә тиклем етергә тейеш, тип белдерҙе Михаил Киреев. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, республикала ошо хеҙмәт өсөн хаҡ - 70 һумдан, ә ауылда йәшәүселәр өсөн 35-тән артмаҫҡа тейеш. "Хаҡтарҙы артабан арттырыуға килгәндә, төбәк операторҙарының нисек эшләүенә ҡарарбыҙ. Шулай уҡ хәҙергә халыҡтың социаль яҡланмаған ҡатламы өсөн яҡлау саралары ҡарау бик мөһим", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы. Унан тыш, Радий Хәбиров яңы йылдан яңы түләү системаһына күсеүгә бәйле квитанцияларҙа буталсыҡлыҡ булмаһын ине, тип белдерҙе. Республика етәксеһе район хакимиәттәре башлыҡтарына 2019 йылдың аҙағына тиклем һәр тораҡ пунктта контейнерҙар ҡуйырға һәм сүп-сарҙы айырым йыйыу тураһында уйларға ҡушты.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған граффити барлыҡҡа килде. Унда шағирҙың билдәле портреты төшөрөлгән. Эштең күпселек өлөшөн башҡорт һәм рус телдәрендәге "Туған тел" шиғыры биләй. "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы хәбәр итеүенсә, ошо популяр шиғыр рәссам Олег Кайбышевты граффити төшөрөргә илһамландырған. Хәҙер был һүрәт Өфө ихаталарының береһен биҙәй.

✓Өфө Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының автомобилдәрҙе техник күҙәтеү һәм теркәү бүлеге яңы йыл байрамдарында машиналарҙы иҫәпкә ҡуйыу тураһында документтар ҡабул итә. Баш ҡаланың дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре 30, 31 декабрҙә һәм 5 ғинуарҙа иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем эшләй.

✓Өфөлә Яңы йылға биҙәлгән трамвай һәм троллейбус маршрутка сыкты. Уларға неон яҡтыртҡыс ҡуйылған. Яңы йыл трамвайы 5-се "Пушкин урамы - Дәүләт циркы", троллейбус - 13-сө "Белореченский" бисҭәһе - Колхоз баҙары" маршрутында пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерә.

✓"Өфө" футбол клубы "Нефтсе" стадионы янында ябыҡ күнекмәләр манежы төҙөргә ниәтләй. Шулай уҡ Башҡортостан клубы етәкселеге һәм "Өфө" футбол клубы мәктәбенең ата-әсәләр комитеты йыйылышында шәхси медицина үҙәген асыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Башҡортостандың баш ҡалаһында быйыл футбол буйынса донъя чемпионатына уҡыу-күнекмә базаһы төҙөлдө.

✓2018 йылдағы эпидемик миҙгелдә респиратор вирус инфекцияһы сирҙәрен нигеҙҙә парагрипп вирустары, аденовирустар, РС-вирустар, грипп этиологияһына бәйле булмаған башҡа вирустар тыуҙыра. Шуның менән бергә әле йөрөгән вирустар араһында киҙеү вирустары арта бара, тип хәбәр итә Роспотребнадзор.

✓"Башҡортостан" киностудияһы хәҙер Әмир Абдразаҡовтың исемен йөрөтә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына ҡул ҡуйған.

✓М.Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры өфөләрҙән "Мин - Марат" исемле яңы спектакль өсөн реквизиттар һорай. Үткән быуаттың 70-80-се йылдарындағы эшләктән сыҡмаған көнкүреш әйберҙәре кәрәк. 8-917-401-62-47 телефонына шылтыратырға.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Өфө - ҡунаҡсыл ҡала. Ҡышҡы каникулдарҙа ял итеү һәм күңел асыу өсөн тап баш ҡалабыҙҙы һайлаусылар һис яңылышмаясаҡ. Рәсәй туристары ла ҡалабыҙҙың был йәһәттән булған мөмкинлектәрен юғары баһалай. Өфө әлегә Санкт-Петербург һәм Екатеринбургтан ҡала өсөнсө урында тора. Баш ҡала хеҙмәттәре Яңы йыл байрамына һәм ҡышҡы каникулдарға әҙер - был аҙналағы ҡала округы хикимиәтендәге кәңәшмәлә лә һүҙ ошо хаҡта барҙы.**

# БАЙРАМҒА ӘҘЕРБЕҘ!

Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин халыҡ күпләп йөрөгән урындарҙа ҡунаҡтарҙы йылы сәй һәм милли ризыҡтар менән тәьмин итеүгә иғтибар итергә саҡырҙы. Ҡала хакимиәтенең Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм идаралығы етәксеһе Луиза Макшукова билдәләүенсә, әлеге мәлдә ҡулланыусылар баҙары һәм туризмдың бөтөн предприятиелары ла Яңы йыл байрамына әҙерлек алып бара. Ҡаланы байрамса биҙәү ҙә байрам кәйефе булдырыуҙа мөһим урын алып тора. Байрам ҡунағы - шыршыны махсус баҙарҙарҙа һатып алырға мөмкин. Ҡала территорияһында 71 шыршы баҙары булдырылған, уларҙың барыһы ла 31 декабргә тиклем эшләйәсәк. Шуныһы ла бар: һуңғы йылдарҙа кешеләр урман һылыуҡайына ҡарағанда сауҙа үҙәктәренең бараһында ла һатылған яһалма шыршыға өҫтөнлөк бирә. Бәләкәй генә ҡыуаныс өсөн урмандан шыршы киҫеп алыуҙың кире яҡтарын аңлай башланыҡ, шикелле.

Әүҙем ял итергә теләүселәр ҡала эсендә генә саңғыла, конькиҙа шыуа ала. Әйткәндәй, Өфө Рәсәйҙә ике тәбиғи тау саңғыһы үҙәге булған берҙән-бер мегаполис. "Олимпик парк" та, "Аҡ йорт" та Европа хәүефһеҙлеге нормалары буйынса төҙөлгән төрлө кимәлдәге трассалары менән айырылып тора. Ҡыҫҡаһы, саңғыға саҡ баҫҡандарҙың да, үҙен профессионал тип иҫәпләгәндәрҙең дә күңеле буласаҡ. Өфө аквапаркы ла онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар бүләк итәсәк.

Ғөмүмән, Яңы йыл - ул бала саҡ байрамы. Каникулда Өфөнө күрергә килеүсе уҡыусылар өсөн махсус программалар ҙа әҙер. Был программаға театр тамашаһы ла, музейҙар ҙа, экскурсиялар ҙа, лиминарий ҙа һ.б ингән. "TERRA ZIMA" фестивале лә ҡунаҡтарҙы үҙ ҡорона көтә. Ул Ҡунаҡһарайҙа 4 көн барасаҡ. Хакимиәттең Мәғариф идаралығы ла мәҙәни һәм спорт саралары әҙерләгән. Идаралыҡ етәксеһе Елена Хаффазова билдәләүенсә, экскурсиялар, спорт сараларынан тыш, уҡыусылар белемдәрен камиллаштырыу мөмкинлегенә эйә. Мәҫәлән, "Рәсәй уҡыусылары хәрәкәте" сиктәрендә лидерҙар йыйылышы ла буласаҡ, "Хәүефһеҙлек мәктәбе" йәмәғәт ойошмаһы ҡаланың 200 уҡыусыһы өсөн квестар үткәрәсәк. 1000 һәләтле бала үҙенең проектын яҡлаясаҡ. Был сараларҙан һуң ғинуар аҙағында "Ғилем һәм ижад" ғилми-ғәмәли конференцияһы үтәсәк. Өлкән класс уҡыусылары волонтерҙар менән берлектә "Изгелек эшлә" хәйриә проектында ҡатнашасаҡ. Ҡышҡы каникулдар осоронда "социаль хәүеф" төркөмөндәге уҡыусылар төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнә аласаҡ. 200 бала һәм үҫмер балалар санаторийҙарында сәләмәтләген нығытасаҡ.

Ҡаланың өлкән йәштәге граждандары ла әүҙем тормош менән йәшәй. Был турала Ҡала ветерандар советы рәйесе Ришат Фәйзрахманов һөйләне. Ришат Шәрип улы әйтеүенсә, улар йәштәрҙең патриотик тәрбиәһенә лә ҙур иғтибар бүлә. Сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалауҙа ла советтың өлөшө ҙур. "Оло йәштәге матурлыҡ подиумы", "Көмөш Өфө" кеүек матурлыҡ конкурстарынан башлап, туристик слеттар, спорт ярыштары - ветерандарҙың өлгөрмәгән ере юҡ. 80 йәштән өлкән абруйлы ветерандарҙан аҡһаҡалдар ҡоро ла төҙөлгән. Өлфәт Мансур улы был йәмәғәт ойошмаһының эшмәкәрлеген дә юғары баһаланы.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!

# БАШЛАНДЫ!

**Баш ҡаланың Ленин майҙанына ниндәйҙер мөғжизә менән Ҡыш бабайҙар йыйылды ла йыйылды ул кисте. Бик ҡыҙыҡлы күренеш булды. Улар йәйәүләп килде, автобустарҙан төшөп ҡалды, машиналарҙа килеп туктаны. Улар ҡыҙыл, күк, йәшел, хатта ялтыр костюмда ла килделәр. Таянған таяҡтары ла ябай түгел ине. Улар йә ут сәсте, йә музыка уйнатты, йә төрлө төҫтәргә инде.**



Ҡайһы яҡҡа ҡараһаң да, Ҡыш бабай ине майҙанда. Шулайтып, улар 400-ләп булып киттеләр. Йыйылған халыҡ күңелле көйҙәр аҫтында Яңы йыл ҡунаҡтары менән бейеште, тауҙан шыуҙы, фотоларға төштө. Унан һуң Ҡыш бабайҙар, теҙелешеп, Рус дәүләт академия драма театрынан Ленин майҙанына тиклем бер сафта үтте. Был күренештән һуң Яңы йыл байрамы яҡынлашып килеүе ысынлап та тойолдо. Күңелдәрҙә ниндәйҙер бер дәрт, тантана яралғандай булды. Балалар ғына түгел, ололар ҙа Ҡыш бабайҙан теләк, тәбрик һүҙҙәре ишетергә теләне. Һәм Ҡыш бабайҙар ҙа һәр осраған кешене ҡотлап, изге һүҙҙәре еткереп, арҡаһынан ҡағып китте. Шулай итеп, улар был ҡышҡы кистә ҡала халҡына әкиәти хис-тойғолар бүләк итте.

"Ниндәй генә ҡараштар йөшәнә лә, балаларҙы мөғжизәнән мәхрүм итергә ярамай. Улар бит ошо байрамды, бүләктәрҙе көтә. Әйҙәгеҙ, тәнәйҙәребеҙгә матур бала саҡ, матур ғаилә йолалары, матур тәрбиә бирәйек. Ҡыш бабай улар өсөн иң бренсе мәрхәмәтлелек, йомартлыҡ билдәһе. Беҙ ҙә бөгөн ошо сарала Ҡыш бабайҙың бөтөн изге ғәмәлдәрен күрһәтеп, балаларҙы ҡыуандырмаҡсыбыҙ", - тине 79-сы мәктәптән Ҡыш бабайы.

Шулай итеп, Ҡыш бабайҙар парадынан һуң Ленин майҙанындағы Үҙәк шыршыны асыу тантанаһы булды. Баш ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Өфө халҡына ҡотлау һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итте һәм матур теләктәрен еткерҙе.

ҠАЛА СОВЕТЫНДА

# ҠАҘНА ФАРАЗДАРЫ

**Ҡала советының сираттағы ултырышында депутаттар Өфөнөң 2030 йылға тиклемге социаль-иҡтисади үҫеше стратегияһын ҡабул итте.**

Уның төп маҡсаты булып халыҡтың тормош сифатын, ҡала хужалығының үҫеш кимәлен, инфраструктура, социаль-иҡтисади үҫеш кимәлен тәьмин итеү тора һәм документ биш төп йүнәлешкә ҡуҙаллай. Беренсеһе - ҡала иҡтисадының тотороҡло үҫешен тәьмин итеү, икенсеһе - халыҡтың тормош-көнкүреше өсөн уңайлы социаль мөхит, өсөнсөһө - баланслаған үҫеш кинлеге булдырыу, дүртенсеһе - ҡала хужалығының ышаныслылығын һәм халыҡтың йәшәйешенең хәүефһеҙлеген арттырыу, бишенсеһе - муниципаль идара итеүҙең һәм бюджет сәйәсәтенең сифатын күтәреү. Документ проекты буйынса депутаттар корпусы күп тапҡыр эксперттар менән бергә фекер алыша, асыҡ тыңлауҙар барышында 600 кеше ҡатнаша һәм үҙ һүҙен әйтә. Дөйөм алғанда, меңдән ашыу тәҡдим индерелә һәм улар проекттың һуңғы вариантында сағылыш таба. Шулай уҡ ултырышта 2019 йылға һәм пландағы 2020, 2021 йылдарға бюджет та ҡабул ителде. Ҡабул ителгәнгә тиклем бюджет та асыҡ тыңлауҙарҙа сығарыла. Граждандарҙың тәҡдимдәре йыйылып, уларҙың һәр ҡайһыһына финанс һәм юридик баһа бирелә. Конструктив тәҡдимдәр ҡаланың төп финанс документына индерелә. Ҡала Советы ултырышында ҡаралған өсөнсө мөһим мәсьәлә - өс йылға социаль-иҡтисади үҫеш фаразы булды. Фараздарға ярашлы, 2019 йылдың 1 ғинуарында халыҡ һаны 1 миллион 135 мең кеше булыуы мөмкин. Баш ҡаланың эре һәм урта предприятиеларында уртаса айлыҡ эш хаҡы 49,9 мең һумдан 52,9 (2020 йыл) һәм 58,2 мең һумғаса (2021 йыл) артыуы ихтимал.

Миллиардтар, миллиондар, юғары эш хаҡтары күрһәткестәре тураһында уҡып, баштарығыҙ әйләнеп китмәнеме? Әйҙәгеҙ, яйлап ҡына ергә төшәйек, сөнки был ултырышта Өфөнөң Дим, Киров, Октябрь райондарындағы яңы 15 урамға исемдәр бирелде. Улар араһында билдәле замандаштарыбыҙ: Иван Спатар, Рәшит Мануров, Урал Рәжетдинов, Федор Креков, Дмитрий Волков исемдәре менән аталғандары ла бар.

Әйткәндәй, ҡала Советы былтыр урамдарға, парктарға, скверҙарға исемдәр тәҡдим итеү буйынса конкурс иғлан иткәйне. Уның тәүге еңеүселәре билдәләнгәндә депутаттарҙың бәйгене артабан дауам итеү тураһында ҡарар итеүе һәм уға ярты йыл һайын йомғаҡ яһаласағы белдерелгәйне. Әлегә конкурс тамамланыу тураһында мәғлүмәт юҡ, тимәк, ул һаман да дауам итә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүткереү

❖ Йүткергәндә, ларингит, тонзиллит (миндалиналар шешкәндә) ваҡытында ярты стакан иҙелгән һарымһаҡты эмаль һауытҡа һалып, өҫтөнә сыҡҡансы шыйыҡ бал ҡойорға. Талғын утта болғай-болғай 20 минут торға, ҡапҡас ябып, бер аҙ һыуытырға. Тағы ла 10-15 минут талғын утта йылытырға, ярты стакан ҡайнаған һыу өҫтәргә, яҡшылап болғатырға, марля аша һөҙөргә. Сәғәт һайын ә-әр ҡалаҡ эсергә. Һыуыҡтыста һаҡларға.

❖ Балаларға һыуыҡ тейгәндә, эҫе картуф иҙмәнен етен туҡмаға урарға ла, арҡаға, ҡурылдай тирәһенә һалырға, мамыҡ шәл менән ябырға. Ошо компресты бер нисә тапҡыр яһау етә. Бынан тыш, эмаль һауытҡа 1 уртаса картуф, алма һәм һуған һалып, 1 литр һыу ҡойорға һәм һыу яртылаш кәмегәнсе талғын утта ҡайнатырға. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә. Өлкәндәргә картуф иҙелмәһенә күп итеп һөт һалып ашау һалҡын тейеүҙән файҙалы.

❖ Йүткереүҙе, пневмонияны мәтрүшкә дауалай. 75 грамм мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм йылы көйөнә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда ярты стакан эсергә. Пневмонияның ауыр формаһында бынан тыш тағы ла бер дауа ҡушып дауалағыҙ. Эмалле һауытҡа 1 стакан ярҙырылмаған һоло һалып, уға 1 литр һөт ҡойорға ла, 1 сәғәт талғын утта бешерергә, һөҙөргә һәм аҡ май, бал өҫтәп, йоҡлар алдынан эсергә. Төнәтмәләргә көн һайын әҙерләргә.

### Гайморит

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, һөт, һуған һуты, үҫемлек майы, ҡырылған кер һабыны, спирт йәки календуланың спирттағы төнәтмәһе алып, ҡайнап ултырған һауыт өҫтөндә һабын ирегәнсе тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ошо майға манылған мамыҡты танауға 15 минутҡа ҡуйырға. Дауаланыу курсы - 3 аҙна. Кәрәк булһа, 10 көндән тағы ҡабатларға. Майҙы һыуыҡтыста һаҡларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Кейеҙ баҫҡанда юғары температура режимын һаҡлау, уға һыу ҡойоп тороу, бар көс менән йәйеү талап ителә. Тигеҙ итеп эҫе һыу ҡойола бара, һыулы яғы эскә урата барыла. Рулонды ныҡ итеп бәйләп, ярты сәғәт буйына тәгәрәтәләр. Бынан һуң сисеп, тағы һыу ҡояләр, икенсе яғынан әйләндерәләр. Артабан ярты - ике сәғәт буйына йөндө тығыҙлау һәм йәйеү бара.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Кейеҙҙе тәгәрәтеүҙең бер нисә ысулы бар. Аяҡтар менән тәгәрәтеү киң таралған. Кейеҙҙең киңлегенә ҡарап, 3-4 кеше тәгәрәтә. Тап ошо ысулды И. Георги һүрәтләгән булһа кәрәк: "Тетелгән йөндө баш бармаҡ ҡалынлығында простыня йәки септәгә йәйеп һалып, эҫе һыу ҡоялар, аҙаҡтан септәһе менән бергә урап тәгәрәтәләр... һәм тағы һыу һибәләр, тәгәрәтәләр һәм йөн тығыҙланғансы бар көстәре менән тапайҙар". Эште, гәҙәттә, йылға буйында, ауыл осонда, йәйләүҙә башҡарғандар. Бер төрлө башҡарылған эштән ялҡып китмәҫ өсөн шаярыуҙар, бер-беренә төртмә һүҙҙәр ташлау булған. Ваҡыты-ваҡыты менән кейеҙ баҫыусыларҙы ҡымыҙ менән һыйлағандар, махсус рәүештә уны кейеҙгә һибеп алғандар. Арып китеүселәрҙе башҡалары алыштыра һалған. Эштән һуң унда ҡатнашыусыларҙы хужа һыйлаған.

Кейеҙ тартыу йолаһы ситтән ҡарағанда бигерәк мәрәкә тойолған. Бер нисә оҙон арҡан менән кейеҙ рулонын бәйләгәндәр. Ике яҡтан теҙелеп торған кейеҙ баҫыусылар һәр кем үҙенең арҡанының осонан тартҡан. Арҡанға һалып тартыу тип аталған был эш төрө. Был ваҡытта кейеҙ йә бер яҡҡа, йә икенсе яҡҡа тәгәрәгән. Әгәр ҙә кейеҙ киң һәм оҙон (тимәк, ауыр ҙа) булһа, эште атта һыбай ултырып башҡарғандар. Ат менән тәгәрәткәндә туҡтап тороп, өмәлә ҡатнашыусы барса халыҡ кейеҙҙе тапап алған. Йомаҡ та бар: "Аяҡ менән тапап ҡамыр йәйәләр - япма килеп сыға".

Ат көсөн файҙаланғанда, йыш ҡына кейеҙҙе ағас бүрәнәгә урап, бүрәнәгә бәйләнгән еп йәки ҡайышты әйәргә нығытҡандар. С. Руденко XX быуат башында ошо күренеште башҡорт йәйләүҙәрендә күҙәткән һәм һуңынан "Башкиры" тигән китабында һүрәтләгән: "Был ысул менән эшләгәндә тетелгән йөн ҙур ҡамыш септәгә йәйеп һалына, септәне йөн менән бергә осона еп уралған бүрәнәгә бәйләйҙәр. Бүрәнәне атҡа егеп, атты дала буйлап йөрөтәләр, һөҙөмтәлә, кейеҙ бик яҡшы итеп тығыҙлана". Ғалим был ысулдың борон бөтөн ҡускенсе-малсыларға таныш булыуын да билдәләй. Э. Масанов, ҡаҙаҡтарҙа кейеҙ баҫыуҙы һүрәтләгәндә Руденконың ошо хеҙмәтенә һылтанма яһай. Әммә ҡаҙаҡтарҙа ат менән кейеҙ баҫыу, бигерәк тә XX быуат башында, һирәк ҡулланылған. Был эштә ат көсө ҡулланыу монгол халыҡтарына (Байкал арьяғы бүрәттәре, монголдар), ат үрсетеүсе тываларға, көньяҡ алтайҙарға хас һәм был халыҡтарҙа кейеҙ баҫыу ир-егет эше иҫәпләнә. Башҡорттар башлыса тирмә өсөн тәғәйенләнгән кейеҙҙе генә ат ярҙамында тәгәрәткән.

Беҙҙең көндәрҙә көньяҡ башҡорттары ҡул менән кейеҙ баҫа. Шуны ла әйтергә кәрәк, башҡорт ауылдарында боронғоса кейеҙ баҫыу йолаһы яҡшы һаҡланған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!

# БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР...

## һәм арифметика мөғжизәһе

**Башҡортостандан дүрт уҡыусы 30 декабрҙә Малайзияның баш ҡалаһы Куала-Лампурҙа үткәреләсәк менталь арифметика (күңелдән хисапларға өйрәткән программа) буйынса халыҡ-ара олимпиадала Рәсәй командаһы составында ҡатнашыу хоҡуғын яуланы. Олимпиадала егерменән ашыу илдән 763 иң шәп хисапсы ҡатнашыуы көтөлә, Рәсәйҙән унда 37 уҡыусы барасаҡ.**



Республиканы донъя кимәлендә танытырға йыйынған уҡыусылар - улар Өфө ҡалаһы Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында белем алыусы Мәрйәм Моталова, Азра Хөснөтдинова, Әминә һәм Ильяс Игебаевтар. Улар "Орбита" IT-мәктәбендә шөғөлләнә. "Ильястың бәләкәйерәк саҡта шиғыр һәм йыр һүҙҙәренә хәтере насар ине. Моғайын, был йәштә бөтә малайҙар тиктормаҫ һәм иғтибарһыҙ булалыр, - ти балаларҙың әсәһе Гөлшат Игебаева. - Шуға тормош иптәшем менән бер нисә кластан тыш белем биреү учреждениеларын сағыштырып ҡарап, балаларыбыҙҙы "Орбита" мәктәбенә йөрөтә башланыҡ. Шөғөлдөң файҙаһы ике айҙан уҡ һиҙелде, мәктәптә яттарға бирелгән шиғырҙарҙы тиҙерәк хәтерендә ҡалдыра башланы улыбыҙ". Өсөнсө синыфта уҡыған Ильяс шулай уҡ логик мәсьәләләрҙе лә синыфташтарына ҡарағанда яҡшыраҡ башҡарырға өйрәнгән. Апаһы Әминә бишенсе синыф уҡыусыһы, быға тиклем күберәк ижад, һүрәт төшөрөү менән мауыҡҡан ҡыҙ өс айҙан математика өлкәһендә лә уңыштар яулай башлай. Гөлшат ханым күңелдән хисаплау уҡыуҙа ла ярҙам итә, үҙ көсөнә ышаныс тәрбиәләй, тип иҫәпләй. Сөнки хәҙер уларҙың хатта киләсәккә хыялдары ла үҙгәргән: Ильяс президент, уҙышсы йә төҙөүсе булам ти, ижадҡа ынтылған Әминә табип һәм уҡытыусы һөнәрҙәренә өҫтөнлөк бирә башлаған.

Ете йәшлек Мәрйәм Моталова менталь арифметика техникаһын мәктәпкә бармаҫ элек өйрәнгән, сөнки ата-әсәһе уны балалар баҡсаһына йөрөтөү урынынға "Орбита" мәктәбенә алып килгән. "Был мәктәп асылған көндән йөрөйбеҙ, төркөм йыйылһын өсөн дуҫтарҙы саҡырып, ойоштороп ебәрҙек, - ти ҡыҙҙың әсәһе Гөлназ. - Мәрйәм кәштәлә нисә папка, нисә ҡат тип һанарға бик ярата ине, хисапты ла тиҙ үҙләштерҙе. Хәҙер хисап-робототехника менән думбырала уйнау шөғөлдәрен еңел берләштерә".

- Менталь арифметиканың сере һәм үҙенсәлеге шунда - баш мейеһенең ике ярымшары ла үҫешә, күңелдән тиҙ хисаплау оҫталығы менән бергә заманса soft-skills тип аталған оҫталыҡ - зирәклекте үҫтерә. Ярышта халыҡ-ара кимәлгә сығыу үҫеш күрһәткесе, тағы ла яҡшыраҡ булырға этәргес көс тә, - тине "Орбита" IT-мәктәбе директоры Әсхәт Зарипов.

**Ғәзиз ЙОСОПОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

**Төүге ҡар күҙе төшөү менән бала-саға ҡар тауы тураһында хыяллана башлай. Беҙҙең бала саҡта полиэтилен шыптырға ятып та, ағастан эшләнгән бәләкәй санаға ултырып та ҡар бураны уйната инек. Ләкин хәҙер был исемлек күпкә төрләнде. Скелетон, ҡарҙан йөрөүсе самокат, скутер-самокат, ледянка, тюбинг һәм башҡа төрлө йәйләнмаларҙы балалар ихлас ҡуллана. Бөгөн шуларҙың береһе - тюбингты тегеү буйынса яҙма мастер-класс үткәреп, кемгәлер аҡса эшләү юлын өйрәтмәксемен. Тегеү машинаһы менән ҡуллана белгән һәр кем үҙенең ихласлығын ҡушып, быны тигән тюбинг тегергә мөмкин. Магазинда хаҡтары 1500 һумдан башланған тюбингты үҙеңә тегеү күпкә файҙалыраҡ.**

Бер тюбинг тегеү өсөн 13 - 16 радиуслы автомобиль камераһы, теза туҡымаһы, 2.5 метрлыҡ арҡан, ситтәрен эшкәртеү өсөн таҫма, карабин һәм плащ тегеү өсөн махсус туҡыма кәрәк. Теза - полиэстер һәм поливинилхлорид нигеҙендә эшләнгән, һыу үткәрмәй торған һәм айырыуса ныҡ булыуы менән айырылған туҡыма. Уны туристар өсөн махсуслашҡан магазиндарҙан алырға мөмкин. Таҫманы йомшаҡ ҡына корсаж таҫмаһын дүрткә бөгөп эшләп алам. Улай ныҡ була.

Тәүҙә камераны ныҡ ҡаты булғансы өрөп тултырырға кәрәк. Әҙер тюбингтың үлсәме камераның ни тиклем тулылығына бәйле. Ләкин нығыраҡ тултырған һайын, ҡуллана башлағас, унда шул тиклем тиҙерәк бөҫөрҙәр сығасаҡ. Шуға күрә артыҡ тултырыу кәрәкмәй. Теза туҡымаһынан ике түңәрәк ҡырҡырға. Беренсе түңәрәк өсөн камераның тышҡы, ә икенсеһенә эске диаметрҙарын үлсәү мөһим. Үлсәмдәргә ике яҡтан да тегеү өсөн 3-әр сантиметр ҡушып, туҡыма ҡалдырырға кәрәк. Тюбингтың өҫтөнән булырға тейешле туҡыманың уртаһын түңәрәкләп ҡырҡырға. Арҡандан тотонорға һәм тау үренә һөйрәтеп менер өсөн тотҡа эшләргә һәм ҙурыраҡ түңәрәккә тегеп беркеткәндән һуң, ике түңәрәкте бергә тоташтырырға. Быны өсөн һулға әйләндереп тегергә һәм тегелгән урындарын таҫма менән нығытып ҡуйырға кәрәк.

Әҙер чехолға һауаһы сығарылған камераны индереп, уны яңынан тултырғас, "ултырғысты" тегеп ҡуйырға ғына ҡала. Тәү ҡарашҡа ҡатмарлы күеҡ күренһә лә, тюбинг тегеүҙең бер мәшәҡәте лә юҡ. Кул оҫтарып алһа, көнөнә икешәр тюбинг тегергә була. Әгәр ҙә бер аҙнала 4 тюбинг тегеп, 1000 һум менән һатҡанда ла һәйбәт килем килә. Машина камераларын туған-таныштарҙан, дуҫтарҙан һорап йәки яҡындағы шиномонтаж оҫтаханаһы менән һөйләшеп, осһоҙға ғына һатып алырға мөмкин. Туҡыма, арҡан һәм башҡа ваҡ-төйәкте күмәртәләп алып ташлама менән алырға була.

Мин был эш менән өсөнсө йыл шөғөлләнәм. Тәүҙә таныштарға һаттым, уларҙың тюбингтарын күреп, башҡалар килде. Хәҙер тик заказ буйынса ғына тегәм. Өс тюбингтан күберәк алһалар, ташлама эшләйем. Шулай уҡ даими һатып алыусыларға ла күпмелер процент ташлама яһайым. Шулай итеп, ял көндәрендә лә ғаиләмә килем килтереүсе шөғөл менән булышам. Оҫтабикәләрҙе минә эйәрергә саҡырам - ҡышҡы ҡарҙың файҙаһын бергәләп күрәйек, аҡса эшләйек.

**Фәниә ӘСӘҘУЛЛИНА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

6

# Ғаиләм-ҡәлғәм

29-4 декабрь-ғинуар (аҡъюлай-һыуығай)
2018 йыл
№52 (834)

ҒАИЛӘ ҠОРО

# ҮҘ ӨЛГӨҢДӘ ТӘРБИӘЛӘ

**Күптән түгел Учалы ҡалаһынан Гөлнур менән Илдар Исхаҡовтар ғаиләһе "Йыл ғаиләһе - 2018" Бөтөн Рәсәй конкурсының бүләкләү тантанаһында булып ҡайтты. "Йолаларҙы һаҡлаусы ғаилә" номинацияһында билдәләнде улар. Ошо матур еңеүҙәре менән ҡотлап, ғаилә башлығы Илдар Иршат улы менән әңгәмәләшеп алдыҡ.**

**➔ Һеҙ яңы ғына Мәскәүҙән, Рәсәйҙең иң яҡшы ғаиләләре йыйылған күркәм саранан ҡайтып тораһығыҙ. Был бәйге ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?**

- Был бәйгене Рәсәй Хеҙмәт һәм граждандарҙы социаль яҡлау министрлығы һәм Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам итеү фонды үткәрҙе. Унда илдең 85 төбәгенән 329 ғаилә ҡатнашты. Беҙ башта "Матур ғаилә - ил ҡото" конкурсының район, һуңынан республика кимәлендә ҡатнашып, 5 еңеүсе иҫәбенә сыҡтыҡ. Улар араһынан бер генә ғаиләне, беҙҙе Бөтөн Рәсәй конкурсы баһалама ағзалары һайлап алды. Тәүге көндә танышыу кисәһе булды, кемдәрҙер ижади номерҙар күрһәтте. Блиц-интервью, фотоға төшөү ойошторолдо. Икенсе көнө экскурсиялар һәм бүләкләү тантанаһы булды. Ил буйынса 85 ғаиләне бүләкләнеләр. Беҙ аутентик милли кейемдә йөрөнөк, беҙҙең менән фотоға төшөргә теләүселәр күп булды. Был сәйәхәт улдарыбыҙға онотолмаҫ хәтирәләр бүләк итте. Улар ҡыуанғанға беҙ ҙә ҡыуандыҡ. 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышына арналған музейға индек. Мин үҙем тарих менән ҡыҙыҡһынам, малайҙарға картиналарҙы, төрлө экспонаттарҙы күрһәттем. Мәсеткә барҙыҡ, метрола йөрөнөк. Самолетта осоу ҙа уларға ҡыҙыҡ булды.

**➔ Хәҙерге заман башҡорт ғаиләһе ниндәй булырға тейеш?**

- Ғаилә ҡороу - ул хәләл ефетең, балаларың алдында ҙур яуаплылыҡ. Шуға ла ғаилә ҡороуға аңлы рәүештә килергә кәрәк. Бөгөн йәштәр ғаиләле булырға ашыҡмай. Бының сәбәбе көнбайыш мәҙәниәтенә эйәреүҙәлер, моғайын. Унда ғаилә тигән төшөнсә лә юғалып бара.

Башҡорт ғаиләһендә элек-электән атай үҙенең, әсәй үҙенең урынында булған. Ситтәрҙең йолалары беҙгә төҫ түгел, үҙ әхлаҡи ҡиммәттәребеҙгә, тәрбиә ысулдарына таянабыҙ бөгөн дә. Ғаиләлә балалар күп булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Һәм унда тәрбиә эшенә ҙур урын бүленергә тейеш. Мин шуныһы менән бәхетлемен: кәләшем Гөлнурҙың да ғаилә, балаларға ҡағылышлы фекерҙәре минеке менән тап килә. Исемдәрен дә уйлап ҡуштыҡ. Өлкәне Исмәғил, уртансыһы Бәхтийәр, кесе улыбыҙ Мортаза исемле. Төп һөнәрем уҡытыусылыҡтан тыш, традицион яндан атыу менән шөғөлләнәм. Балалар ижад йортонда йәш быуынға уҡ атырға өйрәтәм. Ярыштарға улдарымды ла алып сығам, уртансы улымдың был боронғо спорт төрө менән ҡыҙыҡһыныуы көслө. Уҡ атмайынса, эргәмдә эйәреп йөрөһәләр ҙә файҙаға, боронғо мәҙәниәт менән танышалар, спортсыларға ҡарап, ихтыяр көсө тәрбиәләргә өйрәнәләр.

**➔ Улдар тәрбиәһендә айырыуса нимәгә иғтибар итергә кәрәк?**

- Уларға яҡын булырға кәрәк. Бөгөн күптәр матди донъяға ныҡ бәйле. Уҡытыусы булып эшләгәндән килгән эш хаҡым ҙур булмаһа ла, мин тиҫтерҙәрем кеүек оҙон аҡса артынан Себергә сығып киткем килмәй. Эйе, ул саҡта мин бөгөнгөгә ҡарағанда күберәк аҡса эшләйәсәкмен. Әммә балалар аталарын бер-ике айға бер генә күрәсәк. Кәләшем һөнәре буйынса педиатр, кеше етмәгәнлектән, уны ла эшкә саҡырып алдылар. Ә баланы иртән 8-ҙә балалар баҡсаһына илтеп, кисен 6-ла алып, тәрбиәне башҡалар иңенә һалып булмай. Беҙ үҙ балаларыбыҙҙы үҙебеҙ тәрбиәләргә тырышабыҙ. Ҡайҙа йөрөһәм дә малайҙар минең менән. Өләсәй, ҡартатай тәрбиәһен дә инҡар итмәйбеҙ, ял көндәре мотлаҡ ҡайтырға тырышабыҙ. Өмәләрҙә, бесән эшләгәндә улар беҙҙең менән йөрөй. Ошолар үҙе тәрбиә, тип уйлайым, матди яҡты ғына хәстәрләп йәшәп булмай, рухи үҫештәренә иғтибар итергә кәрәк. Ғәйет намаҙҙарына мәсеткә алып барырға тырышам. Хатта нимә ашауҙарына тиклем иғтибарлыбыҙ. Шул уҡ диндә, мәҫәлән, кешенең нисек туҡланырға тейешлеге аныҡ күрһәтелгән. Гены үҙгәртелгән, буялған ризыҡты һатып алмайбыҙ. Милли ризыҡтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ.

Ғаиләлә хәләл ефетемә мин ниндәй мөнәсәбәттә, улар аҙаҡтан үҙ ғаиләһендә шулай буласаҡ. Бында ла үҙ үрнәгең иң яҡшы тәрбиә ысулы. Әсәләренә матур һүҙҙәр әйтәм, байрамдарҙа ҡотлайбыҙ, яратыуыбыҙҙы белдерәбеҙ. Балалар баҡсаһына барғансы тик башҡортса һөйләшкәс, туған телдәрендә яҡшы аралашалар. Русса өйрәнгәнгә тиклем бала туған телендә һәйбәт һөйләшә белергә тейеш, шул саҡта уның телмәре боҙолмаясаҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Ҡатын-ҡыҙҙы, әсә кешене бер генә тема борсой алмайҙыр инде ул. Ул бит ғаилә тигән мөһим проекттың төп менеджеры һәм администраторы. Гүзәл зат ғаиләһенә, туғандарына тотош бер система итеп ҡарай, шул системаның бушаҡ урындарын ваҡытында күреп, мәсьәләләрҙе ыңғай яҡка хәл итеп ебәрергә тырыша. Һәр хәлдә, борондан ҡабул ителгәнсә, шулай булырға тейеш.**

## БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ... ситкә ебәрмәйек

Ҡыҙғанысҡа күрә, был беҙҙең өсөн, эшләп йөрөгән һәм күп ваҡытын йорттан ситтә үткәргән ҡатындарға, бик хас түгел. Беҙ үҫеп формалашҡан саҡта, үҙгәртеп ҡороу осоронда, йәмғиәт ҡыҙҙарға нисектер икенсе ҡиммәттәр һендергән. Урта йәштәге башҡорт ҡатын-ҡыҙы бөгөн бер нисә урында эшләй, унан тыш, байтаҡ йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша, бер һүҙ менән әйткәндә, үҙен раҫлау һәм аҡса табыу менән мәшғүл. Һәр ғаиләнән ирҙәр Себергә, ҡатындар Мәскәүгә йә сит илгә аҡса табырға китә. Ә еребеҙҙе яттар эшкәртә, ҡулға төшөрә.

Күпселек ҡыҙҙар-малайҙар бала саҡтан, үҫкәс, ҡайҙалыр алыҫҡа уҡырға сығып китергә һәм шунда тороп ҡалырға кәрәк, икән тигән төшөнсә менән үҫә. Ауылда нимә бар, бында киләсәк юҡ, китергә тырыш, кеше булырға тырыш - был һүҙҙәрҙе ололар һәр берегеҙгә тылҡығандыр, моғайын. Эйе, һәр ата-әсә балаһына тик изгелек кенә теләй. Тик баланы нәҫеленән айырып, ситкә ебәреп, ҡамғаҡ итеүме ни беҙҙең халҡыбыҙҙың хыялы? Ошо ерҙе һин эшкәртергә, ата-бабалар кәсебен дауам итергә һәм шуның менән аҡса табырға тейешһең, тигәнде ишетеп үҫһен ине бала. Италия, Испания, Греция яҡтарын ҡарағыҙ. Зәйтүн үҫтереүсенең балаһы ла киләсәктә шул бизнесты дауам итә унда, сыр етештереүсенең улы ла шул юҫыҡта уҡып, атаһының эшенә ҡушыла, гастарбайтер итальян йә гректы күҙ алдына килтерәһегеҙме? Оло ғына испан ҡатыны ғаиләһенән айырылып, ҡалабыҙҙа иҙән йыуа йә әбей ҡарай, йә булмаһа, йәш, аҡыллы һәм белемле грек, төрөк, фарсы йә булмаһа чечен ҡыҙҙары күпләп Өфөгә килеп, фән менән генә булышып, ҡартайғансы ғаилә ҡормай, ата-әсәнең фекерен һанға һуҡмай, тыуған яҡтарына ҡайтмай ята икән тип тә күҙ алдына килтереп булмай. Кем ебәрһен уларҙы, аталары, ағалары ҡурсалап ҡына юғары уҡыу йорттарын тамамлатҡас та, башлы-күҙле итеп, яҡшы итеп урынлаштырып та ҡуя. Шунан улар ирҙәренең, балаларының һаулығын ҡайғыртып, дөрөҫ туҡланыу, йәшәү шарттарын, уңайлыҡтарҙы ҡайғыртыу менән шөғөлләнә. Ырыу көсәйә, өйҙә бар мәшәҡәттәрҙе бер системаға һалып алып барған әсәй булғанда стрестар ҙа, тәрбиәнән тайпылған балалар ҙа һирәгерәк була. Йәш саҡта алған һөнәре буйынса шундуҡ эшкә сыҡмай сит ил ҡатындары. Бала үҫтергән, ҡатмарлы ғаилә менеджментын үҙләштергән, ҡырҡты үткән гүзәл зат тәжрибәле һанала һәм эшкә алғанда тап шундайҙарға өҫтөнлөк бирелә.

Ғаилә институты дөрөҫ үҫешкән илдәрҙә ҡатын-ҡыҙ әсәлек бурысын үтәп, шунан теләге булғанда күңел өсөн, үҙҙәрен раҫлар өсөн йәмғиәткә сыға. Беҙгә лә тап ошо хаҡта борсолорға, ҡыҙ-улдарыбыҙға бала саҡтан дөрөҫ ҡиммәттәр һалып үҫтерергә, тыуған еренә ерегеп йәшәргә, милләтен ҡайғыртырға өйрәтергә кәрәк. Быны тик милләтен яратҡан әсәйҙәр генә эшләй ала.

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА, шағирә.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*



# БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**Башҡортостанда тыуып үҫеп, әлеге көндә алыҫ Усинск ҡалаһында йәшәйем. Йылына бер генә тыуған яҡтарыма ҡайтһам да, республикалағы хәлдәр тураһында һәр ваҡыт хәбәрҙармын. Яңылыҡтарҙы телефон аша ла, интернет селтәре ярҙамында ла тиҙ арала белеп торам. Өс бала әсәһе булараҡ, мине бигерәк тә ғаилә, балаларға ҡағылышлы мәсьәләләрҙең яҡтыртылыуы ҡыҙыҡһындыра. Республикала ошо йәһәттән байтаҡ ҡына эштәр башҡарылыуын күреп ҡыуанам, сөнки ныҡлы ғаиләләре булған төбәк алдынғылар рәтенән бер ҡасан да төшөп ҡалмай.**

Телевизорҙан йәнең теләгән каналды ҡарау мөмкинлеге алыҫта йәшәп тә, БСТ һәм "Ҡурай" каналдары тапшырыуҙары менән танышып барырға мөмкинлек бирә. Сит мөхиттә, урыҫ телле ҡалала балалар туған телен онотмаһын өсөн ҙур тырышлыҡ һалырға кәрәк. Аллаға шөкөр, ике улым да таҙа итеп башҡортса аралаша, бәләкәс ҡыҙыбыҙ ҙа ағалары юлынан барыр, тип өмөтләнәм. Балалар баҡсаһы, мәктәп ҡырҙағы башҡорт балалары өсөн генә түгел, уларҙың ата-әсәләре өсөн дә ҙур һынау ҡуя. "Туған телдә нисек аралаштырырға? Бөтә яҡлап та урыҫ теле уратып алған мөхиттә ни рәүешле башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уятырға?", тип күп баш ваттым. Бала ниндәй телле булып асыла, ул үҙен һәр саҡ ошо телгә бәйләп ҡарай. Шуға күрә, балаларҙың телдәре асылмаҫ элек үк башҡорт көйҙәрен тыңлаттым, кисен башҡорт халыҡ әкиәттәрен уҡыным, "Тамыр"-ҙың концерттарын күрһәттем. Бөтә нәмә беҙҙең тырышлыҡтан тора. Әгәр ҙә тәрбиәне үҙ ыңғайына ҡуйһаң, бала тирә-йүнендәге мөхиттең телен үҙенә һеңдерә. Ә атай-әсәй әҙ генә булһа ла уға йүнәлеш биреп торһа, ул үҙенең булмышынан айырылмай.

Телдәре асыла башлағас та тик башҡортса һөйләштем. Һуңынан балалар баҡсаһынан йәки мәктәптән ҡайтып миңә урыҫса өндәшһәләр, гелән башҡортса ғына яуап бирҙем. Бигерәк тә йәйге каникулдан һуң, ауылға барып ҡайтҡас, улар башҡорт телендә бик яҡшы аралаша башлай. Ирем дә, үҙе урыҫ телле башҡорт булһа ла, балаларҙың туған телгә ҡарата ынтылыштарын хуплап ҡына тора. Был да үҙенең ыңғай ролен уйнай, сөнки атай-әсәнең берҙәм эшмәкәрлеге генә яҡшы һөҙөмтә бирергә мөмкин.

Башҡортостанда йәшәп тә, ифрат шәп милли проекттар уртаһында ҡайнап та, балалары бер ауыҙ һүҙ белмәгән ҡайһы бер милләттәштәремә аптырайым. Үҙебеҙҙең туған мөхиттә матур итеп башҡортса һөйләшкән балалар үҫтереүҙең ниндәйҙер ауырлыҡ тыуҙырыуын аңламайым. Бында бөтә ғиллә - атай-әсәйҙең үҙ теленә булған иғтибарында һәм ихтирамында. Шуға күрә, әйҙәгеҙ үҙебеҙ ҙә башҡортса һөйләшәйек, балаларыбыҙҙың да туған телебеҙҙе белеүҙәрен тәъмин итәйек. Беҙҙең, башҡорттарҙың иңендә, үҙ телебеҙҙе һаҡлау һәм яҡлау.

**Раушания МИНҺАЖЕВА.**
**Коми республикаһы**
**Усинск ҡалаһы.**

*ШАНДАУ*

# АТАЙЫМА ОШАҠЛАШТЫМ...

**Гәзиттең 42-се һанында Хәлил Һөйөндөковтың "Атайыңа ошаҡлама!" тигән мәҡәләһен уҡып сығып, оҙаҡ ҡына уйланып йөрөнөм. Ул, әлбиттә, "Атайыңа ошаҡлашма" тип малайҙарға өндәшә. Ә ҡыҙҙарға ташлама яһай, уларға атайға арҡаланыу ярай, хатта кәрәк тә, ти.**



Был яҙмаларҙан һуң үҙемдең бала сағымды һәм, ғөмүмән, тормошомдо бер ҡат анализлап сыҡтым. Атай, баланы атайлы итеп үҫтереү, атайлы булыу һәм атайҙарҙың йәшәйештәге төрлө сифаттарын аңлау һәм ҡабул итеү кеүек темалар һәр ваҡыт минең күңелемдә өйкәне. Мин Хәлил ағайҙың үҙе менән таныш. Уның шул тиклем дә ипле һәм әхлаҡлы, аңбелемле кеше икәнен дә беләм. Әммә бар атайҙар ҙа уның кеүек кенә түгел шул, үкенескә күрә...

Атайым боласылыраҡ холҡло кеше булды. Ярайһы уҡ ҡаты ла ине. Белеме лә, артыҡ тәрбиәһе лә булмаған ябай ғына ауыл көтөүсеһе ине инде ул. Йәшәйешендә ниндәй генә хәлдәр ҡылып, кемгә ниндәй мөнәсәбәттә булғанда ла, мин уның үҙемә - ҡыҙ балаһына булған ҡарашын бер ваҡытта ла онотмайым. Мәҫәлән, миңә ҡарата әйтелгән бер генә ҡаты йәки тупаҫ һүҙен дә иҫләмәйем. Һүҙ менән дә, ҡул менән дә рәнйетмәне. Ә башҡаларға (күптәргә) уҫал ине. Бала сағымдан ҡайҙа ла яҡлау эҙләгәндә: "Атайыма әйтәм!" - тинем. Урамда малайҙар ҡыйырһытһа ла, мәктәптә берәй низағ сыҡһа ла, йәш саҡта егеттәр бәйләнһә лә, хатта ир менән йәшәгәндә лә "Атайыма әйтәм!" тигән ике һүҙ ҙур көскә эйә булды. Сөнки атайым ысынлап та мине яҡлашты. Бала саҡта ағайҙарым ҡатыраҡ бәрелһә лә, "Атайыма әйтәм!" тийә һалам. Улар шундуҡ шыма. Малайҙарҙы ла табандарын ялтыратырға мәжбүр итә. Егеттәрҙең ҡулын һәм телен тыя. Иремде лә һағайта ине. Йәшәй-бара мин атайымдың төрлө хәлдәрҙәге, ситуацияларҙағы холоҡ-фиғелен башҡаларҙыҡы менән сағыштыра, һынап ҡарай йөрөгәнмен икән. Былар махсус рәүештә башҡарылмаһа ла, әле килеп һығымталар яһай алам.

Ғаиләле булып йәшәгәндә ирем ваҡытында әҙер булмаған аш-һыу, бола өй, табылмаған нәски кеүек нәмәләр өсөн тауыш сығарып ҡуя ине. Тора-бара был йәмһеҙ мөнәсәбәтен ул ҡыҙҙарына ла күрһәтте. Тупаҫ кәмһетеү һүҙҙәре менән ғәрләндереп, хәтер ҡалдырыуҙы ғәҙәти итте. "Эшкинмәгән, ҡулыңдан килмәгәс, булышма", тигәненән балалар бөтөнләй бөлөп китә ине...

Ә минең атайым бер ваҡытта ла миңә "эшкинмәгән" йәки "йүнһеҙ", "белекһеҙ" тигән һүҙҙәрҙе ишеттермәне. Ҡайтып инеп, "Ҡана, ашарға ултырт", тип тамаҡ талап итмәне. "Ҡапҡыларлыҡ берәй нәмәң юҡмы шунда?" тигән була торғайны әсәйем өйҙә булмағанда, үҙен ғәйепле һымаҡ итеп тойоп. Йәнәһе, бала кешенән аҙыҡ һорап тора инде. Мин уны йәлләп китә лә, йүгереп йөрөп, ашарға әҙерләй һала торғайным. Тоҙһоҙмо, ҡуйымы, бешер-бешмәҫме - бер ҡырын һүҙ әйтмәне. Аҙыҡҡа ла, йыйыштырып, таҙалап өлгөрмәгәнгә лә иғтибар итмәне, игәмәне, шелтәләмәне. Бер саҡ бесән мәлендә яланда ашты мин бешерҙем, тик ашыма тоҙ һалмағанмын да ҡуйғанмын. Ағайҙарым ризаһыҙ булышып ултырғанда, атайым: "Ҡатындарығыҙҙан таптырырһығыҙ тәмлеһен, минең ҡыҙға мыжымағыҙ", - тип ауыҙҙарын япты.

Үҫкәндә ҡулыма көрәк-һәнәк тоттортманы. Тотонһам да, күреп ҡалһа, ҡыуып ебәрә ине. Бала саҡта артынан эйәргем килгәндә илатып ҡалдырып китмәне. "Беларус"та уңыш ташығанында эйәреп сыҡһам, кабинаһына ултыртып йөрөтөп килтерә ине. Ат арбаһына менеп ултырһам, ҡайһы бер атайҙар һымаҡ, "төш, ҡоторма" тимәй, әсәйем әрләгәндә лә, "ярай, урам ҡапҡаһына тиклем барһын инде", тип минең яйыма ҡуя. Ҡапҡан-тоҙаҡтарын ҡарарға юлланғанында, саңғы элеп, артынан эйәрһәм, әрләп кире бормай, "арыһаң, ҡалдырып китәм" тигән була ла, ыңғайына йөрөтөп алып ҡайта ине.

Мин уға ошаҡлаштым. Һәр саҡ түгел, әммә бик йәнем көйгәндә, ҡайтып ошаҡлай ҙа ҡуя инем. Ул бер ваҡытта ла "Нимәгә? Ни өсөн?" тип торманы. Һикереп тороп йәки ҡапыл кейенеп сығып китә лә, ғәйепле кешеләрҙең барып кәрәктәрен бирә лә ташлай ине. Бер яҡтан, артыҡ аҡыллы ла булмаған инде, әммә шулай ҡыҙыу һәм ҡапыл хәл итә торған кеше ине. Әсәйем үҙемде әрләй ҙә ҡуя, уға әйтеү файҙаһыҙ, ә атайым минең ошаҡлашҡанымды һәр саҡ ишетә.

Студент саҡта йәйге каникулдарҙа клубтың, китапхананың аҫҡысын клуб мөдиренән һорап алып ҡала торғайныҡ. Улар ғаиләле апайҙар, килеп, тәртип тураһында вәғәз уҡый ҙа ҡайтып китәләр. Бер саҡ китапханала ултыра биреп сығайым, тиһәм, тыштан йоҙағын элеп киткәндәр. Эстә бер йыуаш ҡына иҫәрерәк ағай менән бергә ҡалғанбыҙ. Был ағай ниңәлер клубҡа йөрөй, йәштәргә тамаша ҡылып ултыра, китапханала журналдар ҡарай торғайны. "Наказ" уйынында шул ағайға наказынды ҡушһаң (ҡоҙоҡтан һыу алып килергә, мунса ташы табырға йәки урамдан берәйһенең эскәмйәһен күтәреп алып килергә), бара һалып үтәп тә килә торғайны. Шундай бер зыянһыҙ ғына әҙәм ине әлеге минең менән бикле ҡалған ағай. Туҡылдатам, залда уйын бара, берәү ҙә ишетмәй. Бер ваҡыт был ағай тынысһыҙлана башланы, күҙҙәре аларҙы, ишек менән тәҙрә араһында йүгерә башланы. Тупһаға ултырып, "Асығыҙ" тип сыйылдап илай, ауыҙынан күперек китте. Уға ҡарап, мин бик тә ҡурҡтым. "Хәҙер асалар, илама... илама" тип тынысландырырға маташам, тик уны тотоп тыйырлыҡ түгел. Күпмеләр шулай ҡаңғырышҡас, кемдер килеп асты. Йүгереп ҡайтып, атайыма ошаҡланым. Ул телевизор ҡарап ултырған еренән һикереп тороп, быймаһы менән тунын кейҙе лә сығып китте. Сыбыртҡы тотоп, клубҡа барып ингән дә, егеттәрҙе уңлы-һуллы һыҙырып ташлаған икән. Һуңынан улары "кем тәҙрәнән, кем мөрйәнән сығып ҡасышып бөттөк" тип көлөп һөйләнеләр. Ауыл егеттәре үҙҙәре лә ҡуйманы, нимәнән дә ҡыҙыҡ табырға тырышып торҙолар. Шул хәлдән һуң ауылға ҡунаҡ булып килгән бер егетте "бар шул ҡыҙҙы саҡырып сығар" тип беҙгә индереп ебәргәндәр ҙә, ситтән күҙәтеп торғандар. Теге егет бер аҙ һуҡмыш, кемдең-кем икәнлеген белмәгән ят кеше, килгән дә ингән. Мин бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡанмын. Атайым тегенең муйынынан эләктереп алып, урамдағы ат санаһы өҫтөнә йығып һалған. Саҡ ысҡындырып алып, айырып ебәрҙем, тип һөйләне аҙаҡ әсәйем. Отпускыға ҡайтҡан моряк булған икән, ҡасҡанында ятып ҡалған бескозыркаһы оҙаҡ ҡына бағанала эленеп торҙо.

Күрше ауылға йәйәү йөрөп уҡыным. Ауылдан бер үҙеммен. Интернатта саҡта ағас ташыусы краздарға эләгеп ҡайта инек. Атайым ағас ташыусы ир-егеттәрҙең кемдәрҙең улдары йәки туғандары булыуын ураған һайын әйтә торғайны. "Шул өс малай Алтынбайҙарҙың балалары ул, мин уларҙың атаһы менән шунда-шунда бергә булдым...", "Шул ҡап-ҡара егет шул ауылдан Ҡасҡынбаевтарҙыҡы, мин уның кеме

мендер ҡайҙалыр мал ҡыуып апарҙым..." һәм башҡалар. Аҙаҡтан "улар мине белергә тейеш, мин шуның ҡыҙы тип әйт" тип өҫтәй ине. Мин эстән генә "Ул кразщиктарға минең кем ҡыҙы булыуым нимәгә инде?" тип уйлайым. Ун дүрт-ун биш йәшлек ауыл балаһымын, ағайҙарға ултырып, юл йөрөүҙең бер ҡурҡынысын да күрмәйем. Ысынында ул юлһыҙ замандарҙа кемдәргә генә ултырып, ниндәй генә шарттарҙа юл йөрөмәне һәм "ағайҙар" ысынлап та әхлаҡлы, кешелекле булған икән, тип уйлайым бөгөн килеп. Шулай ҙа ана шул ағас ташыусыларҙың береһе бер саҡ урманға инә бирел ашарға тип туҡтаны ла, сәй эсеп алғас, "Кил, һылыу, ял итеп алайыҡ, ятып торайыҡ аҙыраҡ", тип һалмаһынмы. Минең шундуҡ ҡолаҡ ҡарпайҙы ла: "Минең атайым шул ауылдан, шундай кеше",- тийә һалдым. Теге уйлана бирел: "Һунарсымы атайың?" - тип һорай. "Эйе, - тием мин. - Мылтығы бар". "Ә-ә, беләм атайыңды..." тип ары ниМәләрҙер һөйләп, был ағай мине ауылға индереп үк китте. Быларын да һуңынан, йәшәй бирә генә аңланым. Ул шулайтып минә юлдаш була торған ир заттарына үҙе хаҡында мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт бирҙертергә, минең атайлы һәм яҡлаулы икәнлегемде еткерергә теләгән. Ирҙәр ҙә бындайҙы яҡшы аңлаған, тимәк.

Атайыма бәйле бөтөнләй ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә булып ҡуя ине. Бер мәл шулай ҡыш көнө Баймаҡ районының Ишей ауылына автобус менән килеп төштөм дә, үҙебеҙҙең районға йәйәүләп ҡайтырға сыҡтым. Фатирға инмәнем, ҡабаланып китеп барыуым. Ҡышын киске биштә эңер инде, тора-бара бөтөнләй ҡараңғы төштө. Урманда ай һәм ҡар яҡтыһы менән генә тоҫмаллап атлайым. Бара торғас, аҙашҡанымды аңлап алдым, таныш урындар юҡ, барам да барам. Арыным. Тик кире боролмайым, сөнки инде оҙон ара үткәнмен. Шул саҡ ҡаршыма ағас тейәгән трактор килеп сыҡты. Кабиналағы ике урыҫ мине күреп шаҡ ҡатты. Мин "шунда-шунда барам" тием. "Был яҡта Шанский, Йылайыр районы", тиҙәр. Былар менән ай-вайыма ҡарамай, ултыртып алдылар. Урыҫ ауылына барып ингәс, "Анау оста башҡорт ҡатыны йәшәй, шунда бар", тип төшөрөп киттеләр. Был ауылда староверҙар һәм улар мосолмандарҙы фатирға индермәй ине. Ауыл осона эҙләп барһам, өйҙөң ҡапҡаһы бикле, тәҙрәһендә ут юҡ. Туҡылдатып, көтөп, оҙаҡ торҙом. Тундым. Шул саҡ атайымдың ошо Шанскийҙағы таныш һунарсыһы иҫкә төштө. "Ахотник Сашкы" тип әйтә торғайны. "Йүнде кеше түгел ул, йөрөгәне менән бер бур, ҡапҡандарымды урлап китә, урманда осрағанда һаулыҡ та алмай", тип тә һөйләй ине. Шул "ахотник Сашкы" атайымдың йылҡы ҡышлатҡан еренән һунар этен дә урлап киткән булған. Эт утарҙағы көнтәйгә әйрәп ҡалған да, был һунарсы үтеп барышлай хужаһыҙ этте күреп, сыныврлап алып киткән. Атайым яҡынса һиҙемләп, этен эҙләп барып, нисектер алып ҡайтҡан. Мин был тарихты салы-сарпы ғына ишетә белә инем. Шуларҙы иҫләп, хәҙер киттем "ахотник Сашкы"ның йортон эҙләп. Һорашып барып таптым. Төн. Ҡапҡаһын ҡаҡам. Ир тауышы ҡапҡа аша һөйләшә. "Кто там?"- ти. "Дочь такого охотника, из такой-то деревни", - тим. "Не знаю такого", - ти был. Башҡа сарам булмағандыр ине: "Вы еще у него белую собаку украли", - тием. Теге бер аҙ өндәшмәй тора ла: "Он же забрал его, что вам еще надо?" - ти. "А я заблудилась", - тип үҙемдекен һөйләйем. Аҙыраҡ торғас, был ҡапҡаһын асты һәм: "Твой батя - басмач! Чуть не застрелил меня из-за собаки, а я тут его детей смотреть должен что ли?" - тип әрләй-әрләй өйөнә алып инде. Яҡтыға ингәс, ҡараһам, урыҫым ҡот осҡос ҡурҡыныс ҡиәфәттәге, шыр наколкалы бер әҙәм икән. Етмәһә, яңғыҙ йәшәй. Әммә сығып китер урыным юҡ, шым ғына үтеп, һикеһенә ултырҙым. Был минә ябынып ятырға толоп бирҙе, итегемде мейес башына киптерергә ҡуйҙы, ап-ҡара итеп ҡаты сәй яһаны, үҙе атайымды әрләп, һөйләнеп йөрөй. Ҡурҡып ҡына ятһам да, арыу алған - йоҡлап киткәнмен. Иртәнсәк урыҫ мине тоғро юлға (был да атайымдың һүҙе ул - тоғро юл, тоғро хәбәр, тоғро килһә, һ.б.) төшөрөп, оҙатып ебәрҙе лә, "Индермәнәм, атаң разборкаға килеп йөрөр ине, хәҙер ул минә көсөк доржен", - тип ҡалды. Ҡайтҡас, атайымдан һорашһам, ул ысынлап та этен эҙләп барып тапҡас, ирҙәр араһында низағ сыҡҡан икән. Урыҫ ҡапҡаһын асмаған, "собаку я купил" тигән. Атайым: "Минеке. Ыҫкындыр", - тигән. Ахырҙа, һыбай килеш, ҡойма аша мылтығын төбәп тороп, ысҡындыртып алып киткән. Урыҫ шуны һөйләй. Аҙаҡ атайым уға көсөк алып барып, ике көн эсеп ятып ҡайтҡан. Әйткәндәй, әлеге урыҫ кеше үлтереп тә, тукмап та, урлашып та ҡат-ҡат төрмәләрҙә йөрөгән әҙәм булған икән. Шулайтып, бында ла мине атайымдың "танышлығы" ҡотҡарҙы.

...Бәләкәс ҡыҙым менән ауылға ҡайтып, диплом яҙып яттым да, ҡабаттан ҡалаға китергә кәрәк. Яҙғы ташҡын мәле. Атайым ике йәшлек ҡыҙымды эйәр алдына ултыртып алып - бер атта, мин икенсе атта һыбай сыҡтыҡ. Ташҡын йылғаға килеп етһәк, минең ат бер нисек тә һыуға төшөргә теләмәй. Төрләсә ҡыландыра торғас, атайым ҡапыл ҡыҙҙы ла, фуфайкаһын ғына сисеп ырғытып, атты етәкләп, боҙло һыуға төштө лә китте. Ҡайҙа билдән, ҡайҙа муйындан булып һөйрәп алып сыҡты тегене. Беҙ ҡыҙым менән эйәрҙәбеҙ. Хәҙер күп йылдарҙан һуң, ҡыҙҙарым менән һөйләшеп ултырғандарҙа, мин уларға шаяртып: "Һеҙҙең атайығыҙ минең өсөн бер ваҡытта ла боҙло һыуға төшмәне, ә бына минең атайым утҡа ла, һыуға ла инә ала ине", - тип ҡуям.

Бына шундай сәйер, ҡырағай, хатта, бәлки, ҡайһы берәүҙәргә аңлашылып та етмәгәндәй ҡурсыу, яҡлау, һөйөү булды минә атайымдан. Ултырып һөйләшмәһә лә, ҡағып һөймәһә лә, хәстәрләп бармаһа ла, арҡам ныҡлығын тоя инем. Артабанғы тормошта минә тап ошо арҡалыҡ - арҡа терәр көс етмәне. Мин шул яҡлауға дусар булып йәшәнем. Атайым ҡарашында, айырым осраҡтарҙа, ҡапыл тоҡанып китә торған ҡыраҒай ҡыйыулыҡты һәр ваҡыт башҡа ир-егеттәрҙә эҙләр булдым, әммә тапманым... Ниндәй генә булғанда ла, ҡайтып ошаҡларлыҡ атайың булыуы - бер һәм уның, ни булғанда ла, һине яҡлашырға ташланыуы ике бәхет икән.

Һүҙемде йомғаҡлап, Хәлил Һөйөндөковты йөплә йем: ҡыҙҙарға кәрәк саҡта атайҙарына ошаҡлашырға була.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЯРАТАЙЫҠ, ЫШАНАЙЫҠ!

**Дуҫлыҡтың да, ғаиләнең дә төп нигеҙен ышаныс, тоғролоҡ һәм мөхәббәт тәшкил итә. Мөхәббәт - хис-кисерештәр даирәһе. Ә ышаныстың сығанағы - интуиция. Кешенең эмоциялары үҙгәреп тороусан, ә ышаныс иһә тотороҡлораҡ. Ышаныс үҙе, әлбиттә, ятатыуҙан башлана. Ана шул яратыу, мөхәббәт ышанысты етәкләүсе күпер ҙә.**

Мөхәббәт үҙе уйламаған ерҙән билән ала кеше күңелен, һис көтмәгән ҡылыҡтарға ла этәрә. Мөхәббәт, уның ҡамауында саҡта, иң татлы һәм ләззәтле кисереш булһа ла, уның, килеп ябырылыуы кеүек үк, һис уйламағанда селпәрәмә килеүе кешене ныҡ тетрәндерә һәм һыҙланыуға һабыштыра. Ышаныс та шулай. Уны юғалтыу күп саҡта үс алыуға этәрә. Сөнки кемгәләр ныҡ инанып та (тимәк, яратып), уның һине һатырға һәләтле булыуын асыу, шуға төшөнөү, уның ышанысһыҙ, хыянатсыл кеше булыуын бөтәндәр алдында ла иҫбатлау теләгән уята. Алданған кешенең үҙен дә аҡлағыһы килә: эйе, мин уны ярата, ышана инем, әммә бына, күрегеҙ, ул ниндәй әҙәм булып сыҡты. Шул рәүешле, яратышып өйләнешеп тә, һуңынан мөхәббәттәре һүрелеү, хыянат, бер-береһенә ышаныстың юғалтыу сәбәпле айырылышырға мәжбүр булған иштәр йыш ҡына бер-береһенең өҫтөнә бысраҡ өйөргә тотона, хатта ҡасандыр бер-береһенән башҡа йәшәй алмаҫлыҡ хәлдә булыуын онотоп, дошманлашыуға барып етә. Мөхәббәт менән ышаныс юғалмаһын өсөн яратышҡан йә дуҫ булышҡан кешеләр араһында тиңлек кәрәк. Береһе әфәнде, икенсеһе ҡол баҫҡысында тороусылар араһындағы дуҫлыҡ һәм мөхәббәт, тыштан нисек кенә ихлас һәм тоғролоҡло күренмәһен, асылда, уның бары тик иллюзия ғына икәнен ролдәрҙең алышыныуы уҡ иҫбатлай. Күҙәткәнегеҙ барҙыр, элек түрә булған, үҙ дәрәжәһендәге кешеләр менән аралашҡан, әшнәлек ҡорған, хатта үҙенән юғарыраҡ даирәләргә лә инә алыуынан мәртәбә тойғоһо кисергән күптәр, вазифаларынан бушатылғас, яңғыҙлыҡҡа дусар була һәм быҒаса күҙ ҙә һалмаған, әммә йәмәғәтселек алдында ташламаларһыҙ-ниһеҙ абруй ҡаҙанған шәхестәр менән аралашыу эҙләй башлай.

Имештер, шундай бер ваҡиға ла булған бит. Бер король үҙенең һаҡсыһын бик ярата, уның менән дуҫ була, уға ышана, тоғролоғона, хужаһы өсөн йәнен бирергә лә әҙер булыуына һоҡлана. Улар гел бергә йөрөй. Яуҙа ла, һунарҙа ла, кәйеф-сафа урынында ла айырылмаҫ берҙәмлек бәйләй быларҙы. Көндәрҙән бер көндө тоғро дуҫына әүерелгән һаҡсыһына шундай һорау бирә:

- Король булырға хыялланмайһыңмы?

- Мин бит малһыҙ кеше, ундай ҡиммәтле хыялды уйыма индерергә лә ҡыймайым, - тип яуап бирә һаҡсы.

- Әйҙә, бер тәүлеккә мин һинә үҙемдең тәхетте тапшырам. Егерме дүрт сәғәт буйы һин - король, ә мин һинең һаҡсың вазифаларын башҡарырбыҙ.

- Юҡ, юҡ, кәрәкмәй, - тип ҡаршылаша хеҙмәтсе, - һинән өҫтөн булыуҙы күҙ алдыма ла килтермәйем.

Әммә король ниәтенән ҡайтмай, тәжрибәне тормошҡа ашырыу өсөн тәхетен хеҙмәтсеһенә тапшыра. Һәм... һаҡсы-король үҙенең идара итеү вазифаһын король-һаҡсыны аҫыу хаҡындағы бойороҡтан башлай. Ысын королдә аҫалар...

Тимәк, мөхәббәт мәңгелек, дуҫлыҡ мәңгелек, тоғролоҡ мәңгелек, тип бик үк инанырға ярамай. Тормош, тәбиғи күренештәр үҙгәргән кеүек, кеше менән кеше араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә юҡҡа сығыу сифатына эйә. Әммә шундай хәлдәргә тарығанда, тормош селпәрәмә килде, тип, төшөнкөлөккә бирелергә, донъянан ваз кисергә генә ярамай. Мөхәббәт менән ышаныс барлыҡҡа килеүгә, уларҙың юғалыуына сәбәп тә етә. Сөнки береһе, алдараҡ әйтелгәнсә, биологик, икенсеһе интуитив төшөнсә. Сәс, күҙ төҫө, милләт кеүек төшөнсәләрҙә генә була ул тотороҡлолоҡ, хистәрҙә, тойғоларҙа даимилыҡ юҡ. Ауыр саҡтарҙа үҙ-үҙеңә ышанысты һәм ихтирамды тергеҙергә, ышанысҡа илтеүсе яңы күпер-мөхәббәтте йәнә һала алырыңа өмөттә юғалтмаҫҡа кәрәк. Донъя иркен, Хоҙайҙың ҡөҙрәте һәм һинең эске мөмкинлектәрең киң ул.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

ҺАБАҠТАР

# КЕМ КЕМДЕ ТӘРБИӘЛӘЙ?

**Улыма 7 йәштәр тирәһе ине. Йәйге көндә тынсыу ҡала һауаһын һулап ятмайыҡ, ике көнгә булһа ла ауылға ҡайтып киләйек, тип, ғаиләбеҙ менән юлға сыҡтыҡ. Әҙерәк барғас, заправкаға туктаныҡ, бер юлы туңдырма һатып алдыҡ. Ҡыҫҡаһы, көн матур, кәйеф шәп, туңдырма ялайялай юлыбыҙҙы дауам итәбеҙ.**

Шул мәлдә улым тәҙрәне аса ла, туңдырманың ҡабын осороп та ебәрә. Был хәлде былай ғына ҡалдырырға ярамай икәнен аңлайым һәм тормозға баҫам. Машинанан төшәм дә, багажниктағы күстәнәстәр һалынған бер пакетты бушатып алам. Шунан ғына улымды машинанан төшөрәм, ҡулына теге пакетты тотторам һәм юл ситендә туҙып ятҡан сүпте йыйырға ҡушам. Катын мең һүҙгә етә, улым да кирелә нә п маташа. Тик бер башланған эште ярты юлда ташлап, еңелеп тора алмайым бит инде. Ҡаты ғына өндәшеп, ҡатынды машинаға ултыртам. "Ошо пакет тулмайынса, беҙ артабан ҡуҙғалмаясаҡбыҙ", - тием улыма. Тегенең күҙҙәренән йәштәр атылып сыға, тик ул да ир затынан, бирешеп торғоһо килмәй. Тырышып-тырышып сүп йыя башлаған улыма ҡарап торам да, тағы бер пакет бушатып, уның эргәһенә ашығам.

Ярты сәғәт эсендә юл ситен таҙартып та ҡуйҙыҡ. "Был - һинең ерең, һин унда тыуғанһың һәм һин уны таҙа тоторға бурыслыһың", - тигәнерәк юҫыкта оҙаҡ ҡына нотоҡ уҡыным әле улыма һуңынан. "Атай, ә һин ни өсөн сүп йыйҙың?" тип һорай улым һөйләшеп бөткәс. "Мин һинә дөрөҫ тәрбиә бирә белгән булһам, һин туңдырма ҡабын ташламаҫ инең. Был, иң тәүҙә, минең хатам. Шуға ла һинең менән бергә уны төҙәтергә тейешмен", - тип яуапланым. Әле улыма 14 йәш, һәм ике кескәй һеңлеһен хәҙер ул үҙе өйрәтә. Сүп ташламаҫҡа ла, ерҙең хужаһы булырға ла... Мин үҙемдең атайымдан алған һабаҡтарҙы иҫкә төшөрөп, ҡәнәғәт йылмайып, ситтән генә күҙәтәм...

**Мансур ИСМӘҒИЛЕВ.**

✓ *Әсәһенең адресына ҡатынынан аҙ ғына берәй кире һүҙ ишетеүҙе ир кеше ифрат та ауыр кисерә. Шуға күрә лә, күп кенә аҡыллы ҡатындар, хәләл ефетенең әсәһе хаҡында бер ваҡытта ла насар һүҙ һөйләмәскә өйрәнә.*

ИР ҺҮҘЕ

# ҮҘЕНӘ ЫШАНМАҒАН ХАЛЫҠҠА...

## башҡалар ышана тиме ни?

**ҺОРАУ: Әсәй-атай тәрбиәһе ниндәй булырға тейеш? Халҡыбыҙға хас ниндәй сифаттар беҙгә яңы заманға яраҡлашырға ҡамасаулай?**

***Сәләх ӘХМӘТОВ, Бөрйән районы, пенсионер:*** Атай тәрбиәһе тураһында һүҙ сыҡҡанда, борон-борондан йәшән килгән традицион ғаилә моделен күҙ уңында тотам. Атай - мал табыусы, әсәй - ғаилә усағын һаҡлаусы. Иҫ киткес камил мөнәсәбәттәргә ҡоролған боронғо ғаилә институты, әлбиттә, бөгөнгө көндәрҙә һаҡланмаған. Бөтә нәмәне заманға ла һаплап булмай. Кеше бит мәңгелек ҡиммәттәр һағында тора белергә тейеш. Йәшәйештең нигеҙе булған ғаилә бөгөнгө көндә көсөргәнешле осор кисерә. Әсәй - әсәй урынында, атай - атай урынында түгел хәҙер. Ҡайһы бер йәштәрҙә бөгөн бер-береһе алдында яуаплылыҡ тойғоһо юҡ. Улар ҡорған ғаиләләре, тыуған балалары, ата-әсәләре, туғандары алдында яуаплы булырға бурыслы. Шуныһы, ғаиләнең нигеҙе ныҡ булмаясаҡ, ә киләсәге тураһында һөйләп тораһы ла түгел. Әсәй кешенең бурысы - бала табыу, уға күкрәк һөтөн биреү, хәүефле хәлдәрҙән ҡурсыу. Атай кешенең бурысы - балаға өйләнә-тирәләге тормош тураһында мәғлүмәт һәм дөрөҫ йүнәлеш биреү, матди яҡтан тәьмин итеү. Бөтә нәмә лә өйрәтеүҙән башлана бит. Атай-әсәйҙәр ошо тәрбиә ысулына - өйрәтеүгә ваҡыт бүлһен ине.

Әсәйҙәргә килгәндә, шуны әйтер инем: әлбиттә, аҡса эшләү - хәҙерге заман күҙлегенән мөһим һәм кисектергеһеҙ эш, әммә бала тәрбиәләү ҡатын-ҡыҙҙың борон-борондан килгән изге бурысы. Урам тәрбиәһенә бирмәгеҙ балағыҙҙы! Өйҙә лә тилмереп һеҙҙе көтөп ултырмаһын. Күңел йылыһы, дөрөҫ тәрбиә алған бала аяҡтарында ла нығыраҡ тора ул.

Халҡыбыҙға хас кире сифаттар тураһында һөйләгәндә инде... Беҙ һаман да бер нәмә өсөн бошмаған, иртәгәһен хәстәрләмәгән, донъя артынан ҡыумаған тәбиғәт балаһы булып ҡалыуҙы дауам итәбеҙ. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, был сифаттарыбыҙ заманға яраҡлашырға ныҡ ҡамасаулай. Етмәһә, өйләнә-тирәбеҙҙә беҙгә ҡапма-ҡаршы холоҡло кешеләр күбәйҙе. Уларҙы ҡапҡан ризыҡыбыҙҙы ауыҙыбыҙҙан тартып алып китмәҫ, тимә. Тимәк, үҙ өләшөндә бирмәҫ өсөн кисекмәстән үҙгәрергә кәрәк. Шуныһы кем беҙҙең өсөн киләсәгебеҙҙе төҙәр, тарихыбыҙҙы яҙыр, йәш быуынды тәрбиәләр? Тамырға балта сабыу менән бер түгелме һун беҙҙең был бошмаҫлыҡ?

Икенсенән, беҙ, башҡорттар, үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙ менән тулыһынса файҙалана белмәйбеҙ. Ижади потенциалға бай, көслө рухлы икәнлегебеҙҙе оноторға ярамай. Беҙгә үҙ-үҙебеҙгә ышаныс тойғоһон күптән кире ҡайтарырға ваҡыт. Үҙенә ышанмаған халыҡҡа кем ышанһын?

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

**"Әсәй яҙмалары" рубрикаһында Гөлсимә Иштанованың "Малайҙар тулы донъям", унан киләһе һанда Миләүшә Ҡәһармановаҡың "Малайҙар менән тулған донъяла" исемле мәҡәләләрен уҡығас, ошо темаға ҡағылышлы үҙемдән фекерҙәремде лә әйтергә булдым. Бер үк мәсьәләгә төрлө күҙлектән сығып ҡарау ҡапма-ҡаршылыҡтарға түгел, киреһенсә, шул уҡ нәмәне тулыраҡ күләмдә аңлауға ғына килтерәләр тип уйлайым. Был авторҙарҙың береһе "донъя тулы малайҙар" әсәһе булараҡ, ә икенсеһе - үҙе үк ете малай араһында үҫкән ҡыҙ булараҡ, әсә менән ул араһындағы ҡараш хаҡында үҙ фекерҙәрен сағылдырған.**

# БЕҘ ӘСӘЙҘЕҢ БИШ ШАТЛЫҒЫ ИНЕК...

Мин - ғаиләбеҙҙә үҫкән дүрт малайҙың береһе (беҙҙән башҡа бер генә апайыбыҙ бар). Әңгәмәбеҙ малайҙар тураһында башланғас, уны артабан да бер талай ана шул юҫыҡтараҡ алып китмәксемен. Һәр нәмәгә иғтибарлы булған Миләүшә һылыуҙың малайҙар менән әсә кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙең байтаҡ нескәлектәрен дөрөҫ кенә асып биреүсе мәҡәләһен хайран ҡалып уҡыным. Шуларға өҫтәп әйтер инем, малай кеше (ниндәй йәштә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, ир затын "малай" тип атайыҡ та ҡуяйыҡ инде) ҡатын-ҡыҙҙа булырға тейешле һәр төрлө сифаттар хаҡында уйлана башлаһа, үҙе лә һиҙмәҫтән, үҙ әсәһе менән сағыштыра ул, тигән фекерҙе лә ишеткәнем бар. Был - ысынбарлыҡ. Мәҫәлән, үҙенең булаcаҡ хәләл ефетендә тап әсәһенә оҡшаш һыҙаттар эҙләй малай заты, уларҙың мөмкин тиклем күберәк булыуын теләй. Өйләнеп, бергә йәшәй башлағас, үҙенә өндәшмәгән хәлдә лә, ҡатынының ниндәйҙер ҡылығына ҡарап, "Әсәйем тап шулай була торғайны", йә иһә, киреһенсә, "Минең әсәйем бер ҡасан да улайтманы", тигән уй була уның башында. Әсәһенең адресына ҡатынынан аҙ ғына берәй кире һүҙ ишетеүҙе ир кеше ифрат та ауыр кисерә. Хатта шул арҡала өйҙә ҙур ғына шаушыу ҡубырылеп китеүе лә мөмкин! Шуға күрә лә, күп кенә аҡыллы ҡатындар, хәләл ефетенең әсәһе хаҡында бер ваҡытта ла насар һүҙ һөйләмәскә өйрәнә.

Халыҡта "Килен алғансы - үҙ улың, килен алғас - кеше улы", тигән әйтем дә йөрөй. Миненсә, был һүҙҙәр, башлыса, үҙ уларын саманан артыҡ ныҡ яратып (кем генә үҙ улын яратмаһын инде), уларҙы киленәнән ҡыҙғанған әсәләрҙән фекерен сағылдыра. Күләш алып, айырым ғаилә ҡорған ирҙең үҙенең өҫтөмә проблемалары ла килеп сығыуы тәбиғи. Һәр саҡ әсәһенең янында ғына була алмай бит инде ул. Ғаиләһе өсөн аҡса табырға, үҙенең бала-сағаларын ҡайғыртырға тотонған был улына ҡарап, әсәй кеше, миненсә, тик Аллаға шөкөр итеп, шатланып ҡына ултырырға тейеш. Ғаиләлә иң оло Ғайса ағайымдың егет сағын хәтерләйем. Офицер булып, оҙайлы хеҙмәт итергә киткән, йылына бер генә айға сираттағы ялына ҡайтып йөрөгән был ағайым егерме биш йәшкә яҡынлаша башлағас, әсәйем менән атайымдың борсолоулы һөйләшеүҙәрен иҫләп ҡалғанмын. "Тиҙерәк килен алһа, яҡшы булыр ине, һаман халастуй йөрөп, боҙолоп китмәһен", тигән һүҙҙәре лә сынлап булһа ҡолағымда сыңлай. Бер йәй, отпускыға ҡайтҡан, инде өлкән лейтенант званиеһында булған ағайыма үҙебеҙҙең районда Фәриға еңгәмде димләп алып бирeп, хеҙмәткә оҙатҡас ҡына тынысланды әсәйем. "Хәҙер, килен менән бергә торғас, йөрәгем тыныс, - ти торғайны, - атыу әллә ҡайҙан берәй бисураны эйәртеп ҡайтмаһын, тип ҡурҡа инем..." Беҙ үҫкәндә лә "киленде үҙ йынсыңыҙҙан алығыҙ", тип һәр саҡ тылҡығаны хәтеремдә. ("йынс" тигән һүҙҙе элек ололарҙан йыш ҡына ишетергә тура килә ине. Ғәрәпсәнән "принадлежность (национальная, половая, ит.д.), йәғни, милләт, тип тәржемәләнә икән. Был һүҙҙең мәғәнәһе хәҙер бер аҙ тарайған, яртылаш ҡына тороп ҡалған тип аңлау кәрәк). Килендәренең кем булыуҙарына улдарының артабанғы тормошо ла бәйле буласағын бик яҡшы аңлаған инде оло кешеләр. Ҡалған өсөбөҙ ҙә милләтебеҙ ҡыҙҙарына өйләнеп, апайым башҡортҡа кейәүгә сыҡҡас, әсәйем дә, атайым да, ғүмерҙәренең ахырынаса улдарын донъяла иң бәхетле кеше итеп тойҙолар.

Бына шулай, һәммәбеҙҙе ваҡытында "яҡшы килен ҡулына тапшырыуҙы" хуп күрҙе улар. Хеҙмәттәге ағайымды илай-илай һағынып көтөп ала ине әсәйем. Уның хеҙмәте тамамланыуға яҡынлашҡас, инде мине егерме биш йылға әрме сафына оҙатыуы уға бигерәк тә ауыр булды, тип хәтерләйем. Шул яғыбыҙ менән беҙ әсәйебеҙҙең тик шатлығы ғына ла булға алмағанбыҙҙыр инде...

Атайым баҡыйлыҡҡа күскәс тә, әсәйем, әллә ни ныҡ ҡартаймаған булыуына ҡарамаҫтан (69 йәшендә), ауылдағы өйҙө ташлап, шул йылы уҡ Юлай ағайым һәм Йондоҙ еңгәм ҡарамағына Сибайға күсеп китте. Уларҙа ун йылдан ашыу торғас, кесе ҡустыбыҙ үҙенә күсереп алды. Кемеһендә генә йәшәһә лә, бер ваҡытта ла тормошона зарланманы. Бәғзе берәүҙәр һымаҡ, килендәренән, кейәүенән балаларын "ҡурсалап", араларға "шына ҡатып" йөрөмәне. Һәр ғаилә өсөн тәбиғи булған ниндәйҙер берәй ваҡтөйәк "ҡытыршылыҡ" килеп сыҡҡан хәлдә лә "үҙе йығылған - иламаҫ", тип кенә әйтә торғайны, йәнәһе лә, "Хәләл ефетен үҙе һайлап алғас, улы (йә ҡыҙы) уға ярап йәшәргә тейеш". Бына шундай гәзәл кеше булды әсәйем. Намаҙ һайын барлыҡ балалары өсөн һәр саҡ Аллаһы Тәғәләгә тик изге доғалары менән ялбарып ултырҙы.

Ә Ғәлиә апайыма килгәндә, ул (ғаиләлә оло ағайыбыҙҙан ҡала икенсе бала) малайҙар араһында яңғыҙы үҫкәнгәме, үҙе малайҙарҙан да "хуже" була торғайны. Ул велосипедта йөрөүгәме, ул атта һыбай сабыуғамы, беҙҙән һис кенә лә ҡалышманы. Хатта "ҡулҡүмә" уйыны уйнағанда ла, кескәй тупты һул ҡулы менән әллә ҡайҙа елгәреүенә ҡараһаң - күп малайҙарың ары торһон! Атайым уны "Минең бәльшәүик ҡыҙым", ти торғайны. Әсәйем вафат булғас, ауылда йәшәгән был апайыбыҙ беҙгә әсәй һымаҡ булып китте. Һәммәбеҙҙе (малайҙар барыбыҙ ҙа ҡалала йәшәйбеҙ) ҡәҙерләп ҡаршы ала, хөрмәтләп оҙата. Әле бишебеҙ ҙә иҫәнбеҙ, әлхәмдүлилләһ. Иң олобоҙ һикһәнгә яҡынлашҡан, ә иң кесе ҡустыбыҙ пенсия йәшенә етеп килә. "Туплы малай" булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, әсәйемә бер ваҡытта ла ҡайғырырлыҡ сәбәп бирергә тырышманыҡ, әлхәмдүлилләһ.

Хәҙерге, инде оло кеше күҙлегенән сығып, тағы ла киләһе һүҙҙәрҙе әйтер инем. Килендәр хаҡында. Малайҙарҙың ата-әсәһенә яҡшы булыуы бик күп осраҡта килендәрҙән дә тора. Гелән "ситкә ҡайырып" торған килен менән йәшәгән ир кеше әсәһенә барыбер тулыһынса яҡшы мөгәмәлә ҡорһәтә алмай. Иң кесе Йәлил ҡустыбыҙҙың хәләл ефете Мөнирә киленебеҙҙең әсәйем хаҡында һәр саҡ "Ҡәйнәм - әүлиә һымаҡ бит ул", тиеүҙәре һәммәбеҙҙең дә күңеленә бөлзәм булып ятҡандыр, тип уйлайым. Ғәзизебеҙҙән һуңғы көндәрендә шул киленебеҙ уны хатта күтәреп алып килеп өҫтәл артына ултыртып, үҙе ҡалаҡ менән ашатҡаны һаман күҙ алдымда. Ғүмере буйы һәр нәмәгә объектив, гәзәл ҡарашлы, изге күңелле булған әсәйемә Аллаһ Тәғәлә дүрт килененең һәм кейәүенең дә иң яҡшыларҙан булыуын насип иткән, тигән инаныуҙамын. Уның "Мынамын тигән балаларым, мынамын тигән килендәрем, мынамын тигән кейәүем бар, Аллаға шөкөр", тигән һүҙҙәрен хәҙер гел генә иҫкә алабыҙ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

БЫЛ ҠЫҘЫҠ

# ЙӘРЕҢДЕ ҠАЙҘА ТАПТЫҢ?

**Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән һорау алыу мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә өйләнмәгән ир-егеттәр 16 процент тирәһе, кейәүгә сыҡмаған ҡатын-ҡыҙҙар 7 процент тәшкил итә. Ғаилә ҡорған ирҙәр - 54 процент, ҡатындар - 47 процент.**

Шул уҡ ваҡытта халыҡтың яҡынса өстән ике өлөшө "етди мөнәсәбәттәр" ҡороп йәшәй: 50 проценты рәсми никахта тора, 10 проценты мөнәсәбәтен законлаштырмаған, ҡалған 2 проценты бер йылдан ашыу дуҫлашҡан, әммә бергә йәшәмәгән кешеләр тәшкил итә. Һорау алыу һөҙөмтәләре буйынса, ғашиҡтарҙың 30 проценты һөйгән йәрен уртаҡ таныштары һәм дуҫтары арҡаһында, тағы 20 проценты эштә осратҡан. Танышыу урыны итеп уҡыу йортон (вуз, колледж, мәктәп) күрһәтеүселәр 13 процент, паркта - 11 процент, концертта - 6 процент. Ә бына социаль селтәрҙәр аша мөнәсәбәт ҡороусылар 5 процент. Әйткәндәй, яңы кешеләр менән танышыу өсөн интернет ҡулайлы булыуына ир-егеттәр күберәк ышана, ундайҙар 6 процент. Интернетта 18 йәштән 24 йәшкә тиклемге йәштәр әүҙем таныша, уларҙың һаны - 16 процент. Был урамда йәки парктарҙа танышҡан йәштәргә ҡарағанда ике процентҡа әҙерәк, дуҫтар (27 процент) һәм курсташтар (17 процент) араһында йәрен табыусылар һанынан да түбәнерәк.

✓ *Ете диңгеҙ аръяғындағы бер аҙналыҡ ял Башҡортостан буйлап сәйәхәттең бер-ике көнөнә лә тормай. Үҙенә нисә быуындың йәшәйешен күҙәткән мәғрур тауҙарға бер менеп төшөү ҙә күңелгә тыныслыҡ уята.*



ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАШ БУТАП АЛАЙЫҠ!

Әлегерәк ауылыбыҙҙа ифрат та шаян бер ағай йәшәне. Һәр төрлө мәҙәктәр уйлап сығарып, йәштәрҙең "башын ҡатырыуға" маһир булды. Ҡыҙыҡлы һорауҙар биргән булып, кешеләргә "төрттөрөп" көлдөрөр ине. Бер мәл миңә:

- Ҡустым, һиңә ике һорауым бар. Береһе зоология темаһына, ә икенсеһе - сәйәсәткә ҡағылышлы бик мөһим һорау, - тине гәҙәтенсә мут йылмайып.

Мин ни, ундай-бындай әңгәмәләргә ҡушылып китергә һәр саҡ ихлас инде. Бик етди төҫ алып, был ағайҙы тыңларға әҙерләндем.

- Йә, Ишбулды ағай, бир һорауыңды.

- Беренсеһе, әйткәнемсә, зоология фәненә ҡағылышлы. Барыбыҙ ҙа белеүебеҙсә, йылҡы менән һыйыр малы бер үк шарттарҙа йәшәй. Бер төрлө бесән ашай, шул уҡ һыуҙы эсә, әммә уларҙың тиҙәктәре шул тиклем бер-береһенән ныҡ айырыла. Уларҙың формалары һәм консистенциялары бөтөнләйгә башҡа... Ни өсөн шулай? Ошоға яуап биргәндән һуң, бик "важный" сәйәси һорау бирәм үҙеңә...

Уға биология дәрестәрендә өйрәнгән белемем кимәлендә хайуандарҙың был ике төрөнөң эске ағзалары төҙөлөшө айырмаһы тураһында һөйләп бирҙем. Әммә Ишбулды ағайым минең менән һис кенә лә ризалашырға уйламай.

- Юу-уҡ, ҡустым. Эш бөтөнләйгә унда түгел. Тағы бер аҙ уйлаңҡыра...

- Һыйыр - көйөш малы, ашаған үләнен кикереп сығарып, яҡшылап көйшәп, йәнә кире йота бит ул, ә ат, үләнде ары-бире сәйнәп, шул көйөнсә генә һоғона бирә...

- Улай ҙа түгел...

Нисек кенә итеп аңлатырға тырыша торғас, тамам арыным.

- Юҡ, Ишбулды ағай, башҡаса бер нисек тә яуап бирә алмайым, давай, теге "политический вопросыңды"!

- Һин, ҡустым, әле тиҙәкте тиҙәктән айыра алмайың, ә үҙең политикаға ҡыҙыҡһынмаҡсы булаһыңмы?..- тип ауыҙҙы япты ағай.

Икенсе бер мәл был ағай миңә йомаҡ әйгән булып, тағы бер аҙ ҡаңғыртып алды:

- Йомаҡтар беләһеңме, ҡустым?

- Белә торғайным. Мәктәптә лә үттек.

- Улай булһа, тыңла:

Ура, һуға, елгәрә,
Үҙе тейәп ебәрә,
Эшләүҙә лә иренмәй,
Үҙе күҙгә күренмәй...

Был йомаҡ ифрат та таныш һәм ябай һымаҡ, әммә шул уҡ ваҡытта яуабын да әйтә алмайым. Тәүге яртыһы комбайнды, икенсе яртыһы электр тогын аңлатҡан ике йомаҡты бергә ҡушып биргән икән был шуҡ ағай...

"Өйөм башында ярты икмәк", тигән йомаҡтың яуабы "Ай" икәнен һәр кем белә. Бер мәл ошо йомаҡ менән мин дә таныштарымды шаяртып алырға булдым. Тегеләргә былай тип әйтәм "Өйөм башында ярты Ай" - шул нимә була? Күптәре, нишләптер, һис тә уйлап тормаҫтан, "икмәк" тип яуап бирә (ошо йомаҡты һәр кемегеҙ ҙә таныштарығыҙға тап ана шулай итеп әйтеп ҡарағыҙ әле)...

Бала сағыбыҙҙа "Әкиәт һөйлә", тип, әсәйҙәрҙең мәҙәһына тейәбеҙҙәр инде. Һөйләп арыһа ла, унан артабан һөйләтергә тырышҡас, әсәйем: "Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән ти. Уларҙың өйҙәре һалынған ти таштан... Һөйләйемме баштан?" "Йә!" "Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән. Улар сәскәндәр ти тары... Һөйләйемме тағы?" "Һөйлә!" "Борон-борон бер бабай йәшәгән. Уның бер аты булған. Атына һатып алған ҡамыт. Һөйләйемме ҡабат?..." "Элек-элек берәү булған, әләккән дә йығылған..." "Борон-борон берәү булған, боролған да йығылған..." Беҙ, ғаиләлә үҫеп килгән өс балаҡас малай, әсәйемдең бына шул "әкиәттәрен" хәтерләп ҡалабыҙ ҙа, һуңынан бер-беребеҙҙең "башын ҡатыра" башлайбыҙ...

Шулай итеп, гәзит уҡыусылар өсөн бер "баш ҡатырғыс" та яҙып ебәрмәк булдым. Уның хәйләһен зирәк кешеләр шунда уҡ аңлай, әлбиттә. Тик тыңлаусыға был мәсьәләне оҫта ғына итеп алып килеп "тоттора" белергә кәрәк. Бөгөн берәүҙәргә, тәү ҡарауҙа, был хатта математиканың бер мөғжизәһе һымаҡ та булып тойола башлай һәм, ысынлап та, аптырауға һала.

Бер ауылда итек тегеү оҫтаһы йәшәгән. Уның бер улы булған. Тегеүсе бер пар итек теккән дә, улын саҡырып алған.

- Улым, бына ошо бер пар итекте баҙарға алып барып, егерме һумға һатып, аҡсаһын теүәл генә итеп алып ҡайт, - тигән атаһы.

Малай баҙарҙа көнө буйы ултырған, әммә итекте һатып алыусы булмаған. Төш ауып, баҙар тамамланғас, итектәрен тотоп, өйөнә ҡайтырға сыҡҡан. Ауылға килеп етеү менән бер нәмә иҫенә төшкән: ул ауыл осонда ике ғәрип йәшәй икән. Береһенең уң, икенсеһенең һул аяғы булмаған. Малай уларҙың өйҙәренә инеп, итектәрҙе тегеләрҙең һәр береһенә һынарлап һатҡан. Әммә инвалидтарҙан атаһы әйткән хаҡты (егерме һум) түгел, уларҙың һәр береһенән 12 һум 50-шәр тин, йәмләһе, егерме биш һум алған...

- Атай, мин итектәрҙе бик уңышлы һаттым! Хатта егерме һумға ла түгел, ә егерме бишкә!.. - Малай атаһына булған хәлде әҙмә-әҙ һөйләп биргән һәм уның ҡулына егерме биш һумды тотторған. Әммә улының был ҡылығы атаһына оҡшамаған.

- Һин нишләп ғәриптәргә хаҡты арттырып һатҡанһың? Мә, биш һумды ал. Уларға кире ҡайтарып бир!

Аҡсаны алып, малай уйлана-уйлана өйөнән сығып киткән. Бер кибет янынан үтеп барышлай шулай ҙа түҙмәгән, унда инеп, әлеге биш тәңкәнең өс һумына кәнфит алып ашаған. Ҡалған ике һумды теге ике инвалидҡа берәр һумдан ҡайтарып биргән...

Хәҙер лаҡапты тыңлаусыға һорауҙы ошолай тип бирергә кәрәк:

- Иң башта инвалидтарҙың һәр береһе итекте малайҙан күпмешәр хаҡҡа һатып алды?

- Әлбиттә, 12 һум 50-шәр тингә, - тиәсәк тыңлаусы.

- Ә берәр һумын кире ҡайтарып биргәс, һәр ҡайһыны күпмешәрҙән һатып алған булып килеп сыға инде?

- 11 һум 50-шәр тиндән...

- Ифрат дөрөҫ. Хәҙер инде һанап ҡарайыҡ: бер инвалид малайға 11 һум 50 тин, икенсеһе лә шулай уҡ аҡса бирҙе. Барыһы - 23 һум булды. Ә тағы 3 һумына малай кәнфит алып ашаны. Бөтәһе күпме була?

- 26 һум... - Ә бит малайға улар барыһы 25 һум биргәйне, артыҡ бер һумы ҡайҙан килеп сыҡты һуң?

- ...

**Хөрмәтле уҡыусылар, бәлки, кемдер бындай башбутағыстарҙы күберәк тә беләләр, гәзитебеҙҙә уларҙы ла күреүемә шат булыр инем.**

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Башҡортостан тәбиғәтенең матурлығы бөтә донъяға билдәле, тиһәм шыттырыу булмаҫ бер ҙә. Беҙҙәге кеүек аҡ ҡайынлы, бейек ҡарағайлы урмандар, дарыу үләндәренең бөтә төрөн дә үҙенә йыйған хуш еҫле болондар, йөҙөп йөрогән балыҡтары күренеп ятҡан йылға-күлдәре - һүҙ менән был гүзәллек тураһында һөйләп бөтөрлөк түгел. Шәхсән үҙем тауҙарға айырым тукталмайынса үтә алмайым, сөнки улар һәр саҡ беҙҙе саҡыра кеүек.**

# СӘЙӘХӘТ ИТӘЙЕК!

Сәйәхәт итергә гел яраттым. Университетта уҡыған йылдарҙа, унан һуң да дуҫтар менән республиканың төрлө төбәгендә булырға тура килде. Аҫҡарҙа эшләй башлағас та, район йәштәрен йыйып Ирәмәлгә күтәрелеү уйы барлыҡҡа килде. 2017 йылдың декабрендә "Кем 2018 йылдың 1 ғинуары Ҙур Ирәмәлгә күтәрелергә теләй, миңә яҙығыҙ", тип "Бәйләнештә" селтәрендә иғлан бирҙем. Яңы йылдың тәүге көнөндә Башҡортостандың иң бейек тауҙарының береһендә баҫып торорға теләүселәр байтаҡ ҡына йыйылды һәм 1 ғинуар 12.00 сәғәттә беҙ, Әбйәлилдән 8 һәм дөйөм командала 25 кеше, Ирәмәл түбәһендә инек. Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларынан йыйылған сәйәхәтселәр Силәбе өлкәһе Төлөктә осраштыҡ бөтә команда менән. Был поход барыһына ла оҡшаны, тауҙарҙы "яулау"ҙы дауам итергә һөйләшеп таралыштыҡ.

Быйыл, ғөмүмән, тауҙарға күп йөрөнөк. Иң иҫтә ҡалғаны "Тау батшаһы" проектында ҡатнашыу булды. 10 кешенән торған район командаһы менән "Шүрәле теше", "Өфө" сусағы, Бәләкәй Ямантау, Әрүәкрәз (Арвякрязь), 1-се һәм 2-се Еләкле, Яланғас, Һибелмә (Рассыпная) тауҙарын, Марюткин ташын һәм Ирәктәшты артылдыҡ. 3 мартҡа тиклем 11 түбәгә күтәрелеп, 4-се урынды яуланыҡ. Йәйгеһен шулай уҡ йәштәр менән Әбйәлил районының Ҡараташ, Ҡушай тауҙарына мендек, балаларҙы Гәҙелша шарлауығына һәм Талкаҫ күленә алып барҙыҡ.

Ни өсөн быларҙың барыһын да тәфсирләп яҙа һуң, тиерһегеҙ. Сөнки ошондай сәйәхәттәр ваҡытында донъя мәшәҡәттәренән арынып рәхәтләнеп ял итергә, күңелгә тыныслыҡ алып, фекерҙәрҙе бер епкә теҙеп ҡайтырға мөмкин. Йәштәрҙе сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу, кескәйҙәрҙә тыуған еренә ҡарата һаҡсыллыҡ тәрбиәләү, аралашыу - барыһы ла сәйәхәттең иң позитив ноталары. Ете диңгеҙ аръяғындағы бер аҙналыҡ ял Башҡортостан буйлап сәйәхәттең бер-ике көнөнә лә тормай, минеңсә.

Үҙенә менәрләгән, миллионлаған йылдар ауазын һыйҙырған, нисә быуындың йәшәйешен күҙәткән мәғрур тауҙарға бер менеп төшөү ҙә күңелгә тынысылыҡ уята. Беҙ - ошо ерҙең балалары, беҙҙең рухи бәйләнеш быуаттар буйына нығынған. Шуға ла күпме генә сит тарафтарға сәйәхәт ҡылһаҡ та, йәнебеҙ менән тыуған яҡтарҙа ғына ял итеп, көсөбөҙҙө туплай алабыҙ. Мөһабәт, урыны менән ҡырағай тәбиғәт. Юлдың һәр боролошо һайын туҡтап, палатка ҡороп бер нисә көн булғанда ла ҡарап туйғыһыҙ тирә-яҡ. Һәм быларҙың барыһы ла ҡул һуҙымы ерҙә генә, сөнки үҙебеҙҙең республикала.

Дуҫтар, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең Башҡортостан буйлап сәйәхәт итәйек. Тауҙарға артылайыҡ, күл-йылғаларҙа йөҙәйек, мәмерйәләрҙең быуаттар һалҡынлығын һаҡлаған залдарына инәйек, бәләкәй һәм ҙур ауылдарҙы, ҡалаларҙы күрәйек. Бындай сәйәхәт урындағы эшҡыуарҙарға ла, халыҡҡа ла әҙме-күпме үҙ файҙаһын бирә, сөнки походтар ваҡытында тегенеһе-быныһы кәрәк булып ҡына тора. Башҡортостанға әллә ҡайҙарҙан туристар йәлеп итер алдынан, шәхсән үҙебеҙ күреп йөрөп сығайыҡ тыуған төйәгебеҙҙе.

**Шайморат НӘБИУЛЛИН,**
**Әбйәлил район хакимиәтенең йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ШЫРШЫЛАРҘЫ КИҪМӘЙЕК!

*Йәш кенә йәшел шыршыҡай*
*Ҡорбан итеп салынған.*
*Тамырынан сабып өҙөп,*
*Әүернәгә ҡағылған.*

*Байрам итеп, тыпырҙашып,*
*Һеҙ бейегән сағында,*
*Тып-тып итеп шыршыҡайҙың*
*Күҙ йәштәре ағыла.*

*Ялтыр тәтәйҙәр артында*
*Әрнеү тулы ҡарашы.*
*Әсе сайырға уҡмашҡан*
*Әйтелмәгән ҡарғышы.*

*Тонсоға ул тынсыу өйҙә*
*Һыуһыҙ, һутлы тупраҡһыҙ.*
*Тыуған урманын һағынып*
*Зарға сәсәй форсатһыҙ.*



*Әрнеү-рәнйеш алмай ғына*
*Урман һылыуҡайынан.*
*Ҡаршылайыҡ әле йылды*
*Риза булып барынан.*

*Тыуып килгән яңы йылды*
*Матур байрам итәйек.*
*Йәшел генә шыршыҡайҙы*
*Йәшле шыршы итмәйек.*

**Миләүшә ҠЫҘРАСОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЕЛ СӘЙ...
## һөйәкте нығыта

■ Көн һайын йәшел сәй эсеү һөйәктәрҙең тығыҙлығын нығыта. Был мәғлүмәт бигерәк тә гүзәл заттарға ҡағыла. Әгәр ҙә кеше һуңғы 30 йыл эсендә йәшел сәй эсһә, уның һөйәктәре ысынлап та тығыҙ булып сыға. Быны уларҙың яуаптарына һәм медицина карталарына ҡарап билдәләйҙәр. Йәшел сәй эсмәүселәр менән сағыштырғанда, уларҙа һөйәк һыныу осраҡтары 12 процентҡа һирәгерәк осраған. Эксперимент барышында йәшел сәй эсеүселәрҙең ҡайһыларының 30 йыллыҡ тәжрибәһе булмай. Уларҙа бот һөйәге һыныу осраҡтары 30 процентҡа түбәнәйгән. Йәшел сәйҙең быңдай ыңғай тәьҫиренең сәбәбен ғалимдар әлегә аңлата алмай.

■ Британия ғалимдары асыҡлауынса, матди яҡтан ғаилә етеш йәшәй икән, ҡатын да бәхетле. 6 йыл дауамында белгестәр халыҡтың бәхет кимәлен сағыштырған. Унда ҡатнашыусылар тормош менән ҡәнәғәт булыуҙары, хәүефтәре тураһында һөйләгән. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар араһында үҙен бәхетле итеп тойоусылар һаны күберәк булып сыҡҡан. Ни өсөн ирегет үҙен йышыраҡ бәхетһеҙ тоя - бының сәбәбен ғалимдар билдәләй алмаған. Һорауҙарға бер үк кешеләр яуап биргәнлектән, уларҙың яуаптарын сағыштырырға мөмкинлек булған. Йылдан-йыл гүзәл зат үҙен бәхетлерәк тип иҫәпләгән, әммә хәүеф тойғоһо ла үҫә барған. Белгестәр быны ғаиләләге матди хәлдең яҡшырыуы менән аңлата. Шуныһы ла ҡыҙыҡлы - 1990 йылдарҙа үҫкәндәр менән сағыштырып ҡарағанда, 2000 йылдан һуң тыуыусылар араһында тормоштары менән ҡәнәғәт булмаусылар һаны күберәк. Уларҙың үҙбаһаһы ла түбәнерәк булып сыҡҡан.

■ Спорт менән шөғөлләнеү бөгөн модала. Фитнес залдарға йөрөгәндәргә һоҡланып ҡарайбыҙ. Әммә физик әүҙемлек кешегә ген менән бирелә икән. Бына тап беҙ уларға ҡарап һоҡланғандарҙың был сифаты уны нәҫелдән күскән. Тимәк, нишләп спорт менән шөғөлләнмәйһең, тигән һорауға хәҙер: "Нәҫелдән бирелмәгәс ни" - тигәнерәк яуап биреп буласаҡ. Шулай ҙа һәр өлкән кешегә аҙнаһына талғын әүҙемлек, мәҫәлән, велосипедта йөрөүгә 150 минут йәки әүҙем күнекмәгә, мәҫәлән, йүгереүгә 75 минут бүлергә кәңәш ителә. Был бөтөн төркөм мускулдарын формала тоторға ярҙам итә.

■ Класик музыка юғары ҡан баҫымын төшөрә, ти Сан-Паулу университеты ғалимдары. Тик бының өсөн башта ҡан баҫымынан дарыу эсергә кәрәк икән. Дарыу эскәс, төшә инде, тиергә ашыҡмағыҙ. Музыка дарыуҙың тәьҫирен көсәйтә, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа юғары ҡан баҫымы менән даими яфаланыусы 37 өлкән кеше ҡатнаша. Улар быға тиклем 6-12 ай дауамында гипертониянан дауаланған була. Дарыу эскәндән һуң, улар 60 минут буйына инструменталь музыка тыңлаған. Уларҙың йөрәк тибеше йышлығын 20, 40, 60 минуттан һуң үлсәп ҡарағандар. Экспериментты 48 сәғәттән һуң тағы ҡабатлағандар. Ғалимдар билдәләүенсә, музыка юғары ҡан баҫымынан ҡулланылған дарыуҙарҙың тәьҫирен көсәйткән. Ыңғай һөҙөмтә музыканы 15 минут тыңлағас уҡ күренгән.

БАЙРАМ ТАРИХЫНАН

# ЯҢЫ ЙЫЛ - ЯҘҒЫ ЙОЛА...
## йәки Яңы йылы менән, туғандар!

**Яңы йылды ҡаршылау - бөгөнгә тиклем килеп еткән иң боронғо ритуалдарҙың береһе, шуға күрә уны кешелектең тарихи байрамдары рәтенә индереп була. Был байрам нисек барлыҡҡа килгән һуң?**

Бының өсөн боронғо ҡәүемдәрҙең ваҡыт төшөнсәһен аңлай башлауы тәү шарт булып торған. Билдәле булыуынса, боронғо кешеләр аңында ваҡыт төшөнсәһе миҙгелдәр алышыныуы, тәбиғәттә йыл һайын ҡабатланып торған үҙгәрештәрҙе күҙәтеү нигеҙендә формалашҡан. Аңдары үҫешә барған кешеләр үткән ваҡытты иҫәпләү өсөн бик ҡулай булған үлсәм - йыл төшөнсәһен булдыра. Архаик замандарҙа һәр яңы йыл ерҙәге барса тереклектең яңырыу осоро - яҙ миҙгеле етеү менән башланған, һәм был мәңгелек күктең, тәбиғәттең кисектергеһеҙ ҡануны рәүешендә ҡабул ителгән. Кешеләр аңында яҙ башы - яңы йыл башы - яҙғы ерҙең сираттағы йәнләнеше, яңырышы рәүешендә сағылыш тапҡан. Тап шуның өсөн дә боронғо халыҡтар яңы йыл башын март айында байрам иткән.

Иң боронғо яҙма сығанаҡтарҙан булған Муса бәйғәмбәр закондарында (б.э. тиклем 2 мең йыл әүәл) Яңы йылды "авив" (башаҡ) айынан һанай башлау тураһында әйтелә, был март-апрель тирәләренә тура килә. Төркиҙәрҙә Яңы йылды яҙ килеү менән байрам итеү йолаһы хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалып, Наурыҙ исемен йөрөтә. Моғайын, төркисә "навруз" һүҙе яҡынса "нав арз"дан алынып, "яңы дөгө", "яңы ризыҡ" ("арз" - ғәрәпсә дөгөнө, йәғни ер ризығын белдерә) мәғәнәһендә ҡулланылған. Әйткәндәй, беҙҙең "Иҫке ауыҙға - яңы аш", тигән әйтемебеҙ ҙә бик боронғонан ҡалғанға оҡшай, яҙ көнө - үлән-фәлән, йәйен eләк-емеште ауыҙ иткәндә шулай тибеҙ бит.

Әйтегеҙ әле, боронғо кеше яҙ килеү менән нимәгә шатланырға тейеш? Әлбиттә, ҡояшҡа, йылыға. Тимәк, Наурыҙ байрамында ата-бабаларыбыҙ бер-береһен яңы Ҡояш, яңы Ырыҫ, яңы Ҡот (русса: новый Год) һәм, әлбиттә, яңы Йылы менән ҡотлаған-тәбрикләгән. Тарих төпкөлөндә тәүге арийҙар булып танылған башҡарт ҡанбабаларыбыҙға ҡанҡәрҙәш остготтарҙың илаһы ла юҡҡа ғына Гот тип аталмағандыр ул.

Яңы йылдың яҙ байрамы булыуҙан туҡтауы Рим императоры Юлий Цезарь менән бәйле. Б.э. тиклем 45 йылда ул хәҙер юлиан календары тип аталған йыл иҫәпләү системаһын индерә. Тап шул ваҡыттан башлап Рим империяһында "календарь" байрамы, йәғни Яңы йыл 1 ғинуарҙа билдәләнә башлай. "Ғинуар" атамаһы римлылар табынған ике йөҙлө илаһ Янустың исеменән алынған: уның йөҙөнөң бер яғы уҙған йылға ҡараһа, икенсеһе алдағы йылға төбәлгән була.

Яңы йылда бер-берендe ҡотлап, бүләктәр биреү ҙә бик боронғо күренеш икән. Шул уҡ Рим граждандары бер-береһенә Яңы йылда Янус илаһтың һүрәте төшөрөлгән тимер аҡсалар, башҡа бүләктәр тапшырған. Яңы йыл төнөндә ҡолдар хужалары менән бергә күңел асҡан, ашаған-эскән. Ә иң ҡиммәтле бүләктәр императорға тәғәйенләнгән. Император Калигула Яңы йылдың тәүге көнөндә үҙ һарайы алдындағы майҙанда римлыларҙан бүләктәр ҡабул иткән, кемдең ниндәй бүләк килтергәне махсус исемлеккә теркәп ҡуйылған.

Боронғо Вавилонда Яңы йыл ҡаршылау алдынан батша үҙенең ярандары менән ҡаланы ташлап сығып китер булған: йәнәһе, минән башҡа ни ҡылһағыҙ ҙа, үҙ иркегеҙҙә. Халыҡ танһығы ҡанғансы күңел асҡан, бер кемдә бер ниндәй ғәмәлдән тыйыусы булмаған. Бер нисә көндән батша кире ҡайтҡас, ҡәҙимге тормош башланған.

Урта быуаттарҙа Англияла ла Яңы йыл 1 мартта байрам ителгән. 1752 йылдың Яңы йыл башын 1 марттан түгел, ә 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләү тураһында Англия парламенты махсус ҡарар ҡабул иткәс, ҡатын-ҡыҙҙар зыҡ ҡупҡан. Бер төркөм ҡатын-ҡыҙ парламент спикерына килеп, парламенттың ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер юлы бер нисә тиҫтә көнгә ҡартайтырға хоҡуғы юҡ, тип белдергән. Спикер ҙа аптырап ҡалмаған: "Һеҙҙең әйткәнегеҙ бер ни ҙә түгел, бары ҡатын-ҡыҙ логикаһының классик өлгөһө генә", - тип яуаплаған, имеш. Ул замандарҙан инглиз телендә "pin money" (булавка өсөн аҡса) тигән термин тороп ҡалған, сөнки Яңы йылда ирҙәр тарафынан бүләк ителгән булавка ҡатын-ҡыҙ өсөн бик шәп бүләк, тип иҫәпләнгән. Ә Англия королеваһы Елизавета I үҙенә һәр Яңы йылда бүләк ителгән, ҡиммәтле аҫылташтар менән биҙәлгән сигеүле бирсәткәләрҙән тотош бер коллекция туплаған.

Рәсәйҙә шулай уҡ төрлө дәүерҙәрҙә йыл хисабын алып барыу һәм Яңы йыл башын билдәләү төрлөсә булған. Боронғо Русь дәүләтендә Яңы йыл, башҡа халыҡтарҙағы кеүек, 1 марттан башланған, ә йыл иҫәбе донъя яратылған ваҡыттан башлап алып барылған. XIV быуатта Мәскәү сиркәү соборы, грек календарына ярашлы, Яңы йыл башын 1 сентябргә күсерергә ҡарар итһә лә, был ҡарар бөйөк кенәз Иоанн Васильевич Өсөнсөнөң ҡәтғи талабы буйынса 1492 йылдан ғына сиркәү һәм граждандар йылын иҫәпләүгә нигеҙ булып китә. 1 сентябрь бер үк ваҡытта яһаҡ, пошлиналар һәм башҡа түләүҙәрҙе ҡабул итеү көнө, тип һанала. Был көндә батша Кремлгә килгән, унда сиркәүҙең юғары вазифалы руханиҙары менән тантаналы сараларҙа ҡатнашҡан, бында килгән һәр кем батшаға яҡлау һәм ғәҙеллек һорап мөрәжәғәт итә алған. Рәсәйҙә 1 сентябрҙә Яңы йылды ҡаршылау һуңғы тапҡыр 1698 йылда булған. 1699 йылда Европала оҙайлы сәйәхәттә йөрөп ҡайтҡан Петр I йыл башын 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләүҙе, йыл хисабын донъя башынан түгел, Христос тыуғандан алып барыуҙы талап иткән указ ҡабул итә. "Рәсәйҙә Яңы йылды төрлөсә иҫәпләү булғанлыҡтан, ошо числонан кешеләрҙең башын ҡатырыуҙы туҡтатырға һәм бар ерҙә лә Яңы йылды 1 ғинуарҙан алып иҫәпләй башларға. Ошо изге башланғыс һәм күңел асыу хөрмәтенә бер-берендe, эштә уңыштар һәм ғаилә именлеге теләп, Яңы йыл менән ҡотларға. Яңы йыл хөрмәтенә шыршылар ҡуйырға, балаларға уйындар ҡорорға, тауҙан санала шыуыу ойошторорға. Ә ололарға эскелек һәм танау емереү менән булмаҫҡа - бының өсөн башҡа көндәр ҙә етерлек", тиелә батша указында. Эйе, Петр батшаның был талаптарын беҙ бөгөн дә еренә еткереп үтәһәк, оҙайлы Яңы йыл байрамыбыҙ күңелле һәм ипле генә үтер ҙә китер ине...

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

БАЙРАМ ТАБЫНЫНА

# ТУЛТЫРЫЛҒАН ҠАҘ



Ҙур кәстрүлдә һыу ҡайнатығыҙ. Ҡаҙ түшкәһе кәстрүлгә тулыһынса һыймаясаҡ. Башта аяҡтарынын тотоп, ҡаҙҙы 1 минутҡа һыуға тығығыҙ. Һыуҙан алып, әйләндерегеҙ ҙә, ҡаҙҙың аҫҡы өлөшөн һыуҙа тотоп алығыҙ. Һуңынан ҡаҙҙы эстән дә, тыштан да яҡшылап ҡоротоғоҙ. Тоҙҙо шулай самалайҙар: 1 кг иткә 1 балғалаҡ эре тоҙ. Тоҙға ҡара борос, үҙегеҙгә оҡшаған тәмләткестәр өҫтәгеҙ ҙә, шуның менән ҡаҙҙы эстән-тыштан ышҡып, 1 тәүлеккә һалҡын урынға, мәҫәлән, һыуытҡысҡа ҡуйып торорға. Иң яҡшыһы - ҡаҙ түшкәһен соланға элергә. Шул саҡта уның тиреһе кибәсәк һәм бешкән ҡыртыш алтынһыу булып, ҡытырлап торасаҡ. Бынан тыш, ҡоролай тоҙлаған саҡта ит ҡаҡлана һәм бешергән саҡта ите һутлы була.

Ҡаҙҙы үҙен генә лә бешерергә була. Әммә ҡаҙ ите тағы ла тәмлерәк булһын өсөн, уны эре итеп киҫкеләнгән алма йәки айва менән тултыралар. Эслек күп булырға тейеш түгел. Тултырылған ҡаҙҙы еп менән тегергә кәрәк, аяҡтарын да бәйләү ҡулайлыраҡ. Бешерергә ҡуйғанда ҡаҙҙы арҡаһына һалалар, 20-30 минуттан әйләндереп, утты кәметәһең. Һәр 10-15 минут һайын ҡаҙҙы ирεп аҡҡан май менән ҡойоп тораһың. Табалағы май янмаһын өсөн уға әҙ-әҙләп һыу ҡоялар. Һәр 20-30 минут һайын ҡаҙ түшкәһен әйләндерергә кәрәк. Әҙерлеген белеү өсөн сәнсеп ҡарарға кәрәк - һут үтә күренмәле булһа, ит әҙер. Ҡаҙ мейестә яҡынса 2,5-3 сәғәттә бешә.

✓ *Байыштар республикабыҙ ауылдары араһында барған төрлө ярыштарҙа ҡатнаша. Ҡышҡы ҡаласыҡтарын да улар конкурсҡа ҡуйған һәм еңеү яулағанда, биреләсәк аҡсаға ауыл урамдарына яҡтылыҡ үткәрергә ине, тип хыялланалар.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ИР-ЕГЕТТӘРЕБЕҘ...

## шундай көскә эйә!

**"Мин ауылым һәм ауылдаштарым хаҡында маҡтап һәм һоҡланып һөйләргә теләйем. Уларҙың шундай сәм һәм гәм менән лайыҡлы йәшәргә, эскелектән ҡотолорға, йәш быуынды матур тәрбиәләп үҫтерергә ынтылыуын күрһәткем килә", - тине ауылында башҡарылған күп кенә мәртәбәле эштәр хаҡында фотоһүрәтләмәләр алып килгән Азат Хамматов.**

Ауылдарҙа һуңғы йылдарҙа халыҡ ыңғай яҡҡа әүҙемләшә. Һәр ваҡыт хөкүмәттән көтөп, хужаларҙы әрләп, сәйәсәтте ғәйепләп, бахыр булып, хәйерселеккә тәкәлеп киткәйне бит тыуған бишектәребеҙ. Бигерәк тә эскелек сәскә атҡайны. Әммә бындай көн беҙҙең булмыш та, йәшәү рәүеше лә, күңелебеҙ теләгән яҙмыш та түгел. Тап быны ошоно аңлағанға һәм тойғанға ла төшөнкөлөккә бирелгәндер күптәр. Бәхеткә күрә, бәлки, тәҡдир ҡушыуы буйынсалыр, халыҡты был моңһоҙлоҡтан уятып ебәрер хәл-ваҡиғалар булып тора. Күптән түгелге "Темәс ваҡиғаһы"н да ир-егеттәребеҙҙе сәмләндереп, ҡуҙғытып ебәргән бер этәргес көс тип ҡабул итергә була. Шул ваҡиғанан һуң Баймаҡтың, башҡа күп районларҙың ир-егеттәре йыйылып, милләт алдына килеп баҫҡан ҡаршылыҡтарҙы ашатлауҙың ысулдарын ҡарай, барлай, кәңәшләшә башланы. Ауыл-районларҙың ғына түгел, тотош республика уҙамандары ҡалҡып баҫты. Ир-егеттәр ҡорҙары тупланды. Улар бергәләшеп эскелеккә, аҙғынлыҡҡа, эшһеҙлеккә ҡаршы көрәш асты.

Баймаҡ районының Байыш ауылындағы ошо тәжрибә тураһында һөйләне беҙгә был юлы редакцияға килгән Азат Хамматов. Был ауылда ла ирҙәр иң тәүге эштәрҙе ябайҙан, эргә-тирәнән генә башлай. Өмәгә сыға улар. Һәм ысынлап мөғжизә ярала. Быгаса яҡшылап аралашмаған да ауылдаштар дөйөм, берҙәм хеҙмәттә һөйләшә, бер-беренә асыла төшә. Беренсе өмәлә кәртә арттарынан ғына ҡарап торғандар ҙа, иҫереп сығып буталанып йөрөгәндәр ҙә, икенсе өмәләрҙә иң беренселәрҙән йөрөй. "Халыҡты әрләргә, хурларға ярамай, - ти Азат, - улар бит ағайҙар, уҙамандар. Уларҙы, киреһенсә, күтәрмәләргә, ошонда, ошо йәшәгән урындарында кәрәклектәрен, мөһимлектәрен күрһәтергә кәрәк. Һәр икенсеһе һөнәрле, һәр икенсеһенең ҡулы оҫта ауылдаштарҙың, бары бер аҙ юғалып ҡына ҡалғандар. Беҙ бер-беребеҙгә тап ошо ҡырҡыу мәлдә ярҙам итергә тейешбеҙ..."

Байышта ир-егеттәр тик үҙ көстәре менән генә егерме биш йыл ремонт күрмәгән клубты сынъяһау итеп ҡуйғандар. Интернет селтәрҙәрендәге ауылдаштар чатына ауылдың ситтә эшләгән һәм йәшәгәндәре лә ҡушылып, кемдәрҙер аҡса ебәреп, кемдәрҙер материалдар биреп, кемдәрҙер ҡул көсө менән мәҙәниәт йортон Яңы йыл байрамына яңыртып ултыртҡандар. Әле ауыл балалары өсөн "Ҡышҡы ҡала" төҙөп яталар. Шыршыны ла урмандан ҡырҡып ҡына килтермәгәндәр. Оҫталар уның каркасын тимерҙән иретеп йәбештереп, бейек итеп ҡорған. Ҡарҙы шәхси тракторҙары менән ҡырҙан барып йыйып алғандар. Шыуыу өсөн тауҙы ла биш метрлыҡ бейеклеккә күтәргәндәр. Егеттәр сәмләнеп, "Булғас-булғас, Сибайҙыҡынан да текәрәк булһын", тигәндәр. Катокты ла бернисә көн һыу һибеп туңдырып, ситтәрен күлдән ҡырҡып сығарылған боҙ кәртәләр менән көпләп сыҡҡандар. "Ауылса" ғына булмаһын, ҡаланыҡынан да шәп булһын, тип тырышҡан байыштар.

Ир-егеттәр эскелеккә ҡаршы көрәшеүгә лә тотош бер ысул төҙөп алғандар. Мәҫәлән, спиртлы эсемлектәр менән сауҙа итеүселәрҙең был бысраҡ кәсепкә ниндәй сәбәптән тотоноуын асыҡлайҙар баштa. Унан яйлап һөйләшеү, аңлашыу алымдары аша тәрбиәүи сараларға тотоналар. Кеше насар ҙа түгел, боҙоҡ та түгел, уны аңһыҙлыҡ һәм нужа шулай яман юлдарға этәрә, тигән фекергә улар. Бөгөн эскендәрҙе берәүҙәр шефлыҡҡа алған, икенселәр ярҙам итә, өсөнсөләр уларҙы ҡыҙыҡлыраҡ шөғөлдәргә әйҙәргә итә.

Байышта ауыл хакимиәте менән мәсет тә әүҙем. Мәсет ҡайһы бер ауылдарҙағылай "Беҙҙе шәриғәт тыя" тип кенә ултырмай, бар эштәрҙең дә уртаһында ҡайнай, башлап йөрөй. Һәр йыйындан һуң ир-егеттәр мәсеткә инеп, намаҙ ҡыла. Хатта быгаса Аллаһ йортоноң тупһаһын ашатламағандар ҙа башҡаларға ҡушылып килеп ингән. Был хәтлем ир-уҙамандарҙы ауыл мәсете үҙ ғүмерендә әлегәсә күрмәгән дә булғандыр. Әле Яңы йыл байрамына балалар өсөн үткәрелгән сараларҙы ла мәсет ойоштора икән. Улар өсөн был күтәрелеш осоронда "байрам мәғәнәһе" түгел, ә йәш быуындың насар ғәҙәттәрһеҙ үйнап-көлөргә өйрәнеп, һөйөү-иғтибарға сорналып, рухлы һәм сәләмәт булып үҫеп етеүе мөһимерәк.

Байыштар республикабыҙ ауылдары араһында барған төрлө ярыштарҙа ҡатнаша. Ҡышҡы ҡаласыҡтарын да улар конкурсҡа ҡуйған һәм уңыш йылмайып, еңеү яулағанда, призға биреләсәк аҡсаға ауыл урамдарына яҡтылыҡ үткәрергә ине, тип хыялланалар. Беҙ уларға уңыштар ғына теләп ҡалабыҙ.

Был миҫалда республикабыҙҙың бер ауылы ғына һүрәтләнә. Әгәр һәр ауыл шундай йәшәү рәүешенә күсһә, нисек булыр ине икән тип уйлап ҡарағыҙ әле. Бер өс-биш йылда ауылдарҙа эскән кеше лә ҡалмаҫ ине. Эсмәгән халыҡта маҡсат һәм сәм уяныр ҙа, ул үҙен ерендә лә, ғаиләһендә лә хужа итеп тойор ине. Ул ҡыйыуыраҡ, ғорурыраҡ, азатыраҡ булыр ине. Тағы ла әлә күпме "булыр"ҙар булыр ине. Быныа бит, ниндәй көскә эйә беҙҙең ир-егеттәр! Ә беҙ уларҙың көсөн баһалай беләйек.

**Миләүшә САЙҒАФАРОВА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Шат күңеллелек сирҙән йолоп алыр

Һеҙгә мотлаҡ яһалма рәүештә сәләмәтлек һәм йәшлек образын булдырырға кәрәк. Ни өсөн? Сөнки үҙебеҙҙе яфаланыусы, сирҙәрҙән интегеүсе тип тоябыҙ икән, шат күңеллелекте ҡайҙан алырға тейешбеҙ? Тимәк, уны үҙебеҙгә булдырырға кәрәк. Тән ошо бәхет торошон тоймағас, моғайын, бәхетле сәләмәт кеше ролен тыуҙырыу һәм уйнау ауырҙыр? Яңылышаһығыҙ, был бик еңел. "Минең сирем ауыр, мин бәхетһеҙ, миндә шатлыҡ ҡайғыһы юҡ. Мине дауалау һәм мөғжизәле дарыу тураһында һөйләү урынына юҡ-бар менән башымды ҡатыраһығыҙ", - тиергә мөмкинһегеҙ. Тап ошондай фекерләү күп сирләләрҙең төп хатаһы булып тора. Шат күңеллелек, шат күңеллелек һәм тағы бер тапҡыр шат күңеллелек һеҙҙе бәхетһеҙлектән һәм сирҙәрҙән һөйрәп сығара ла инде.

Америка ғалимдарының тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, яман шеш менән сирләүселәрҙең 30 проценты һауыға. Уларҙың психологияһын өйрәнә башлағас, ҡыҙыҡлы һығымталар яһайҙар: вафат булыусылар ҙа сир тырнағынан ҡотолорға теләй, әммә улар быны асыу менән башҡара һәм һөҙөмтәлә еңелә.

Сәбәп нимәлә? Улар бит йәшәргә тырыша, ҡул ҡаушырып ултырмай, барлыҡ мөмкинлектәрҙе ҡуллана. Ҡәһәрле яҙмыш? Баҡтиһаң, сирҙе еңеүселәрҙе уртаҡ бер сифат - шат күңеллелек берләштерә. Улар ҡасан үлем килер икән тип көтөп ултырмай, улар ҙа йәшәү өсөн көрәшә, әммә асыулы ныҡышмалылыҡ менән түгел. Улар бары тик ҡалған ғына ғүмерҙәрендә тормошҡа шатланып йәшәргә тырыша һәм өсөн шатлыҡты кисерә лә инде. Улар һәр минутына, ғөмүмән, тере булыуҙарына, яҙмыш уларға шатланыу өсөн биргән мөмкинлеккә ҡыуана.

Һөҙөмтәлә йәшәргә тырышҡан һәм сәләмәтлек өсөн көрәшкән сирлеләр вафат була, ә аҙ ғына шатлыҡҡа ла ҡәнәғәт булып, һәр йәшәгән минутын бүләк кеүек рәхмәтле булып ҡабул итеүселәр һауыға. Үлем уларҙың күҙҙәрендәге осҡондо, шат көлөүҙәрен ишетеп, ҡурҡып сигенә.

Беҙ улар менән тулыһынса килешәбеҙ. Практикабыҙҙа көслө рухи сифаттарға эйә булыусылар күп осраны. Әммә... Улар еңелеү артынан еңелеү кисерҙе. Беҙҙеңсә, күрә алмауcанлыҡ һәм асыу менән күп нәмәгә өлгәшергә мөмкин, әммә сәләмәтлеккә түгел. Сәләмәтлек уларға буйһонмай. Бында көрсөк һәм яҙа.

Юҡҡа ғына боронғо көнсығыш аҡыл эйәләре: "Кешене дауаларҙан алда белеш, уға, хаталы аҙымдары өсөн, Аллаһы Тәғәлә яҙа бирмәгәнме? Әгәр ул хаҡлы түгел тип һанайһың икән, уның эшен тәҙәтергә тырыш".

Шулай итеп, беҙгә шатлыҡ торошон булдырырға кәрәк. Ошо мәлдәге кисерештәрегеҙҙе, буй-һыныгыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Иҫләгеҙ. Нисек атлап йөрөйһегеҙ, әллә аяғығыҙ ергә теймәй осаһығыҙмы? Күҙҙәрегеҙ яна, уларҙан бәхет осҡондары сәселеп, башҡаларға йоға.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



**31 ДЕКАБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 "Новогодний календарь". [0+]
7.00 "Первый скорый". [16+]
8.30 "Большая разница". Новогодний выпуск. [16+]
10.00 Новости.
10.10 Премьера. "Главный новогодний концерт". [16+]
12.00 Х/ф "Золушка". [0+]
13.25 Х/ф "Девчата". [0+]
15.00 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
16.35 Х/ф "Джентльмены удачи". [12+]
18.00 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
19.50 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [0+]
23.00 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина. [0+]
0.00 Новогодняя ночь на Первом. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.45 Х/ф "Школа для толстушек". [12+]
9.15 "Лучшие песни". Праздничный концерт.
11.15 Х/ф "Карнавальная ночь".
12.40 Х/ф "Москва слезам не верит".
14.00 Вести.
14.20 Х/ф "Москва слезам не верит".
15.50 "Короли смеха". [16+]
17.40 Х/ф "Золушка".
19.30 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика".
20.50 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию".
22.25 "Новогодний парад звёзд".
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
0.00 Новогодний Голубой огонёк-2019.

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**8.00 М/ф "Нико: Маленький Братишка". [0+]**
**9.30 Х/ф "Дедушка в подарок". [16+]**
**11.00 Новогодний звон "Сулпылар". [0+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Республиканская новогодняя елка. [0+]**
**15.45 "Зимние мелодии". [12+]**
**16.15 Бизнес-проба. [12+]**
**16.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**17.15 Концерт Р. Юльякшина. [12+]**
**19.30 Бирешмә, Ҡыш бабай! [6+]**
**20.30 Итоги года (на рус. яз.).**
**21.30 Республика Live. [12+]**
**22.00 Голубой огонек на БСТ. [6+]**
**23.50 Новогоднее поздравление ВРИО Главы Республики Башкортостан Радия Хабирова.**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина. [0+]**
**0.00 "Башкорт йыры-2018". [12+]**
**3.00 Х/ф "Дедушка в подарок". [16+]**
**4.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.00 Итоги года (на рус. яз.).**

**1 ЯНВАРЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новый год на Первом. [16+]
8.05 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [0+]
10.00 Новости.
10.10 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [0+]
11.20 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
13.15 Х/ф "Джентльмены удачи". [12+]
14.40 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
16.25 "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
19.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал. [16+]
22.00 Премьера. "Голос. Перезагрузка". Финал. [16+]
0.00 "Первый дома".
1.25 Х/ф "Ночь в музее-2". [12+]
3.05 Х/ф "Джентльмены предпочитают блондинок". [16+]
4.35 "На самом деле". [16+]
5.25 Контрольная закупка. [6+]

**РОССИЯ 1**

5.45 Х/ф "Доярка из Хацапетовки". [12+]
9.05 Х/ф "Золушка".
11.05 Х/ф "Карнавальная ночь".
12.30 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика".
14.00 Вести.
14.20 "Песня года".
16.25 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию".
18.00 "Юмор года". [16+]
20.00 Вести.
20.30 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
22.30 Х/ф "СуперБобровы. Народные мстители". [12+]
0.10 Х/ф "СуперБобровы". [12+]
1.55 "Юмор года". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**8.00 М/ф "Приключения Пикси". [0+]**
**9.30 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Умырзая". [0+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 "Весело живем". [12+]**
**12.45 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Башкорт йыры-2018". [12+]**
**18.00 Яңы йыл-караоке. [12+]**
**20.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**23.00 Х/ф "Только раз". [12+]**
**1.00 Яңы йыл-караоке. [12+]**
**2.45 "Теге өсәү!" [12+]**
**3.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.30 Х/ф "Только раз". [12+]**

**2 ЯНВАРЯ**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новости.
6.10 "Угадай мелодию". [12+]
7.00 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
8.25 М/ф "Ледниковый период: Континентальный дрейф". [0+]
10.00 Новости.
10.10 М/ф "Ледниковый период: Столкновение неизбежно". [0+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Х/ф "Морозко". [0+]
13.45 Д/ф Премьера. "Голос". На самой высокой ноте". [12+]
14.45 "Голос. Перезагрузка". Финал. [16+]
16.55 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.00 Х/ф "Аватар". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Старые песни. Постскриптум". [16+]
23.20 Премьера. "Дискотека 80-х". [16+]
1.45 Х/ф "Ночь в музее: Секрет гробницы". [12+]
3.30 Х/ф "Зуд седьмого года". [0+]
5.15 Контрольная закупка. [6+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
8.45 Т/с "Голубка". [12+]
11.00 Вести.
11.20 "Песня года".
14.35 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
17.00 Вести.
17.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Юмор года". [16+]
20.00 Вести.
20.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Родина". [16+]
0.15 Т/с "Ликвидация". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**8.00 М/ф "Астерикс: Земля Богов". [12+]**
**9.30 Х/ф "Невероятные приключения итальянцев в России". [12+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Сладкая сказка". [0+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 "Весело живем". [12+]**
**12.45 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Х/ф "Ургала". [12+]**
**16.00 "Теге өсәнәү!" [12+]**
**16.45 Х/ф "Прекрасный принц и фея Люпина". [12+]**
**17.45 УМПО - стратегия совершенства. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 "Юлдаш-хит-2018". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Х/ф "Продается дача". [12+]**
**0.00 "Йәшлек-шоу-2018". [12+]**
**2.45 Концерт фольклорного ансамбля песни и танца "Мирас". [12+]**
**5.00 Х/ф "Продается дача". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

**3 ЯНВАРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новости.
6.10 "Угадай мелодию". [12+]
6.55 Х/ф "Морозко". [0+]
8.20 М/ф "Ледниковый период: Глобальное потепление". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Видели видео?" [6+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Т/с "Старушки в бегах". [12+]
14.15 Д/ф "Муслим Магомаев. Нет солнца без тебя". [12+]
15.10 "ДОстояние РЕспублики: Муслим Магомаев". [0+]
17.00 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Д/с Премьера. "Самые, самые, самые..." Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
0.50 Х/ф "Мегрэ и мертвец". [16+]
2.35 Х/ф "Давай сделаем это легально". [16+]
4.00 Д/ф "Муслим Магомаев. Нет солнца без тебя". [12+]
4.55 "Наедине со всеми". [16+]
5.35 Контрольная закупка. [6+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
8.45 Т/с "Голубка". [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Новая волна". Лучшее.
13.20 Т/с "Уйти, чтобы вернуться". [12+]
17.00 Вести.
17.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Мастер смеха". Праздничный выпуск. [16+]
20.00 Вести.
20.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Родина". [16+]
23.45 Т/с "Ликвидация". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Астробой". [12+]**
**9.30 Х/ф "Джентльмены удачи". [0+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Волшебный хвостик". [0+]**
**12.00 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**15.45 Моя Республика. [12+]**
**16.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**16.45 Х/ф "Принцесса Мален". [12+]**
**17.45 "Зимние мелодии". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Без Баймаҡтар бит әле". Концерт. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.30 Х/ф "Именины". [12+]**
**0.15 Мисс интернешнл-2018. [12+]**
**1.45 Юбилейный концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**3.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.00 "Весело живем". [12+]**
**5.15 Х/ф "Именины". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

**4 ЯНВАРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новости.
6.10 "Угадай мелодию". [12+]
7.00 Х/ф "Золотые рога". [0+]
8.20 Х/ф "Старик Хоттабыч". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Видели видео?" [6+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Т/с "Старушки в бегах". [12+]
14.15 Д/ф "Вячеслав Добрынин. "Мир не прост, совсем не прост..." [16+]
15.10 "ДОстояние РЕспублики: Вячеслав Добрынин". [0+]
17.00 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Д/с Премьера. "Самые, самые, самые..." Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
23.55 Х/ф "Бриджит Джонс-3". [18+]
2.10 Х/ф "Мы не женаты". [12+]
3.50 Х/ф "Старик Хоттабыч". [0+]
5.20 Контрольная закупка. [6+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
8.45 Т/с "Голубка". [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Новая волна". Лучшее.
13.20 Т/с "Уйти, чтобы вернуться". [12+]
17.00 Вести.
17.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Мастер смеха". Праздничный выпуск. [16+]
20.00 Вести.
20.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Родина". [16+]
23.50 Т/с "Ликвидация". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Богатырша". [6+]**
**9.30 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [12+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Йома". [0+]**
**12.00 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**16.45 Концерт Загира Зайнетдинова. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Концерт группы "Бүреләр". [12+]**
**23.00 Х/ф "Самые счастливые". [16+]**
**0.45 Концерт государственного академического ансамбля народного танца им. Ф. Гаскарова РБ. [12+]**
**2.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**3.00 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 Х/ф "Самые счастливые". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

**5 ЯНВАРЯ**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новости.
6.10 "Угадай мелодию". [12+]
7.00 Х/ф "Огонь, вода и... медные трубы". [0+]
8.30 Х/ф "Особенности национальной охоты в зимний период". [16+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Видели видео?" [6+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Т/с "Старушки в бегах". [12+]
14.15 Д/ф "Лев Лещенко. "Ты помнишь, плыли две звезды..." [16+]
15.10 "ДОстояние РЕспублики: Лев Лещенко". [0+]
17.00 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Д/с Премьера. "Самые, самые, самые..." Проект Владимира Познера и Ивана Урганта. [16+]
23.55 Х/ф "Виктор". [16+]
1.45 Х/ф "Любовное гнездышко". [12+]
3.25 Х/ф "Особенности национальной охоты в зимний период". [16+]
4.45 Д/ф "Лев Лещенко. "Ты помнишь, плыли две звезды..." [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.45 Т/с "Голубка". [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Новая волна". Лучшее.
13.20 Т/с "Уйти, чтобы вернуться". [12+]
17.00 Вести.
17.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.40 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести.
20.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Родина". [16+]
0.00 Т/с "Ликвидация". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Индюки: Назад в будущее". [0+]**
**9.30 Х/ф "Кавказская пленница". [12+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Камыр-батыр". [0+]**
**12.00 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 "Йөрәк һүҙе-2018". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Йөрәк һүҙе-2018". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Моя вершина. [12+]**
**22.30 Итоги года (на баш. яз.).**
**23.30 Х/ф "Инвестиции в любовь". [16+]**
**1.15 Итоги года (на баш. яз.).**
**2.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**3.00 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**4.45 Х/ф "Инвестиции в любовь". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

**6 ЯНВАРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новости.
6.10 Новогодний Ералаш. [0+]
6.35 Х/ф "Финист-Ясный сокол". [0+]
8.00 Х/ф "Француз". [12+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Видели видео?" [6+]
11.10 "Наедине со всеми". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Т/с "Старушки в бегах". [12+]
14.15 Д/ф "Александр Зацепин. "Мне уже не страшно..." [12+]
15.10 "ДОстояние РЕспублики: Александр Зацепин". [0+]
17.00 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Д/ф "Рождество в России. Традиции праздника". [0+]
23.55 Д/ф "Оптина пустынь". [0+]
1.00 Рождество Христово. Прямая трансляция из Храма Христа Спасителя.
3.00 Д/ф "Путь Христа". [0+]
4.50 Д/ф "Николай Чудотворец". [0+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки-3". [12+]
8.45 Т/с "Голубка". [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Новая волна". Лучшее.
13.20 Т/с "Уйти, чтобы вернуться". [12+]
17.00 "Сочельник с Борисом Корчевниковым".
18.20 Х/ф "Несколько шагов до любви". [12+]
20.00 Вести.
20.30 Х/ф "Несколько шагов до любви". [12+]
22.55 Х/ф "Птица в клетке". [12+]
1.00 Рождество Христово. Прямая трансляция торжественного Рождественского богослужения.
3.00 Х/ф "Птица в клетке". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Зимние мелодии". [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Монстр в Париже". [0+]**
**9.30 Х/ф "Девчата". [0+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Карийондоҙ". [0+]**
**12.00 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 "Теге өсәү!" [12+]**
**15.00 Д/ф "Иисус Христос и его церковь". [0+]**
**15.30 Дорога к храму. [0+]**
**16.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск).**
**19.15 Концерт Ришата Тухватуллина. [12+]**
**21.30 Итоги года (на рус. яз.).**
**22.40 Рождественское богослужение из Кафедрального собора Рождества Пресвятой Богородицы г. Уфа.**
**2.00 Х/ф "Светлое рождество". [16+]**
**4.00 Спектакль "Снегурочка". [12+]**
**6.00 Итоги года (на рус. яз.).**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Азамат Төхвәтуллин, **Баймаҡ районы** Икенсе Эткол ауылынан Рәжәп Азаматов, **Мәләүез ҡалаһынан** Руфия Мөхәмәтова, **Өфө ҡалаһынан** Раушания Кәбирова, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Мәрзиә Юламанова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас йөрәктән ҡотлайбыҙ! Һәр көн шатлыҡтары менән килһен, тормош ваҡлыҡтарынан өҫтөн булырлыҡ рух ныҡлығы, ныҡлы сәләмәтлек теләйбеҙ һеҙгә һәм артабан да йылдар менән һыналған дуҫлығыбыҙға тоғро ҡалырһығыҙ, тип ышанабыҙ. Тыуған көнөгөҙ ҡотло булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

✓ **2017 йылдың 1 ғинуарынан 2018 йылдың 31 декабренәсә тәүге балаһы тыуған ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған субсидиялар алыуға ғаризалар ҡабул итеү 2019 йылдың 1 июленә тиклем дауам итә.**



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ВӘКИЛДӘРЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**50-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әлибаев. Мәҙәк. Таған. Алло. Гелиос. Хатико. Елей. Тас. Сатраш. Бас. Хажин. Сермән. Литр. Узи. Ямантау. Наза. Ус. Карл. Арго. Даян. Арҡа.

**Вертикаль буйынса:** Хамматов. Алтынбаев. Сәләм. Тойота. Аркада. Хат. Исмәғилев. Аулана. Набат. Улус. Конгресс. Ситдиҡова. Тирлән. Инйәр. Сүкеш. Нева.

**Сканворд һорауына яуап:**

| I | II | III | IV |
|---|---|---|---|
| | | | |

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БАЛАҢ БАҠСАЛАМЫ?

**Башҡортостанда 2019 йылдың 1 ғинуарынан балалар баҡсаһы өсөн түләү үҙгәрә, ләкин ул тиклем артмай, тип белдерҙеләр республиканың Мәғариф министрлығында.** Йәғни яңы йылда республикала мәктәпкәсә учреждениеларҙа балаларҙы тәрбиәләгән өсөн түләүҙең уртаса күләме 1617,2 һум була. Түләүҙе кәметеүгә компенсация түләүҙәре күләме ошо сумманан сығып иҫәпләнә. Ата-әсәләр балалар баҡсаһына түләү өсөн компенсацияға хоҡуҡлы. Балалар баҡсаһына йөрөгән бер балаға - түләнгән сумманан 20 процент (323,44 һум), ике балаға - 50 процент (808,6 һум), өс һәм унан да күберәк икән - 70 процент (1132 һум),тип асыҡлыҡ индерҙеләр төбәктең мәғариф ведомствоһында. Муниципалитеттарҙа балалар баҡсаһы өсөн ата-әсә түләүе күләме төрлөсә булыуы мөмкин, сөнки был уларҙың һәр береһендә айырым билдәләнә, ләкин уртаса күләме 1617,2 һум тәшкил итергә тейеш.

## АУЫЛДА ЭШЛӘҺӘҢ...

**Ауыл хужалығы өлкәһендә 30 йылдан ашыу эшләгән пенсионерҙар яңы йылдан пенсияға билдәләнгән түләүҙән 25 процент күләмендә өҫтәмә ала, тип хәбәр итә Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы.** 2019 йылда билдәләнгән түләү күләме - 5334,19 һум. Өҫтәмәнең күләме 1333,55 һум тәшкил итә. Был хаҡта "Страховка пенсиялары тураһында"ғы федераль закондың 17-се статьяһында әйтелгән. Өҫтәмә аҡса тәғәйенләү өсөн Рәсәй Хөкүмәте производстволар һәм һөнәрҙәр исемлеген, өҫтәмә алырға хоҡуҡ биргән эшләү осорон иҫәпләп сығарыу ҡағиҙәләрен раҫлаған.

## АЛЫП ӨЛГӨР

**2017 йылдың 1 ғинуарынан 2018 йылдың 31 декабренәсә тәүге балаһы тыуған ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған субсидиялар алыуға ғаризалар ҡабул итеү 2019 йылдың 1 июленә тиклем дауам итә.** "7,8 мендән ашыу ғаилә ошондай ғариза яҙған да инде. 2000-дән күберәк таныҡлыҡ бирелгән, бөгөнгә уларҙың барыһы ла тиерлек түләнгән. 500 миллион һум самаһы үҙләштерелгән", - тип аңлатма бирҙе "Башинформ" агентлығына Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Егор Родин. Уның билдәләүенсә, 2017 йылда ҡабул ителгән ҡарарҙың шарттары буйынса, ғаиләләр әлеге хоҡуҡтан 2019 йылдың 1 июленә тиклем файҙалана ала. Шуға ярашлы, ошо датаға ҡәҙәр программала ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә. Түләүҙәр 2020 йылдың 1 майына тиклем дауам итә.

"2017 йылдың 1 ғинуарынан 2018 йылдың 31 декабренә ҡәҙәр тыуған тәүге балаға бер тапҡыр бирелә торған субсидия алыу өсөн тәү сиратта теркәлгән урын буйынса муниципаль берәмек хакимиәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Был ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар сифатында торорға тейеш. Һуңынан бөтә тейешле документтар менән йә күп функциялы үҙәк филиалына, йәиһә Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетына мөрәжәғәт итеү зарур", - тип өҫтәне Егор Родин.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Декабрь-ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (24) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 1 (25) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 2 (26) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 3 (27) кесе йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 4 (28) йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 5 (29) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 6 (30) йәкшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**29 декабрь "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+

**30 декабрь "Алтын асҡыс"** (А. Толстой), мажара. 12.00, 14.00 6+

**2 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 12.00 6+

**3 ғинуар "Алтын асҡыс"** (А. Толстой), мажара. 11.00, 13.00 6+

**4 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 11.00, 13.00 6+

**4 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**29 декабрь "Алые паруса"** (Грин буйынса А. Решетникова), романтик фантазия. 12.00, 18.00 12+

**29 декабрь "Сундучок Деда мороза"** Әкиәт. 10.30, 12.30, 14.30 0+

**30 декабрь "Сундучок Деда мороза"** Әкиәте. 10.00, 12.30, 15.00 0+

**2, 3 ғинуар "Сундучок Деда мороза"** Әкиәт. 12.00 0+

**3 ғинуар "Сундучок Деда мороза"** Әкиәт. 14.00, 16.30 0+

**4 ғинуар "Сундучок Деда мороза"** Әкиәт. 11.00 0+

**4 ғинуар "Алые паруса"** (Грин буйынса А. Решетникова), романтик фантазия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**30 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 11.00, 14.00, 17.00 0+

**31 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 11.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29-30 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы" ғаилә өсөн байрам.** 11.00, 13.00, 15.00 6+

✔ *Ханды Хоҙайораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр; байҙы Хоҙай ораһы булһа, дәүләтенә маһайыр.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠЫШ БАБАЙҒА ЫШАНАЙЫҠ!



**Яңы йыл байрамының төп геройы Ҡыш бабай барыһының да - балаларҙың ғына түгел, өлкәндәрҙең дә яратҡан геройы. Ә актерҙар үҙҙәре яратама икән донъялағы был йомарт һәм изге күңелле тылсымсы ролен? М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Ҡыш бабай Хәким МОРТАЗИН менән ошо турала әңгәмәләшәбеҙ.**

**Ҡыш бабай булып эшләүе ауырмы?**

-Тәүге тапҡыр Ҡыш бабай булып 1998 йылда сәхнәгә сыҡтым. Ҡаушағанмындыр ул мәлдә, моғайын. Сөнки Ҡыш бабай - ул роль ятлап ҡына уйнап сыға торған образ түгел. Унда күңел йылыһы, ихласлыҡ һалырға кәрәк. Дөрөҫөрәге, балалар ышанһын өсөн үҙеңдең Мортазин түгел, Ҡыш бабай икәненә, Ҡыш бабайҙың ысынлап та барлығына ышанырға тейешһең. Шул саҡта ғына барыһы ла ихлас килеп сыға. Бала бит һинән мөғжизә көтә, быны ла аҡларға тейешһең. Күстәнәсте лә былай ғына тотороп китергә түгел, ә баланың күңелен үҫтерерлек итеп тапшырырға кәрәк. Быйыл, шөкөр, 20 йыл булып киткән икән был ролемә.

**Бөгөнгө балалар Ҡыш бабайға ышанамы?**

- Миненсә, элек балалар нығыраҡ ышана кеүек ине. Тәбиғәттән һалынған балаларса ихласлыҡ бар ине уларҙа. Хәҙер белергә теләгән нәмәһенә яуапты интернеттан табалар. Шуға ла 6-7-се класс уҡыусылары хәҙер Яңы йыл һәм уның барлыҡ атрибуттарына тамаша ғына итеп ҡарай. Бәләкәстәр ышана. Ҡыш бабай бар нәмәне белеп тора, ысынлап та килә икән, тип уйлайҙар. Йәш ярымлыҡ сабыйҙар эргәләренә лә ебәрмәй, ҡурҡалар. Был тәбиғи, улар донъяны саҡ-саҡ өйрәнә, уны менән танышa. Ҡайны саҡта өйҙәренә лә саҡыра ата-әсәләр мине. Фотоға төшөрөргә булһаҡ, яҡын да килмәйҙәр. Шул саҡта үҙҙәре баланы күтәрәләр ҙә, мин иҙләп кенә арттан килеп торам.

Бер ваҡиғаны һаман онота алмайым. 2000 йылдарҙың башында Президент шыршылары Дәүләт циркы бинаһында үтә торғайны. Ҡыш бабайҙың костюмы мәрйен, ялтырауыҡтар менән тегелгән, прожекторҙар утына әкиәттәге кеүек балҡып тора. Башта сығаһың да, арена буйлап, балаларҙы сәләмләп үтәһең. Шул ыңғайы кемеһелер ҡулдан тота, үҙем дә кемдәргәлер ҡул биреп үтәм. Шул саҡ күҙемдең сите менән генә бер малайҙа иғтибар итәм, ҡолаҡ осо менән генә: "Ҡыш бабай минең менән иҫәнләшмәне", - тигәнен ишетәм. 3 йәш тирәһе, тауышы ҡалтыраған, ҙур асылған күҙҙәренән йөҙрөк ҙурлыҡ йәштәр тамам-тамам тип кенә тора. Кире боролдом, башынан һыйпап, улым, ғәфү ит инде, Ҡыш бабай ҡарт бит, күрмәй киткәнмен, тием. "Ҙур үҫ, йәме, бәхетле бул", - тип өҫтәйем. Шунан һуң ғына был тыныс һулап ҡуйҙы. Ошондай мәлдәре өсөн дә яратам был образды. Ҡайны ваҡытта үҙең дә ошондай эскерһеҙлек алдында юғалып ҡалаһың, үҙең дә тылсымға ышана башлайһың. Бер балаға булһа ла ышаныс бүләк итеүҙән күңеле үҫә былдай саҡта актерҙың. Унан һуң актер өсөн дә, бала өсөн дә тәрбиәүи мәле бар былдай аралашыуҙарҙың.

**Үҙегеҙҙең балаларығыҙ өсөн Ҡыш бабайҙы уйнағанығыҙ булдымы?**

- Улдарым Динислам, Ихсан һәм ҡыҙым Аҡйондоҙҙо Ҡыш бабай булып ҡотлағаным юҡ. Улар бала саҡтарында Ҡыш бабайға нык ышана ине. Бүләк әҙерләйбеҙ ҙә, байрам алдынан әсәләре менән йоҡо бүлмәһенә саҡырып индерәбеҙ. "Хәҙер Ҡыш бабай килергә тейеш, ҡарап тороғоҙ", тием. Үҙем иплләп кенә сығып, шыршы төбөнә бүләктәр һалып инәм. Бүләк тапҡас, нисек шатлана, ҡысҡыра әле улар! Форточканы асам да, Ҡыш бабайға рәхмәт әйтегеҙ, бөлки, ишетер, тием. "Рәхмәт!" тип ҡысҡыралар ғына. Ихсандың әле саҡ һөйләшә башлаған сағы ине, Президент шыршыһына алып килде Айгөл. Мин унда Ҡыш бабай булдым. Фотоға төштөк. "Әсәй, нишләп Ҡыш бабайҙың эсенән атайҙың тауышы сыға ул?" - тип һораған аҙаҡ әсәһенән. Ҡайны саҡта костюмды ҙур сумкаға һалып, өйгә алып ҡайтам да, балалар йоҡлағанда ғына киптереп, кире һалып алам. Шуны Аҡйондоҙ күреп ҡалған. "Һин Ҡыш бабаймы ни?" - ти миңә. "Юҡ", - тием. "Был Ҡыш бабайҙың кейеме лә инде?" - ти ҡыҙым. "Эйе, Ҡыш бабайҙыҡы. Ул бит өлгөрмәй, шуға мине ярҙамсы итеп алды", - тип әйттем. Шуға байтаҡ аптырап йөрөнө ҡыҙым.

**Яңы йыл менән бәйле ғаилә йолаһы бармы Мортазиндарҙа?**

- Бергә булырға тырышабыҙ. Иҫке йылды оҙатабыҙ ҙа, Яңы йылды ишек асып ҡаршы алабыҙ. Ике йыл рәттән эшләргә тура килде, актерҙар өсөн ғәҙәти хәл был. Быйыл Аҡйондоҙ: "Атай, быйыл бер ҡайҙа ла йөрөмә, бергә ҡаршылайыҡ яңы йылды", тип алдан әйтеп ҡуйҙы.

Уңайҙан файҙаланып, барлыҡ гәзит уҡыусыларға бәхеттәр теләйем. Яңы йыл яңы шатлыҡтары менән килһен. Һәм бер ҡасан да мөғжизәгә ышаныуҙан туҡтамағыҙ, шул саҡта тормошоғоҙ мөғжизәләрҙән генә торор!

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

БАЙРАМ ТАБЫНЫНА

## ТАУЫҠ



Мейестә бешкән тауыҡ та өҫтәлгә йәм бирә. Лимондың ҡабығын ҡырғыстан ҡырырға, тимьян тәмләткесе менән ҡушырға. Лимондың үҙен тауыҡтың эсенә һалырға була, ул формаһын да тотасаҡ, тәм дә бирәсәк. Тауыҡтың түшендәге тиреһен иплләп кенә һыҙырып, уға бер аҙ ҡырылған лимон ҡабығы менән тимьянды һалырға. Тауыҡты һәйбәт итеп ҡоророрға, шул саҡта ҡыртышы тәмле булып бешәсәк. Аҡ май менән майларға, өҫтөнә шул уҡ тәмләткесте һибергә, борос та өҫтәргә. Тауыҡтың аҫтына эре итеп туралған картуф та һалһағыҙ, бер юлы гарниры ла әҙер булыр. 205 градус эҫелегендә сәғәттән ашыу бешерергә. Һәр 20-25 минут һайын аҡ май менән майлап торһағыҙ, тәмлерәк булыр. Шулай уҡ бешергәндә ағып сыҡҡан майҙы һибеп торһаң да була, эҫе май тауыҡтың тиреһен бешерә, шунлыҡтан, ул тағы ла яҡшыраҡ ҡыҙара.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТА БАЛАҺЫНДА...

## хата була

Ханды Хоҙай ораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр; байҙы Хоҙай ораһы булһа, дәүләтенә маһайыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Борон-боронда бер утрауҙа кешеләрҙең бар тойғолары йәшәгән, ти. Елбәҙәк менән Һағыш, Зирәклек менән Наҙанлыҡ, Ғорурлыҡ һәм Аҙғынлыҡ, Муллыҡ менән Ҡомһоҙлоҡ. Улар менән бергә Мөхәббәт тә йәшәгән. Бер заман утрау һыу аҫтына китә башлаған. Тойғолар тиҙ генә ҡараптарына ултырып, утрауҙан ҡасыу яғын ҡараған. Мөхәббәт һаман ниҙер көткән, барыһы өсөн дә күктәрҙән ярҙам һорап, ялбарған. Бына утрауҙан Мөхәббәт баҫып торған ҡалҡыулыҡ ҡына тороп ҡалған. Эргәнән Ҡомһоҙлоҡ менән Муллыҡтың ҙур, ҡупшы карабы йөҙә икән.**

**- Мине үҙегеҙ менән алығыҙсы, - тип үтенгән Мөхәббәт.**

**- Беҙҙең карап тулы алтын, көмөш, затлы әйберҙәр, һиңә урын юҡ шул, - тип яуаплағандар ҙа тегеләре, ары киткәндәр.**

**Ә һыу һуңғы ҡалҡыулыҡты ла күмеп етеп килә, ти. Бына ул Мөхәббәттең тубығынан бейегерәк булып күтәрелгән. Елкәндәрен бейек күтәргән Ғорурлыҡтың карабы үтеп бара, ти.**

**- Алсы мине үҙең менән, - тип ялбарған Мөхәббәт.**

**- Минең карапта барыһы ла ҡаты тәртипкә буйһона, мин был тәртипте боҙһам, үҙемдең булмышыма хыянат итәсәкмен, - тип яуаплаған Ғорурлыҡ, Мөхәббәт яғына башын да бормай.**

**Һыу Мөхәббәттең биленә тиклем еткән.**

**- Елбәҙәк, Елбәҙәк! - тип ҡысҡырған Мөхәббәт, күңелле көй яңғыраған, төрлө таҫмалар менән биҙәлгән карапҡа.**

**Елбәҙәк менән Аҙғынлыҡ күңелле итеп бейешәләр, ти, Мөхәббәттең батып барғанын күрһәләр ҙә, байрамдарын туҡтатырға теләмәгәндәр.**

**Һыу муйынға етеп килә икән Мөхәббәттең. Янынан хөрт кенә кәмәлә Һағыш йөҙөп бара, ти.**

**- Һағыш, алсы мине... - тип илай башлаған Мөхәббәт.**

**- Урын юҡ шул, - тип моңһоу ғына башын сайҡаған Һағыш.**

**Һуңғы тапҡыр зәңгәр күккә, ҡояшҡа бағайым, тип, Мөхәббәт ҡарашын өҫкә төбәгән. Шул саҡ уны кемдер ҡапыл һыуҙан тартып сығарған. Сал сәсле ҡарт үҙенең етеҙ карабында Мөхәббәтте барыһынан да алдараҡ Ергә алып барған. Мөхәббәт хатта унан исемен дә һорап өлгөрмәгән.**

**Бына бер ваҡыт Зирәклектең карабы күренгән.**

**- Зирәклек, әйтсе, ниндәй сал сәсле ҡарт мине ҡотҡарҙы? - тип һораған ул уйсан Зирәклектән.**

**- Һине Ваҡыт ҡотҡарҙы, - тип яуаплаған ул.**

**- Ваҡыт?**

**- Эйе, Ваҡыт. Мөхәббәттең ҡиммәтен, Мөхәббәттең ҡәҙерен Ваҡыт ҡына аңлай ала шул..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 2422/12